ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 февраль (шаҡай)

2017

№7 (737)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Тотош Башҡортостанды яратайыҡ!**



5

**Атай ғорурлығы - ир балала ...**

йәки малайҙарҙы тәрбиәләү алымдары тураһында



6

**Белеме булғандар ғына...**

руль артына ултырырға тейеш



8-9

**Һан менән түгел,**

сифат менән алдырабыҙ



11

**ТВ-программа** 14


**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Февраль башынан 31 мартҡа тиклем 2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә (индекс 50665) ваҡытынан алда арзаныраҡ хаҡҡа яҙылыу иғлан ителә, йәғни был осорҙа баҫмабыҙға яҙылыу 469 һум 92 тин, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, I һәм II төркөм инвалидтары өсөн 423 һум 96 тин тәшкил итәсәк. Ә тәүге ярты йыллыҡта гәзитһеҙ ҡалғандар 17 мартҡа тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе апрелдән алдыра башлау мөмкинлегенә эйә (өс айға - 244 һум 70 тин).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең тәрбиәгеҙҙә атайығыҙ өлгөһөнөң, атайығыҙ абруйының өлөшө ниндәй булды?

***Хөрмәтулла УТӘШЕВ, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге премия лауреаты:*** Атайым боронғо башҡорт батырҙарына хас бөтөн сифаттарға эйә ине. Ул көрәшсе лә, йыраусы ла, тарихты ла яҡшы белә, һунарсы ла ине. Беҙҙең быуын атайҙарының иңендә илгә хеҙмәт итеү бурысы ятты, беҙ уларға эйәреп, эшләп үҫтек. Ғөмүмән, атай өлгөһө - атайҙың үҙенең эшләгән эштәренән, булмышынан күсә ул, баланы, һин шулай, тегеләй бул, тип аҡыллы һүҙ һөйләп кенә тәрбиәләп булмай. Сөнки, нисек кенә тәрбиәләмә, ул барыбер һинең үҙеңә оҡшаясаҡ. Беҙҙең ғаиләлә уҡыуҙы, тәртипте әсәй күҙәтте. Ә атай аҙ һүҙле, үҙенең фекерен ҡыҫҡа ғына итеп белдерә, йә күҙ ҡарашы менән генә төшөндөрә. Уның бер генә ҡарап ҡуйыуы ла етә ине, ҡайыш та, "аҡыл сыбығы" ла булманы. Атай ауылда, районда билдәле көрәшсе, көслө кеше булды, кешеләрҙең уға ҡарата ихтирамын да тоя инек. Уның абруйы ла беҙҙе насар ҡылыҡтар ҡылыуҙан һаҡлағандыр.

Йорттағы бөтөн ир-ат эшенә атай мине лә, ҡустыларымды ла йәлеп итте. Шуға ла ир-егет һөнәрҙәрен белеп үҫтек. Башлап үҙенә эйәреп башҡарһаҡ, артабан үҙең белеп эшләй башлайһың, быны үҙеңдең бурысың итеп күрәһең. Был ғаиләлә үҙеңде кәрәкле кеше итеп тойорға булышлыҡ итә, хеҙмәтсә кешеләрҙең хеҙмәтеңдән ҡәнәғәт, тип әйтеүе кеше өсөн ҙур ҡәнәғәтлек тойғолары уята ине. Үҫмер саҡтан уҡ колхозға эшкә сыға инек, мәҫәлән, беҙҙең ауылда республикала иң ҙур һарыҡ комплексы булды, унда 12 меңләп һарыҡ көтәләр ине. Физик йәһәттән дә сәләмәт булып үҫкәнбеҙ эш эшләп, һарыҡ ҡырҡҡанда көнөнә меңәрләгән һарыҡты йөҙҙәрөп тороу ҙа көс талап иткән бит. Әсәйҙең кассанан аҡса алып ҡайтып, быны был һинең эшләп тапҡан аҡсаң, тип әйтеүе ҙур ҡәнәғәтлек тойғолары уята ине. Кемдеңдер нимәлер эшләүен күрәһегеҙ икән, көсөгөҙ етәме, юҡмы, ҡарап тормағыҙ, ярҙам итегеҙ, тип әйтә ине гел генә атай. Быны ошо тәрбиә нигеҙе бөгөн дә мине бер туҡтауһыҙ хәрәкәт иттерә, иленә, халҡына, ғаиләңә файҙалы кеше булырға өйрәтте беҙҙе атайҙар үҙ өлгөһөндә.

Атайым абруйы менән тәрбиәләһә, мин улдарыма күберәк дуҫ, иптәш, тиңдәш булырға ынтылдым. Балалар үҫкән саҡта уларҙың һәр осоро ҡыҙыҡлы һәм мөһим, уларҙы яратырға һәм гел иғтибар бүлергә кәрәк. Улдарым да миңә хөрмәт менән ҡарайҙарҙыр, тип ышанам, һәр хәлдә, улар беҙҙең исемгә тап төшөрмәйҙәр, шөкөр.

***Ринат МӘҺӘҘИЕВ, хирург-онколог:*** Ир бала өсөн атай, иң тәүҙә, физик һәм психологик ярҙам күрһәтеүсе, терәк. Шуға ла уның өсөн абруй булырға ынтылырға кәрәк - был бигерәк тә бөгөнгө заманда кәрәк. Эшем күп, ваҡытым юҡ, тип йөрөһәң, өлгө була алмаһаң, ул ундай кешене ситтән эҙләйәсәк, насар компанияларға тарыуы ла ихтимал. Беҙ үҫкән мәлдә еңелерәк кеүек ине, өйҙә атай-әсәйҙән тыш, мәктәптә уҡытыусылар ҙа беҙҙең өсөн абруйға эйә ине, улар үткәндә бүректе сисеп иҫәнләшеп тороп ҡала инек. Атайым үҙе үкһеҙ етем, өләсәй ҡулында ғына үҫкән. Сөнки атаһы сәйәси золом ҡорбаны тип ҡулға алынып, атыла. Ҡурайсы булды, совет осоронда халыҡ таланттары артистар менән бергә сығыш яһай ине, атайым да гастролдәргә йыш йөрөнө. Мине уҡытырға тырышты һәм бер теләгемә лә ҡаршы килмәне. Алдыңа алған маҡсатыңа өлгәшеү өсөн бар тырышлығыңды һалырға кәрәк икәненә лә мин унан өйрәндем. Өсөнсө класта рус теленән имтихан бирә алмау сәбәпле, бер нисә уҡыусы күсмәй, класта ултырып ҡалдыҡ. "Ана, һыйыр көтөүсе Әбүзәр апаң хаҡлы ялға сыҡҡанда оҙон сыбыртҡыһын һиңә бирермен тине, көтөүсе булырһың инде былай булғас", - тиеүе генә етте, мин донъялағы бөтөн ауырыуҙарҙы еңергә тигән хыялымды иҫкә төшөрҙөм һәм тырышып уҡый башланым. Хәҙер, табип буларак, бушҡа ғына кешенең затына, нәҫелырыуына иғтибар итмәйҙәр икәненә лә инанғанмын. Шәжәрә төҙөгәндә нәҫелебеҙҙә уҡымышлылар күп икәне асыҡланды, уларҙың араһында Хажмөхәмәт Яҡшымбәтов бар, уның ҡыҙы Фатима Әхмәтзәки Вәлидиҙең ҡатыны була.

**(Дауамы 2-се биттә).**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ӘРМЕГӘ БАРҺЫН ЕГЕТТӘР

***Әмир ӘМИНЕВ, яҙыусы:*** Заман башҡа - заң башҡа, тибеҙ, был бигерәк тә йәштәрҙең Ватан алдында бурысын ҡайтарыуға ҡағыла. Бик күп ваҡыт та үтмәне кеүек, әммә йәш быуын ир-егеттәре Ватанды һаҡлау мәсьәләһенә бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡарай башланы. Беҙҙең быуын быны бурыс тип ҡабул итһә, йәштәр иһә, ваҡытты бушҡа үткәреү, тип һанай. Үҙем үткән быуаттың 70-се йылдарында хәрби хеҙмәт үттем, ул заманда армияға бармаған егеткә иғтибар, хөрмәт юҡ ине. Хеҙмәт итеп ҡайтмайынса, юғары уҡыу йортона инмәй, эшкә төшмәй, йә кәләш әйттермәй инеләр. Һалдат булыу почетлы миссия итеп ҡабул ителде, егеттәр ҙә атлығып торҙо. Хәрби хеҙмәткә барып ҡайтыу бушҡа ваҡыт уҙғарыуға тиңләнмәне, ул егеттәр өсөн донъяға ҡарашын үҙгәртеп, физик яҡтан сынығып, тормош күреп ҡайтыуҙың бер ысулы иҫәпләнде.

Бөгөн дә йәш егеттәр ошо мәктәпте үтергә тейеш, шуға бала саҡтан Ватан алдында бурысыңды ҡайтарыуҙың мөһимлеген аңлатып үҫтерергә кәрәк. Мәҫәлән, элек беҙ әрмелә буш ваҡытта китапханаға йөрөнөк. Үҙем хеҙмәт иткән осорҙа Ленинградта урынлашҡан частың китапханаһында булған бик күп әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡып сығыуым хәтерҙә, гәзит-журналдар һәр ваҡыт булды. Взвод командиры аптырай торғайны хатта. Ә бөгөн модернизация заманы, һәр урында техниканы белеү талап ителә, йылдан-йыл яңылыҡтар индерелеп тора. Һалдаттар ҙа был яңылыҡтарҙан ситтә ҡалмай, уларға ла компьютер, электрон приборҙар, бихисап яңы аппаратуралар менән ҡуллана белергә өйрәтәләрҙер. Шуға китапханаларҙа шөғөлләнмәһәләр ҙә, һалдат булған осорҙа ҡыҙыҡһынып өйрәнерлек нәмәләр күптер, тип уйлайым.

Хәрби хеҙмәт үтәүҙе ауырлыҡ килтергән, кәрәкмәгән нәмә итеп ҡабул итмәһен ине йәштәр. Башҡорттарҙың борондан ил өсөн, тыуған ере һәм азатлығы өсөн көрәшкә инергә әҙер торған һуғышсан халыҡ булыуын барыһы ла белә. Үҙебеҙ ҙә был турала онотоп китмәйек. Әлбиттә, бөгөнгө заманда береһен дә физик көс менән аптыратып булмай, бөтә мәсьәләләр ҙә аҡыл менән, һүҙ ярҙамында хәл ителә. Ләкин әрмелә бары тик физик көскә таянырға кәрәк, тигән һабаҡ бирмәйҙәр. Илдең төрлө тарафынан йыйылған егеттәр бер-береһе менән аралашырға, бер маҡсатта эшләргә, ҡушҡанды үтәргә өйрәнеп ҡайта. Бик кәрәкле, файҙалы тәрбиә мәктәбе ул әрме.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең тәрбиәгеҙҙә атайығыҙ өлгөһөнөң, атайығыҙ абруйының өлөшө ниндәй булды?

**(Башы 1-се биттә).**

Сибай медицина училищеһында физкультура уҡытыусыһы Әйүп Ғайсин ихтыяр көсө тәрбиәләне, теүәллек яратыуым, ныҡышмалылығым спорт менән шөғөлләнеүҙән барлыҡҡа килде. Әрме лә егет кеше өсөн ҙур мәктәп. Шуға ла сәләмәтлеге булһа, егеттәр хеҙмәт итергә тейеш, тигән фекерҙәмен. Үҙаллы ҡарар ҡабул итергә өйрәтә ул. Бер аҙ ситтә йөрөп килеү ир кешене сыныҡтыра, киләсәктә ауырлыҡтарҙа еңеп сығырға көс-ҡеүәт бирә. Бөгөн мәктәптәрҙә башланғыс хәрби әҙерлек дәрестәрен, уҡыу йорттарында хәрби кафедраларҙы ябып бөттөләр, ә ватансылыҡ тойғоһон тәрбиәләүҙең иң ябай юлы шул ине. Күңелендә иле, халҡы өсөн яуаплылыҡ тойғоһо булғандар ғаиләһе, балалары өсөн дә ҡалҡан була ала.

Атанан күргән - уҡ юнған, ти халыҡ. Улым да, ҡыҙым да табип һөнәрен һайланы. Беҙҙең ғаиләлә һүңлап йөрөү, алдашыу, ялҡауланыу хупланмай, бөтөн эштәрҙе алдан планлаштырырға күнектергәнмен. Бергәләп әүҙем ял итергә яратабыҙ, сәйәхәт итәбеҙ, концерттарға, футбол, хоккей матчтарына йөрөйбөҙ. Фекерҙәрен тыңлайым, дөрөҫ уйламаһалар ҙа, юҡ, тимәйем, уйлап ҡына йүнәлеш бирәм.

***Заһир ИШКИН, ӨДАТУ-ның бүлек мөдире:*** Өйләнгәс түгел, ә тәүге бала тыуғас, ир булараҡ өлкәнәйәһең икән - күптәр килешер минең менән. Тап ошо ваҡиға һинең тормошоңдо үҙгәртә. Бала һине таный, эштән ҡайтыуыңды ҡыуанып ҡаршылай башлаһа, үҙең дә үҙгәрәһең, уға кәрәкле кеше булыуыңды аңлайһың. Атай - ул өлгө, тормошта йүнәлеш биреүсе, әммә бында әсәйҙең дә роле ҙур. Әгәр ҙә ул уның абруйын ҡабул итмәһә, ихтирам итмәһә, балалар өсөн атайҙың һүҙе әһәмиәткә эйә булмаясаҡ. Был йәһәттән әсәйем бер ҡасан да атайым менән беҙҙең араға ҡыҫылманы, киреһенсә, атайығыҙ нимә әйтер, кәңәшләшәйек, тип кенә тора. Ҡустым менән икебеҙ ҙә атайға эйәреп йөрөүҙе ғорурлыҡ һанай инек, ул беҙҙе үҙе менән балыҡҡа алһа ла ҙур шатлыҡ ине. Тәбиғәтте яратырға, ҡоштарҙы, йәнлектәрҙе, ағастарҙы, үләндәрҙе танырға ла өйрәтте бәләкәй саҡта. Йылға буйлап һалда ағып төшә инек, бында физик йәһәттән әҙерлек тә һынала. Ауылда йәшәһәк, былар ғәҙәти күренеш булыр ине, әммә ҡала шарттарында ошоға өлгәшә алыуы яҡшы тип уйлайым. Үҙе йырламаһа ла, башҡорт халыҡ йырҙарын атайға ҡушылып тыңлап, үҙебеҙ йырларға өйрәндек. Ҡурайҙа уйнамаһа ла, ул алып ҡайтҡан ҡурайҙан тауыш сығарырға өйрәнеп, ҡустым да, мин дә үҙ аллы уйнарға өйрәндек. Атайым эшләй белмәгән бер эш тә юҡ, хәҙер үҙемдең ике улым да минең турала шулай әйтерлек булһын ине, тип тырышам. Уларға нимәлер эшләргә, ҡайҙалыр барырға һүҙ биргәнмен икән, мотлаҡ үтәйем, сөнки атайҙар алдаҡсы була алмай. Өлкән улым миңә бөтөн эште лә эшләшә. Өй һалғанда ла көсө етмәгән эшкә лә ҡыҫыла, хатта бетон иҙелмәһе нисек яһалғанына тиклем белә. Балалар баҡсаһында ҡайҙандыр инструменттар йыйып алып, ишектәрҙе ремонтлап ҡаңғыра. Халыҡ йырҙарын да, ҡурайҙы ла, батырыбыҙ Салауатты ла белә. Шулай уҡ әсәйҙе яратырға, уға ярҙамлашырға, сәскә бүләк итергә кәрәклекте лә беләләр. Быларҙы ла улар ғаиләлә күреп үҫергә тейеш. Мин дә шулай яҡшы атай булырға ынтылам.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# БАТШАЛАР ФӘЙЛӘСҮФКӘ ӘЙЛӘНҺЕН...

**Күптәрҙең был анекдотты ишеткәне лә барҙыр. Уны миңә йәһүд ҡыҙы, курсташым Таня Эпик һөйләгәйне. Йәһүдтәр үҙҙәре лә аҡыллы, хәйләкәр булыуҙары хаҡында төрлө көләмәстәр һөйләргә ярата бит.**

Бына бер йәһүд егетен әрмегә саҡырғандар һәм һорау биргәндәр: "Һиңә шинель бирәйекме, әллә тунмы?" Ул: "Әлбиттә, тун", - тигән, уйлап та тормай. Тағы һорайҙар: "Һиңә пилотка бирәйекме, әллә бүрекме?" "Бүрек, әлбиттә", - тигән егет. "Һиңә автомат бирәйекме, әллә пистолетмы?"- тигән һорауға егет киң йылмайып: "Бәй, ни өсөн бөтәһен дә миңә бирәһегеҙ, ә Иванға? Иванға бирегеҙ", - тигән.

Был көләмәстәге "Иван" тигәндә Рәсәйҙең төбәктәрендә йәшәгәндәрҙе күрәм мин. Уларҙы һаман да Рәсәйҙең бөтмәҫ һуғыштарында һалдат итеп кенә күргеләре килә. Ә Мәскәү, Питерҙа йәшәүселәрҙең автомат, пистолет тотҡолары килмәй. Улар йылы ғына кейенеп, штабта ултырыуҙы хуп күрә. Әлбиттә, башҡорт халҡының бөйөк улы Салауат Юлаев, мишәр улы Ҡәнзәфәр Усаев һәм башҡаларҙың, хәрби белемле булмаһалар ҙа, уҡ-һаҙаҡлы, ябай пушка, мылтыҡ ярҙамында һуғышҡан заманаларҙа хәрби етәксе һәләттәре ғәжәп көслө булыуын беләбеҙ. Әммә хәҙер XXI быуат. Армияға махсус белемле хәрби етәкселәр талап ителә.

Халҡыбыҙҙың бер әйтеме иҫкә төшә: "Кытайға барып булһа ла белем ал". Үҙәктең әйләнгән һайын мәғәнәһеҙ, төплө уйлап еткерелмәгән үҙгәртеп ҡороуҙар, реформалар үткәреп, халыҡты ҡаңғыртыуы ҡайҙан? Медицина белеменә эйә булмаған кешеләрҙе һаулыҡ һаҡлау министры итеп (ундай замандар булды бит), бер көн дә әрме хеҙмәтен үтмәгән кешене оборона министры итеп күтәреү, йәғни яуаплы урындарҙағы белгестәрҙең үҙ урынында булмауынандыр, тип тә фекер йөрөтөргә була.



Әйткәндәй, боронғо грек философы Диоген әйтеп ҡалдырған бит: "Донъя ҡасан сәскә атасаҡ? Батшалар фәйләсүфкә әйләнгәндә, фәйләсүфтәр батшалыҡ иткәндә". Фәйләсүфтәр илде етәкләгән заманалар булғанмы һуң? 500 йыл элек Флоренцияла, тарихта "Кватроченто" тип аталып ҡалған йылдарҙа, шиғриәтте, философияны яратыусы, ҡурсалаусы, асыҡ, ҙур китапхана төҙөүсе Лоренцо Медичи хакимлыҡ иткән. Ул йылдар - гуманизмдың тантана итеү йылдары. Тарихта уның үҙен "Лоренцо Великолепный" тип атайҙар. "Гуманизм тантанаһы" буш хыял ғына түгел икәненә инанып йәшәйек.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Бала тыуғанда йәш ғаиләләргә бер тапҡыр бирелә торған социаль түләүҙәр программаһы 1 миллиард һумдан ашасаҡ. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов белдерҙе. "Әле беҙ республика Башлығы Указы проектын әҙерләйбеҙ, уға ярашлы беренсе балаһы тыуған йәш ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү ҡаралған. Тәү сиратта исемлеккә торлаҡҡа мохтаждар индерелә, ә ундайҙар беҙҙә күп", - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республиканың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы коллегияһында сығыш яһаны. Ул ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарына, сәнәғәт предприятиеларының һауаны бысратыуына һәм техноген авариялар хәүефенә бәйле хәлде, заманса ямғыр канализацияһының юҡлығын, эшҡыуарлыҡ вәкилдәре яғынан "экологик хулиганлыҡ"ты төп экологик мәсьәләләр иҫәбендә булыуын билдәләне.

✓2017 йылда Өфө районында игенде тәрән эшкәртеү буйынса завод төҙөү күҙаллана. Был турала Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов хәбәр итте. Завод ҡеүәте йылына 40 мең самаһы иген тәшкил итәсәк. Предприятие мал глютены, декстроза-фруктозалы шәкәр, аҡһымлы витамин-минераль концентрат һәм башҡа ҙур һорау менән файҙаланған продукция сығарырға ниәтләнә.

✓Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Телеүҙәк" тапшырыуы "Киң мәғлүмәт саралары сағылышындағы ҡала" халыҡ-ара конкурсында беренсе урын яуланы. Ул "Хәүефһеҙ ҡала" номинацияһында иң яҡшыһы булды. Конкурсҡа "Хәүефле күршелек" һәм "Хәүефһеҙ туҡталыш" сығарылыштары йүнәлтелгән. "Ҡала киң мәғлүмәт саралары күҙгөһөндә" конкурсы Бойондороҡһоҙ дәүләттәр берләшмәһенең Баш ҡалалар һәм ҙур ҡалаларҙың халыҡ-ара ассамблеяһы тарафынан ойошторола һәм унда йыл һайын миллионлы ҡалаларҙан йөҙҙән ашыу гәзит һәм теле-радиокомпания журналистары ҡатнаша.

✓"Рәсәй 24 Башҡортостан" телеканалы үҙенең күрһәтеү зонаһын киңәйтте. Бынан һуң уның тапшырыуҙарын HD форматында Өфөлә генә түгел, Стәрлетамаҡта, Ишембайҙа, Нефтекамала, Октябрьскийҙа һәм Салауатта ла ҡарарға мөмкин. Көн һайын телеканалда мәғлүмәт, аналитика һәм иҡтисад проекттары эфирға сыға. Төбәк блоктары "Рәсәй 24" каналында көнөнә өс тапҡыр - көндөҙгө икенсе яртыла, киске сәғәт 7-лә, һәм 10-да күрһәтелә.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ИР АБРУЙЫН КҮТӘРЕҮГӘ...

## мөнәсәбәт һәм һүҙ кәрәк

**Яңыраҡ ҡына урамда үҙемдең бер танышымды осратып, хәл-әхүәлдәр тураһында һөйләшеп торҙоҡ. Ул иренең эсеүҙән туктай алмауы, ғаиләлә шул арҡала ыҙғыштар тыуыуы тураһында зарланып алды. Улының шәп кенә итеп атаһын "аҡылға ултыртыуы" тураһында ла һөйләп китте ул. "Миңә һинең улың йәл, нисек итеп ул үҙ атаһына ҡул күтәрә алды һуң?" - тигән һорауыма ул: "Атаһы үҙе ғәйепле бит, улым мине яҡлап шулай итте", - тиеүенә аптырай ҡуйҙым.**



Минең уйымса, балалар атайҙы ла, әсәйҙе лә берҙәй яратырға тейеш. Ниндәй генә хәл килеп сыкмаһын, бала - үҙ урынында, ата-әсә үҙ урынында ҡалырға тейеш. Бөгөнгөләй хәтеремдә: ҡасандыр беҙҙең илдә бөтә эшеңде "бер ярты" хаҡына ғына тиңләгән ваҡыттарҙа бер әсә улына әйткәйне: "Бына, улым, һин үҫеп егет булырһың, бәләкәй сағыңда атайың гел иҫереп йөрөп нисек беҙҙе ыҙалатты, үҫкәс, шуның өсөн атайыңдың кәрәген бирерһең". "Юҡ, әсәй, мин атайыма бер ҡасан да ҡул күтәрмәйәсәкмен, ул бит минә атай, нисек итеп аҙаҡ уның күҙенә ҡарармын?" - тип яуаплаған ине теге үҫмер малай.

Әлбиттә, атай кешенең ғаиләлә тотҡан урынын әйтеп аңлатып тороу ҙа кәрәкмәй. Ул бөтә ғаилә ағзаларының ҡарап торған өлгөһө, ҡәлғәһе ул. Күп атайҙар шундай сифаттарға эйә лә. Балаларын атайһыҙ үҫтергән ҡатындарға икеләтә ауырға төшә. Матди яҡтан да, тәрбиә эшендә лә ата ролен дә, әсә ролен дә үтәргә тура килә уларға.

Ярай ҙа ғаиләлә балаға олатай, бүтән ир туғандары өлгөһө булһа. Юғиһә, күп кенә ир балалар сөй ҙә ҡаға белмәй үҫәләр. Атаәсәле бала - иң бәхетле бала, тип иҫәпләйем мин. Әсәй балаға ни тиклем ҡәҙерле булһа, уға атай ҙа шул тиклем кәрәк.

Бәләкәй саҡтарҙа бергә уйнап үҫкән ахирәттәремдең береһе йыш ҡына атаһын уйлап, ҡайғырып илай торғайны. Уның атаһы, ул бәләкәй генә саҡта әле, апрель айында ҡыуғында һыуға батып үлгән булған. "Минең атайым, эх, тере булһын ине, эскесе булһа ла, һуғышсаҡ булһа ла, риза булыр инем", - тип әйтер ине. Уның ҙур ҡайғыһын беҙ, бәләкәй балалар, уртаҡлашып, бергәләп илай торғайныҡ.

Йәш саҡта йүнәлтмә буйынса икенсе ауылға эшкә килгәс, унда буласаҡ тормош иптәшем менән танышҡас, ауылыма ҡайтып, атай-әсәйемә уның һағын тәкдимен әйтергә булдым. "Һинең турала атай-әсәйемә нимә тип әйтермен икән?" - тигән һорауыма ул: "Атайың, әсәйе бар, тип әйт," - тип яуапланы. Был һүҙҙәрҙең асылына мин йылдар үткәс кенә төшөндөм. Баҡһаң, ул йәш ваҡытында уҡ кешенең иң ҙур байлығы, бәхете - атай-әсәйле булыуҙа икәнен белгән икән. Мин тормош юлдашымдың атай-әсәйен иң беренсе планға ҡуйыуына әле лә һоҡланам.

Ғаиләнең ныҡлыгын тәьмин итеүҙә, атайҙың абруйын төшөрмәүҙә әсәй кешенән күп нәмә тора. Мәҫәлән, берәй мәһим ҡарарға килгәндә балаға ошолай тип өндәшеү кәрәктер: "Балам, атайың - аҡыллы кеше, ул нимә тип әйтер, унан һорап ҡара..." һ.б.

Беҙҙең ғаиләлә лә атайым төп һүҙҙе әйтер ине. Етди берәй эш килеп сыҡһа, атайымдан кәңәш һорай торғайныҡ (ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, атайым 91-се йәшендә яңыраҡ гүр эйәһе булып ҡуйҙы. Ауыр тупрағы еңел, йәне йәннәттә булһын). Күмәк ғаиләлә үҫкәс, әсәйем ашты иң беренсе атайыма һалып бирер ине. Йоморо икмәкте лә атайыма тоттороп, атайым уны ипләп кенә бысаҡ менән киҫер ине. Атайым ашты башлап ауыҙ иткәс кенә, беҙ, балалар, ашарға тотонор инек.

Заман башҡа - заң башҡа, тиһәләр ҙә, ғаиләләге ҡайһы бер ҡанундар барыбер үҙгәрешһеҙ ҡала. Мәҫәлән, балалар алдарында торған ҡайһы бер һынауҙарҙы үҙаллы, ата-әсәнең кәңәшенән тыш, башҡарһалар, яңылышыуҙары ла мөмкин. Тормош тәжрибәләре булған атайәсәй уларҙың иң кәрәкле, аҡыллы кәңәшселәре. Ғаилә кәңәшмәләрендә бөтәһе лә ҡатнашырға тейеш. Күмәк эштең аҙағы һәр саҡ хәйерле. Аяҡ өҫтө генә түгел, йәйләп, аҡыл менән эш итеү - ғаилә кәңәшмәһенең төп шарты.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәштәргә әйтер һүҙем: балаларығыҙҙы атай-әсәй һөйөүенән мәхрүм итмәгеҙ. Ғаиләне тотоп торған ике ныҡлы терәкте лә һаҡларға тырышығыҙ. Ә инде хәҙерге заманда олоғайған атайәсәйеҙгә хат яҙыу, барып күреү мөмкинлеге әллә ни әһәмиәтле булмаған ваҡытта, телефоныгыҙҙы ғына алып, уларға шылтыратығыҙ. Уларға һеҙҙән бер ни кәрәкмәй, бары тик бер нисә һүҙгә мохтаждар улар: "Һаумыһығыҙ, атай, әсәй! Минең барыһы ла һәйбәт..."**

*Әлфиә ЗӘБДИНОВА,*
*уҡытыусы,*
*хеҙмәт ветераны.*

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# БАХЫРҒА ТҮГЕЛ, БАТЫРҒА ТАЯН

?

**Ни өсөн ҡайһы берәүҙәр ауыҙынан: "Беҙ бөлдөк, беҙ элекке башҡорт түгел. Беҙҙең башҡорт заманға яраҡлаша алманы инде", - тигән күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән һүҙҙәр ишетелә? "Булыр илдең балаһы бер-береһен батыр тиер, бөлөр илдең балаһы бер-береһен бахыр тиер", - тигән әйтем телгә килеп, хәүефләнеп тә ҡуйыла. Ошо хәүефләнеүҙе гәзит укыусыларыбыҙ менән уртаҡлашыуҙы дауам итәбеҙ:**

***Наил ҒӘЙЕТБАЕВ, драматург:*** Башҡорт халҡы - бик боронғо халыҡ. Күпте күргән, тәжрибә туплаған. Азатлыҡ яулап байтаҡ ихтилалдарҙа ҡатнашҡан, илен ҡурсалап, һуғыштарҙа күп ҡан түккән. Ул йәшәүҙең мәғәнәһен, асылын аңлаған, ысын ҡиммәттәрҙе ялғандан айыра белерлек аҡыл туплаған. Булғанына ҡәнәғәт итә белә, байлыҡ тип артыҡ сапмай. Фани донъяла йәшәү өсөн артыҡ байлыҡ туплауҙың һис кенә лә кәрәкмәгәнен, рухи байлыҡтың күпкә өҫтөн булыуын яҡшы аңлай. Аҡса, аҡса, тип, бар йәшәү маҡсатын байлыҡта күргән Американың ниндәй әхлаҡһыҙлыҡҡа төшкәнен бөтөнөбөҙ ҙә күрәишетә беләбеҙ.

Бәхет - ул аҡса ла, байлыҡ та түгел, иң элек, күңел тыныслығы. Быны аҡһаҡал аҡылына эйә булған зирәк халҡым яҡшы аңлай. Әммә был бахырлыҡ түгел, ә фәлсәфәүи халыҡтың йәшәү мәғәнәһен аңлауы. Быны аңларлыҡ дәрәжәлә булмағандарҙың бахырланыуын күреүе ҡыйын. Бахыр кешеләр, бахыр халыҡ байлыҡ тип үлә, аҡыллы кеше, аҡыллы халыҡ байлыҡтың ваҡытлы икәнен аңлай.

***Гөлләрә ИҪӘНБАЕВА, хеҙмәткәр:*** Бахырланыуҙы мин үҙем аҙым һайын тоя, күрә йөрөйөм. Баҙарҙа, урамда, эш урынында. Баҙарҙа, мәҫәлән, мин гел генә бер башҡорт ҡыҙынан емеш-еләк һатып алам. Минең менән асылып китеп үҙебеҙсә һөйләшә лә, башҡалар менән телен боҙабоҙа татарса һупалай башлай. Бер ваҡыт тәнҡитләнем тегене. "Эй, апай, башҡортса һөйләшә башлаһаң, көләләр, яратмайҙар бит", - ти был. Үҙендә һәм теләндә нисек хөрмәт иттерергә өйрәтеү тураһында байтаҡ нотоҡ уҡыным үҙенә. Был бахырланыуҙың бер миҫалы инде.

Бына миңә гел генә бер нисә төрлө милләт вәкиленән торған коллективтарҙа эшләргә тура килде. Ҡайҙа ғына эшләһәм дә, миңә хөрмәт менән, ошо республиканың, ошо ерҙең төп хужаһына ҡараған кеүек ҡаранылар, һәр мәсьәлә буйынса миңә кәңәш менән мөрәжәғәт иттеләр. Башҡортостаныбыҙҙың, халҡыбыҙҙың тарихын яҡшы белеүем, мәҙәниәт, сәнғәт буйынса ниндәй булһа ла һорауға яуап бирә алыуым, театрҙарға, концерттарға йөрөү әүҙемлегем, әлбиттә, төп вазифамды урынына еткереп башҡарыуым миңә коллективтың уртаһында булырға ярҙам иткәндәр, тим. Шуның өсөн, әгәр һин башҡорт икәнһең, үҙеңдә туктауһыҙ камиллаштыр, үҫтер, уҡы, "Һин башҡаларҙан яҡшыраҡ булырға тейешһең, сөнки һин ошо ерҙең төп хужаһы һәм һин һәр кемдең күҙ алдында", тигәндә аңыңа һеңдер. Ә инде быларҙы эшләмәйһең икән, "Беҙҙе яратмайҙар, телебеҙҙән көләләр", тип, үҙ булдыҡһыҙлығыңды милләткә япһарма. Шундай кәңәш бирге килә милләттәштәремә. Әлбиттә, был кәңәш татар ҡәрҙәштәргә лә ярап ҡалыр. Улар араһында ла күп меҫкенләнергә яратыусылар. "Башҡортостанда татарҙарға көн юҡ", тип лаф ороу - шул уҡ меҫкенләнеүҙең бер миҫалы бит. Татарҙың аҫылы улай тип әйтмәҫ, сөнки ундай һығымта яһарға, берҙән, сәбәп юҡ, икенсенән... Әйттем инде, үҙ булдыҡһыҙлығыңды тотош милләт исеменән һөйләп аҡларға тырышыу - енәйәт.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Салауат Юлаев" хоккей клубының "алтын тренеры" Сергей Михалев хөрмәтенә Өфөләге урамға исем биреү күҙаллана. Шундай башланғыс менән Өфөнең Киров районы рәсми төркөмөндә хоккей клубы көйәрмәндәре сығыш яһаны. Унда Яңы күпер һәм Салауат Юлаев проспекты эргәһендәге яңы урамға исем биреү буйынса тәкдимдәр йыйыла. Өфө ҡала советы етәкселеге тәкдимгә ҡаршы булмауын белдерҙе.

✓Өфөлә Мәхмүт Ҡашғари исемендәге IV Халыҡ-ара хикәйәләр конкурсының төбәк этабына йомғаҡ яһалды, еңеүселәргә премиялар тапшырыу тантанаһы үтте. Беренсе урынды яҙыусы Таңсулпан Ғарипова яуланы. Икенсе урынды "Барабансы" хикәйәһе өсөн яҙыусы Сабир Шәрипов алды. Өсөнсө урынға Бөрйән районынан укытыусы Миннур Ҡасимова лайыҡ булды. Авторҙарға Евразия Яҙыусылар союзы премиялары тапшырылды. Яҙыусылар Тамара Искәндәрио, Әхмәр Үтәбай, Мөнир Ҡунафин махсус призлар менән бүләкләнде.

✓М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының "Держава" барабансылар һәм мажореткалар төркөмө Францияла Халыҡ-ара карнавалда ҡатнаша. Байрам 17-23 февралдә Ницце ҡалаһында ойошторола. Ансамблгә ошо сарала ҡатнашырға Франция ҡалаһы мэрияһы, Рәсәйҙең Батон Твирлинг һәм мажореткалар федерацияһы, Мажореткалар һәм барабансылар ассоциацияһы тәкдим иткән.

✓Өфөлә Нестеров исемендәге музейҙың тарихи бинаһы - Гоголь урамындағы Лаптевтар йорто янында тәҙәләш алып барыу тыйылды. Мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова мәҙәниәт ҡомартҡыһының сиктәре һәм биләмәне файҙаланыу режимы тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Бынан һуң ошо биләмәлә яңы объекттар төҙөү һәм булғандарын реконструкциялау тыйыла.

✓Өфөлә "Башҡортостандың йәш киноһы" икенсе республика фестивале уҙасаҡ. 21 февралдә баш ҡаланың "Родина" кинотеатрында Өфөнөң башланғыс кинематографсыларының төүге картиналары күрһәтелә. Тамашасылар Башҡортостандың һәләтле йәш кинорежиссерҙары, республика һәм Рәсәй кинофестивалдәре еңеүселәре менән аралаша аласаҡ. Фестивалгә килеүселәргә йәмғеһе биш ҡыҫҡа метражлы фильм тәҡдим ителәсәк. Сараны ойоштороусылар - Башҡортостан Кинематографсылар союзы һәм берекмәнең Йәштәр үҙәге.

**"Башинформ"дан.**

ҠЫҪҠАСА

# ӨФӨ ЦИРКЫ ЯБЫЛА...

✓ **Баш ҡаланың төп циркына ябылыу хәүефе янай. Октябрь районы прокуратураһы шуны талап итә.** Ведомство бина тамашасыларҙың һәм цирк хеҙмәткәрҙәренең ғүмеренә һәм һаулығына хәүеф тыуҙыра, тигән һығымтаға килгән. Тейешле ғариза "Рәсәй дәүләт цирк компанияһы"на ебәрелгән. Прокуратура һығымтаһына ярашлы, Өфө дәүләт циркын артабан тулыһынса файҙаланыу мөмкин булмаясаҡ. Әле циркта программа эшләй, ул 26 февралгә тиклем дауам итә. Рәсәй дәүләт циркы системаһына ингән циркtар 60-70-се йылдарҙа төҙөлгән. Шул ваҡыттан бирле улар бер тапҡыр ҙа ремонтланмаған. 2015 йылда Иваново һәм Тула циркtары файҙаланыуға тапшырылды. 2016 йылда Санкт-Петербург һәм Омск циркtары төҙөкләндерелде. Быйыл Рязань, Түбәнге Тагил, Владивосток циркtарына капиталь ремонт үткәреү ҡаралған. 2018 йылда Кисловодск, Красноярск һәм Өфө циркtарында ремонт эштәре күҙаллана.

✓ **Өфөлә классик шахмат буйынса балалар беренселеге башланды.** Быйыл турнирҙа 300-ҙән ашыу малай һәм ҡыҙ ҡатнаша - был ошондай ярыштар уҙғарыу ваҡытында иң күп ҡатнашыусылар һаны, тип билдәләнеләр баш ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә. Иң кесе спортсыға - биш йәш, иң өлкәненә - 16. Биш ярымфинал уйыны 15 мартҡа ҡәҙәр уҙа. Ярымфиналдар Дим районында һәм ҡала үҙәгендә (икеһе лә 19 февралдә тамамлана) башланды. Һуңынан ярымфинал зона осрашыуҙары ҡаланың көньяҡ-көнбайыш өлөшөндә (23-26 февралдә), Сипайлово бисҭәһендә (27 февралдән - 5 мартҡа ҡәҙәр), "Төньяҡта" (4-8 мартта) үтә. Финал 25 марттан 30-на тиклем уҙа. Еңеүселәрҙе 4 апрелдә иғлан итеү күҙаллана.

✓ **Өфөлә "Рәми Ғариповҡа 85 аҙым" әҙәби акцияһы уҙҙы. Ул Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 85 йыл тулыуға арналды.** Республика Яҙыусылар союзы фойеһында иҫкә алыу митингы үтте. Һуңынан йыйылыусылар мосолмандар зыяратына юл тотто. Ҡаты һыуыҡҡа ҡарамаҫтан, акцияла йөҙләгән кеше - яҙыусылар, шағирҙар, Салауат районынан шағирҙың яҡташтары, студенттар, Рәми Ғарипов исемендәге республика гимназияһы уҡыусылары, яҡындары ҡатнашты. Иҫкә алыу сараһында оҙаҡламай шағирҙың балалары ярҙамында донъя күрәсәк йыйынтыҡ хаҡында әйтелде. Төҙөүселәре- шағирҙың ҡыҙы Гөлнара Ғарипова, рәссам-биҙәүсе - Азамат Ғарипов. Юбилей саралары ошо көндәрҙә Өфөлә, Мәскәүҙә һәм Магнитогорскиҙа уҙа.

✓ **IX класс уҡыусылары 1 мартҡа тиклем 2017 йылдағы дәүләт йомғаҡлау аттестацияһында ҡатнашыуға ғариза бирергә тейеш.** Дәүләт сығарылыш имтиханын һаулығы буйынса мөмкинлектәре сикләләр, ябыҡ типтағы махсус уҡыу-тәрбиә учреждениеларында белем алыусылар һәм сит ил мәктәптәрендә уҡыусылар һайлай ала. Төп дөйөм белем тураһында аттестат алыу өсөн IX класс уҡыусылары ике мотлаҡ предметтан - рус теле һәм математиканан, шулай уҡ үҙҙәре һайлаған ике фәндән имтихан бирергә тейеш. Ағымдағы уҡыу йылында уҡыусыларҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһының һуңғы этабы еңеүселәре йәки призерҙары, халыҡ-ара олимпиадаларҙа ҡатнашҡан илдең йыйылма командаһы ағзалары Рәсәй йәки халыҡ-ара кимәлдәге олимпиаданың тейешле йүнәлешенә тап килгән фән буйынса дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын үтеүҙән азат ителә.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҠАҒЫҘҘА, ТЕЛДӘ ГЕНӘ ҠАЛМАҺЫН...

## Урал батырға һәйкәл ҡуйыу башланғысы

**Үҙәк Совет власы менән Башҡорт хөкүмәте араһында Башҡорт Совет автономияһы тураһында килешеүгә 100 йыл тулыуҙы һәм 2020 йылда Башҡортостанда Бөтә донъя фольклориадаһы үткәреләсәген күҙ уңында тотоп, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Урал батырға һәйкәл ҡуйыу идеяһы менән сыҡты. Шул уңайҙан, Башҡортостан ГТРК-һының медиа-үҙәгендә матбуғат конференцияһы үтте. Унда Ҡоролтай ҡарамағында ошо маҡсатта ойошторолған, составына телселәр, тарихсылар, философтар, башҡа белгестәр ингән эш төркөмө ағзалары ҡатнашты.**



БДБҠ Башҡарма комитеты рәйесе, профессор, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Әмир Ишемғолов белдереүенсә, был бик яуаплы эш һәм уны өс этапта тормошҡа ашырыу планлаштырыла. Беренсе этап - бөгөнгө фәндең барлыҡ тармаҡтарынан "Урал батыр" эпосы менән ҡыҙыҡһыныусы ғалимдарҙы бергә йыйып, улар менән әҫәрҙе төрлө күҙлектән тикшереп һәм мөмкин булған барлыҡ мөһим мәлдәрҙе асыҡлап, һәйкәлдең нисек булырға тейешлеге тураһында уртаҡ фекергә килеү. Сөнки эпос йөкмәткеһенә Ерҙә тормош барлыҡҡа килеү процесы һалынған икән, уны бер генә күҙлектән сығып баһалау һәм буласаҡ һәйкәлде ошо ҡараштан ғына һынландырыу мөмкин түгел. Был йәһәттән дә матбуғат конференцияһында төрлө фекерҙәр яңғыраны: Ҡоролтай уртаға Урал батырҙы ҡуйып, уның ике яғынан тағы ла етешәр эпостың төп геройҙары һынландырылырға тейеш, тигән фекер менән сығыш яһаһа, башҡалар был мемориаль комплекс йәки ансамблдә бары тик эпостағы эпизодтарҙы һынландырыу яҡлы. Шулай уҡ Уралдың скульптураһы нисек булырға тейешлеге мәсьәләһе лә етди ҡараш талап итә. БР-ҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Таңсулпан Ғарипова батырҙы ерҙән сығып килеүсе итеп күрә, йәғни һәйкәлгә күҙ күреп өйрәнгән пъедестал кәрәкмәй, батырҙы ер тыуҙыра. Әйткәндәй, яҙыусының икенсе фекере - Урал батырҙа бәйғәмбәрлекте сағылдырыу. "Тарихтан мәғлүм булыуынса, бәйғәмбәрҙәрҙән кешелеккә изге китап ҡала. Әгәр Ер яралған, ерҙә тормош башланғандан алып тарихты бәйән иткән - башҡорт халҡының ғына түгел, тотош кешелектең изге китабы булырҙай эпос беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән икән, тимәк, Урал да бәйғәмбәрҙәр затынан һәм был сифат та һәйкәлдә сағылыш табырға тейеш", - тине ул. Батырҙың арыҫлан йәки Аҡбуҙатҡа атланған булыу ихтималлығы ла инҡар ителмәне.

Әлбиттә, "Урал батыр"ҙа Уралдың үткән юлын кәүҙәләндергән, эпос менән таныш ниндәй генә милләт кешеһе килгәндә лә скульптуралар аша улар эпостың йөкмәткеһе менән таныша, уны аңлай алһын өсөн мемориаль комплекс йәки ансамбль бер бөтөндө тәшкил итергә тейеш. Шулай икән, бында Салауат Ғәлләмовтың теорияһына ла мөрәжәғәт итеү һәм Урал батыр һәйкәл-комплексын календарь рәүешендә, йәғни әйләнә, ҡулса формаһында эшләүҙе лә иғтибарға алырға кәрәктер.

Икенсе этапта архитекторҙар менән эш алып барыласаҡ. Йәғни эш төркөмө уртаҡ фекергә килгән образ Уралды һынландырырға теләге булған барлыҡ архитекторҙарға, скульпторҙарға ҡулланма булып торасаҡ. Шулай уҡ барлыҡ проекттар йәмәғәтселеккә фекер алышыуға ла сығарыласаҡ һәм иң уңышлыһы ғына һайлап алынасаҡ.

Өсөнсө этап - комплексты йәки ансамблде эшләү өсөн финанс мәсьәләһен хәл итеү. Тотош илде көрсөк ялмап алғанда, әлбиттә, был мөһим мәсьәләләрҙең береһе. Әммә федераль әһәмиәттәге юбилей һәм халыҡ-ара сара алдынан төрлө кимәлдәге бюджеттар һәм бюджет булмаған фондтар уны йырып сығырға ярҙам итер, моғайын. Шул уҡ ваҡытта, тарих ҡабатлана, тигәндәй, заманында башҡорттар Каруанһарай мәсетен төҙөүгә бер төптән ҡубып аҡса йыйғанлығын да хәтергә төшөрҙө матбуғат конференцияһында ҡатнашыусылар. Ләкин бөтөн нәмәне халыҡ елкәһенә һалып ҡуйыу, бигерәк тә бөгөнгө эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ заманында оятыраҡ та һымаҡ. Шул уҡ ваҡытта, матур бер фекер ҡолаҡҡа салынды: "Урал батыр" - ул башҡорт халҡының ғына түгел, ә донъя халыҡтарының ҡомартҡыһы, уның менән башҡа халыҡтар ҙа ҡыҙыҡһына һәм уны башҡа телдәргә тәржемә итергә һорап алалар. Шулай булғанда, ни өсөн, халыҡ-ара иҫәп тә асмаҫҡа? Аптырағандан тыуған уйҙар инде былары, сөнки Рәсәйҙә бөтөн нәмә аҡсаға барып төртөлә һәм, финанс булмағанда, былай ҙа ярай инде, тип, аҙ сығымлы проектты һайлау маҡсатҡа тура килмәҫ, моғайын. Эйе, аҙ бюджетлы һәйкәлдәр ҙә булһын, әгәр мөмкинлек табыла икән, улар һәр районда, һәр ауылда ҡуйылһын - бынан һис бер зыян юҡ, киреһенсә, йәш быуынды "Урал батыр" эпосы нигеҙендә тәрбиәләү өсөн этәргес кенә булыр. Ләкин әле хыялда булған һәйкәлде аҡса мәсьәләһенә бәйләп, осһоҙландырыу ярамаҫ. Сөнки Урал батыр образы аша дөйөм башҡорт милләтенә ҡуйыласаҡ һәйкәл - ул Салауат Юлаев һәйкәле кеүек рухландыра, ҡанатландыра, илһамландыра, дәртләндерә, көс өҫтәй торған урын, батырлыҡ һәм изгелек, кешелеклелек һәм намыҫ символы булырға тейеш.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Баш ҡалала Континенталь хоккей лигаһының туғыҙынсы миҙгелендәге даими чемпионаттың һуңғынан алдағы уйыны уҙҙы. "Салауат Юлаев" Ҡазандың "Аҡ Барыҫ"ын 3:1 иҫәбе менән еңде. Юлаевсылар 85 мәрәй йыйып, әлегә алтынсы баҫҡысҡа күтәрелде. Ул өфөләрҙең шул уҡ "барыҫтар" менән плей-оффтың тәүге уйынында осрашыуын гарантиялай. Беренсе этаптағы һуңғы матчын Өфө клубы үҙендә, 18 февралдә Тольяттиҙың "Лада"һына ҡаршы уҙғара.

✓Эстонияның Палдиски ҡалаһында Салауат Юлаевҡа мемориаль таҡтаташ һәм һәйкәл ҡуйыласаҡ. Башҡортостан Милли музейының проекты 270 мең һум күләмендә республика Башлығы грантын алды. Тантаналы саралар июль баштарында уҙасаҡ. Яңы һәйкәл элекке баҡырҙан эшләнгәнен алмаштырасаҡ, сөнки иҫкеһе ваҡыт үтеү менән емерелә башлаған. Эстон, урыҫ һәм инглиз телдәрендә яҙылған мемориаль таҡтаташты Салауат Юлаев 1775-1800 йылдарҙа ғүмеренең һуңғы осорон уҙғарған Рогервик ҡәлғәһенә - хәҙерге Палдиски ҡалаһы мэрияһы бинаһына ҡуйыу күҙаллана.

✓Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең Рәсәй буйлап гастролдәре башланды. Татарстандың Аҙнаҡай ҡалаһы гастроль турының тәүге пункты булды. Артабан улар Ҡаҙан филармонияһында, Мәскәүҙә, Чайковский исемендәге концерт залында ҙур концерт уҙғарҙы.

✓RoomGuru.ru отелдәр эҙләү сервисы илдең иң популяр тау саңғыһы курорттарын билдәләне. Белорет районында урынлашҡан Абҙаҡ тау саңғыһы курорты февралдәге байрам көндәрендә ҡышҡы ял лидерҙары иҫәбенә инде. Абҙаҡ курорттарҙа ял итеүҙең популярлығы буйынса туғыҙынсы урынды биләй.

✓Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры Антон Чеховтың "Апалыһеңлеле өсәү" пьесаһы буйынса спектакль ҡуя. Бының өсөн Санкт-Петербургтан Өфөгә билдәле театр режиссеры Ирина Зубжицкая килгән. Спектаклгә театрҙың яҡынса ярты урыҫ труппаһы йәлеп ителгән. Шулай уҡ унда башҡорт труппаһы артистары Вадим Ҡылысов менән Рәмзил Сәлмәнов ҡатнаша.

✓Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты ҡарамағында "Өфө Art" ижад мәктәбе асылды. Мәктәптә 15 йәшкә тиклемге балалар һәм 16 йәштән өлкәнерәктәр уҡый ала. Телефон аша яҙылырға мөмкин: (342) 276-19-36, 8-927-943-22-46. Электрон почта: d.allaberdin@mail.ru.

ӨФӨ БАШҠОРТО

**2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, баш ҡалала 1 172 287 башҡорт йәшәй. Милләтте сығышы (ауыл, ҡала), белеме (урта, юғары), дине (динле, динһеҙ), ырыуы һәм башҡа күрһәткестәр менән бүлгеләргә ярамаһа ла, "Өфө башҡорто" рубрикаһында баш ҡала башҡортоноң типаждарын асыҡларға тырышыуыбыҙ. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - инженер, техник фәндәр кандидаты, яҙыусы, БР Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһы лауреаты Радик ВАХИТОВ.**

# ТОТОШ БАШҠОРТОСТАНДЫ ЯРАТАЙЫҠ!

**➔ Өфө башҡортоноң төп сифаттары, башҡа башҡорттарҙан айырылып торған һыҙаттары нимәлә?**

- Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә йәшәүсе башҡорттар менән аралашырға тура килә. Ғөмүмән, башҡорттарҙы "Өфө башҡорто", "Баймаҡ башҡорто", "Салауат башҡорто" һәм шундай территорияларға шартлы бүлеп ҡарау яҡлы түгелмен. Минең өсөн башҡорт икәнһең - тотош Башҡортостан һинең тыуған ерең булырға тейеш. Тарихҡа күҙ һалһаҡ та, борон ата-бабаларыбыҙҙың ерҙәре йәйрәп ятҡан, һәм улар ошо ерҙәрҙең барыһын да үҙенең тыуған ере, үҙен ошо ерҙең балаһы тип ҡараған һәм һанаған. Милләтебеҙҙе былай ҙа ян-яҡтан тартҡыларға, бүлгеләргә әҙер генә торалар, шуға күрә, исмаһам, үҙебеҙ "ҡала башҡорто", "ауыл башҡорто" һ.б. тип халҡыбыҙҙы бүлгеләмәйек. Беҙҙең уртаҡ атамабыҙ - башҡорт, һәм уның эсенә милләткә хас бөтөн нәмә лә һыйған. Бары шуны ғына билдәләп китер инем - Өфө башҡорттары, башҡаларҙан айырмалы, баш ҡаланы ғына түгел, тотош Башҡортостанды үҙенең тыуған ере тип ҡарауы менән башҡаларҙан айырылып тора, шул ғына.

**➔ Башҡортостан Республикаһы - уға исем биргән халыҡтың тыуған ере, берҙәнбер аҫаба төйәге. Уның баш ҡалаһы ла берәү генә һәм унда ла милли рух, милли үҙенсәлек күҙгә салынып торһон өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

- Европа беҙҙе генә түгел, тотош Рәсәйҙе быуырға маташа, ә беҙ һаман уға оҡшарға тырышабыҙ, аҙымдарыбыҙҙы уға ҡарап үлсәйбеҙ. Көнбайыштан күҙ алмайынса, Көнсығышҡа табан барырға тырышабыҙ. Ә беҙгә алға ҡарарға кәрәк, алға ҡарап бармаһаҡ, атлағанда абынып йығылырға мөмкин. Әлбиттә, үткән йылдар менән сағыштырғанда, бөгөн Өфөлә башҡортса аралашыуҙы күрергә, башҡорт менталитетын тойорға мөмкин. Әммә был ғына бик әҙ.




Был йәһәттән ҡалала республикаға исем биргән халыҡтың тарихына, мәҙәниәтенә, әҙәбиәтенә, көнкүрешенә һ.б. ҡағылышлы объекттар булдырыу, үҙәктәр төҙөү яҡшы булыр ине, тип уйлайым. Мәҫәлән, Өфөлә С. Аксаков музейы бар, ә Салауат Юлаевтыҡы юҡ. Кем Башҡортостан Республикаһы символы? Кем хатта гербта һүрәтләнгән? Йыл һайын Халыҡ-ара Аксаков байрамы уҙғарыла, ә Салауат көндәре район һабантуйы кимәленә ҡалдырылды. Бигерәк тә Салауат Юлаевтың 260 йыллыҡ юбилейы йөрәкте һыҙландырҙы. Ҡунаҡтар бары тик күрше-тирә райондарҙан ғына ине, ә тоҡомло аттар ярышында ике генә ат ҡатнашты: береһе "Янғантау" шифаханаһыныҡы, икенсеһе - Ҡыйғы районыныҡы.

Ә ҡала башҡорттарына үҙеңдең башҡорт булыуың менән ғорурланыу, ауыл ерҙәрендә йәшәүселәр менән тығыҙ бәйләнештә булыу зарур. Атай-олатайҙар төйәгенә йышыраҡ ҡайтайыҡ. Байрамдар, һабантуйҙар үткәреүҙә ярҙам күрһәтәйек, туғандар менән бәйләнеште өҙмәйек, шәжәрәләребеҙҙе төҙөп, нәҫел-ырыуыбыҙҙы беләйек, ауыл проблемалары тураһында киң мәғлүмәт саралары аша сығыш яһайыҡ, иң мөһиме - балаларыбыҙҙы башҡортса һөйләшергә өйрәтәйек.

**➔ Бөгөн ҡала башҡорт мәҙәниәте ниндәй кимәлдә?**

- Башҡорт мәҙәниәте бит ул йырлап-бейеүҙе, сәхнәлә сығыш яһауҙы ғына үҙ эсенә алмай. Минең өсөн башҡорт мәҙәниәте - ул тыуғандан алып кешегә һалынған һәм уның көндәлек тормошонда сағылыш тапҡан сифаттар. Ошо күҙлектән ҡарағанда, мәҙәниәтебеҙ юл сатында торған һымаҡ. Ни өсөн тигәндә, ҡала башҡорттары, барлыҡ ҡала халҡы кеүек үк, европалашып бара. Мәҫәлән, йырсылар, бигерәк тә ир-ат башҡарыусылар, оҙон башҡорт халыҡ йырҙарын Европа костюмдары кейеп сығып башҡара. Ярай әле, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ матур милли костюмдар кейеүгә күсеп бара. Хәйер, хәҙер сәхнә костюмдарын, башҡарыусыларҙы ғына түгел, хатта йәшәйеш ҡанундарын да Европа стандарттарына яраҡлаштырырға тырышабыҙ. Ундағы ҡанундарҙан туғанлыҡ хисе юйыла бара. Элегерәк Көнсығыш халыҡтары толдарҙы, етемдәрҙе, эскелекте белмәгән, сөнки туғанлыҡ бәйләнештәре йәмғиәттә ҙур роль уйнаған. Ә хәҙер, европаса, барыһы ла дәүләт иңенә ятты, балаларҙы ата-әсәләренән тартып алалар, уларҙы ҡарарға хөкүмәттең хәленән килмәй. Атай-олатайҙарыбыҙ бындай күренеште күрһә, ғәрлегенән ер тишегенә инер ине, моғайын. Шулай уҡ урамда ла Европа стиле, Европа атамалары күҙҙе сыбарлай. Йәштәрҙең ҡолағында наушник, күҙҙәре телефонға текәлгән. Башҡорт мәҙәниәтенә хас ихласлыҡ, ябайлыҡ онотолоп барғандай.

Ә минең өсөн башҡорт мәҙәниәте - ул яҡташым Хәбир Ғәлимовтың йырҙары, моңо, сәхнәлә генә түгел, тормошта ла үҙ-үҙен тотошо, әҙәплелеге аша ҡаныма һеңгән мәҙәниәт. Йәш сағында ул олатайым Ҡыҙыхан менән дуҫ булған, һуңынан был дуҫлыҡ беҙҙең ғаилә менән дә дауам итте.

**➔ Атай-әсәйҙәрҙең нәҫел тамырҙары - район, ауыл менән бәйләнеш нисек?**

- Салауат районының Иҫке Ҡаратаулы ауылын мин үҙемдең дә тыуған ауылым тип иҫәпләйем, 4 йәшемә тиклем ошо ауылда йәшәгәнмен. Шунан инде бар ғүмер Өфөлә үтте. 1952-1953 йылдың ҡышында атайымды, Салауат районы прокуроры вазифаһында эшләүсе Шакир Ҡаҙыхан улын БАССР Прокуратураһының тәфтиш бүлеге начальнигы итеп тәғәйенләнеләр, һуңынан ул 27 йыл буйы БАССР Юғары Суды рәйесе булып эшләне. Әсәйем Мәмдүҙә Рауил ҡыҙы ғүмер буйы дарыуханала бухгалтер булды. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарынан һуң Өфөлә башҡорт мәктәптәре булманымы икән, мине рус мәктәбенә уҡырға бирҙеләр. Ҡалала беҙгә, рус булмаған милләт балаларына, барыбер түбәнһетеп ҡарайҙар ине. Шуға, бала сағымдан уҡ үҙемде башҡалар араһында тиң итеп тойор саралар эҙләнем. Уны мин үҙемдең данлы тарихымда таптым, тарих менән ныҡлап ҡыҙыҡһынып киттем. Ә ул тарих эргәлә генә ине. Йәйге каникулдарымды ауылда Фатима өләсәйемдә үткәрҙем. Улоларҙан Салауат батыр тураһында риүәйәттәр тыңланым. Мин уларҙың барыһын да хәтеремә һалып барҙым. Тарихты өйрәнә торғас, үҙебеҙҙең Салауат Юлаевтың нәҫелдәре икәнен белдем.

Юҡҡа ғына, кеше олоғая бара, башы ергә нығыраҡ эйелә, тимәйҙәр. Беҙ, Салауат Юлаев нәҫелдәре "Салауат Юлаев вариҫтары" ассоциацияһы ойошторҙоҡ, Салауат районынан сыҡҡан яҡташтар ойошмаһы ҡатнашлығында йыл һайын район һабантуйынан һуң Салауат Юлаевтың тыуған ерҙәренә барыу, уның тыуған ауылы Тәкәйҙә дини йолалар үтәү буйынса яҡшы традиция барлыҡҡа килтерҙек. Шулай итеп Салауаттың һәм уның атаһы Юлайҙың үлеменән һуң 200 йыл үткәс беҙ, уның вариҫтары, уларға бағышлап ҡорбан салдыҡ һәм һаман да ошо йоланы тоторға тырышабыҙ.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бармаҡ быуындары

❖ Матдәләр алышыныуы боҙолған өлкән йәштәге ҡатын-ҡыҙҙарҙа бармаҡ быуындары йыуанайыуы осрай. Быуындағы был төйөндәр ауыртмай һәм хәрәкәт итеүгә лә ҡамасауламай. Шулай ҙа уны булдырмайым тиһәң, ҡулдарҙы өшөтмәҫкә, майлап торорға һәм көнөнә 1,5-2 литр шыйыҡлыҡ эсергә кәрәк.

### Аяҡтар өшөһә

❖ 2 ҡалаҡ ҡоро гәрсис, ваҡланған 2 әсе борос, 1 ҡалаҡ тоҙҙо бергә ҡушырға ла, 2 стакан араҡы ҡойорға. Уны 10 көн ҡараңғы урында тоторға, болғатып торорға. Шул төнәтмәне аяҡтарға һөртөргә. Был ысулды быуындар ауыртҡанда ла ҡулланырға ла мөмкин.

### Баш әйләнһә

❖ Баш әйләнгәндә, баш ауыртҡанда дарыу йоторға ашыҡмағыҙ. Ябай ғына ысул ярҙам итеүе ихтимал: танау төбөнән ныҡ ҡына ҡыҫып, 1 минут тирәһе тоторға кәрәк.

❖ Башты яулыҡ менән бәйләп ҡуйырға. Элек әсәйҙәр гел шулай итә торғайны, мин үҙем дә ҡулланам. Был ысул ҡан баҫымын төшөрөргә ярҙам итә.

❖ Гәрсисте муйынға, аяҡ балтырҙарына ҡуйыу ҙа сихәтле, әммә бөтөн ергә лә бер юлы ҡуймағыҙ, сиратлағыҙ.

❖ Ҡаш өҫтөнә май һөртөргә кәрәк.

❖ Һалҡында йөрөгәндә шәлде йә бүректе ҡашыңа тиклем төшөрөргә кәрәк.

### Шәкәр ауырыуы

❖ 2 ҡалаҡ ҡарабойҙай ярмаһын йыуып, кистән 1 стакан ҡайнар һыуға һалырға һәм иртәнсәк шуны ғына ашарға, төшкә тиклем башҡа нәмә ашамаҫҡа.

❖ 1-2 балғалаҡ ҡыҙыл миләште 1 стакан ҡайнап торған һыуға һалып, 30 минут төнәтергә. Ас ҡарынға көнөнә 2 тапҡыр 2-3 ҡалаҡ эсергә.

### Йод менән сода

❖ Тарамыш тартылғанда ауыртҡан урынды йод төнәтмәһе менән ыуығыҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕ

**Төньяҡ-көнсығыш төбәге хәҙерге административ бүленеш буйынса үҙенең территорияһына Балаҡатай, Мәсетле, Салауат, Дыуан, Ҡыйғы райондарын, Ҡариҙел һәм Нуриман райондарының бер өлөшөн, шулай уҡ Силәбе өлкәһенең көньяҡ-көнбайышын үҙ эсенә ала.**

Төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының кейеме араһында айырыуса күлдәктәр айырылып тора. Улар өйҙә һуғылған йәки фабрика туҡымаһынан тегелгән. Был төбәкте тамбурлы сигеү менән биҙәлгән кейем айырып тора.

Музейҙарҙа һаҡланған күлдәк өлгөләре төрлө формалағы биҙәктәре менән дә, төҫтәре менән айырылып тора. Күлдәктең еңе үҙенсәлекле, өҫкө өлөшөнә уға күләм биреп торған ярым түңәрәк деталь тегелә. Күлдәктәр башлыса сатиндан тегелеп, тамбурлы сигеү менән биҙәлә (**һүрәт**). Һүрәттәге күл-



дәктәрҙең биле беленеп тора, еңдәре мул итеп тегелгән. Төньяҡ-көнсығыш костюмының мотлаҡ алъяпҡысы була, шуға ла күлдәктең еңе шулай тегелгән, тип фаразлап була, ул алъяпҡыска ҡул буйлап һыпырылып төшөп китергә мөмкинлек бирмәй.



Тағы бер күлдәк өлгөһендә (**һүрәт**) итәктең алғы өлөшөнә бала итәк һалынмаған. Күлдәк итәгенең алғы өлөшөнөн ҡабарынҡы булыуы хужабикәгә йорт эштәре менән булышырға ҡамасаулаған, алъяпҡыс аҫтында ул күренмәгән дә.



Ҡатлап һалынған бала итәк (әүеркә, ҡатмар) ҡыҙҙарҙың күлдәгенә хас. Был төбәктә үҙенсәлекле бала итәктәр осрай (**һүрәт**).

Төньяҡ-көнсығыш костюмының традицион бер өлөшө булып алъяпҡыс тора (**һүрәт**). Алъяпҡыстар ҙа, күлдәктәр ҙә сәскә мотивтары менән биҙәлгән. Музейҙарҙа шулай уҡ был төбәккә хас бишмәт һәм еләндәр ҙә һаҡланған.



Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары костюмынан айырмалы рәүештә, уларҙың биле нығыраҡ беленеп тора һәм еләндең итәге лә киңерәк.

Еңһеҙ кейемдәр бында уҡа менән генә биҙәлгән. Камзулдар бил тәңгәленән генә түгел, түш тәңгәленән дә аҫҡа ҡарай киңәйеп китә алған.

**Айгөл КАМАЛИЕВА.**
**"Башҡорт костюмы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЕТДИ ҺӨЙЛӘШЕҮ

**Көтөп алынған сабыйҙың донъяға килеүе һәр бер ғаилә өсөн иң иҫтәлекле һәм дә шатлыҡлы ваҡиғаларҙың береһелер ул. Малаймы, ҡыҙмы - берҙәй ҡыуанyслы. Ә беҙҙең башҡорт ирҙәре малайлы булһа, уғата ҡыуана, шатлығы эсенә һыймай, дуҫ-иштәре алдында маҡтанып та ебәрә. Ул үҫтерәсәк атай булып киткәс, ир-ат үҙен мәртәбәлерәк итеп тоя шул. Малайҙар ысын ир булып үҫһен өсөн уларҙың тәбиғәтенә ярашлы тәрбиә биреү ҙә мотлаҡ. Ошо юҫыҡта, бигерәк тә йәш, тәжрибәһеҙ ғаиләләр ярҙамға мохтаж. Һөнәрем буйынса педагог-психолог булғас, ошо хаҡта байтаҡ ҡына ғилми хеҙмәттәр менән танышып, коллегаларым менән фекер алышып, малайҙар тәрбиәләүҙә йыш ҡабатланып торған төрлө ғәмәли ситуацияларға анализ бирергә лә тура килә ине. Ошо нигеҙҙә минең үҙ-үҙемә биргән һорауҙарым тыуҙырған фекер-яуаптар һеҙҙе лә ҡыҙыҡһындырыр, тип ышанам.**

# АТАЙ ҒОРУРЛЫҒЫ - ИР БАЛАЛА ...

## йәки малайҙарҙы тәрбиәләү алымдары тураһында



➔ **Ир-егетлек сифаттары кешегә тәбиғәттән биреләме, әллә улар тәрбиә һөҙөмтәһеме икән?**

Бер йәшкә тиклемге сабыйҙар үҫешендә күҙгә элерҙәй психологик айырымлыҡтар күҙәтелмәй. Улар, тәбиғи ихтыяждарына ярашлы, бер үк төрлө илай, бер төрлө шатлана, атаәсәһенә, яҡын туғандарына һис бер айырмаһыҙ эйәләшә. Малайҙар тыуғанда кәүҙәгә ҙурыраҡ булһа ла, ҡыҙҙарҙың физик үҫеш темпы уларҙыҡынан һәр саҡ бер аҙ юғарыраҡ була. Тәбиғәттән һалынған генетик программаға ярашлы, малайҙарҙың балиғ булып, ир-егеткә әйләнеүе - оҙайлыраҡ процесс.

Малайҙар менән ҡыҙҙар араһында психологик айырымлыҡтар бер йәш тирәһендә беленә башлай. Күрәһең, тап ошо ваҡыттан башлап бала организмында енес үҙенсәлектәре менән бәйле сифаттарҙы тышҡы, социаль мөхиткә сығарыу мөмкинлеге биргән генетик программа әүҙемләшәлер. Фәһемле күренгән бер миҫал килтерәйек.

Психологтар яңы тәпәй баҫҡан балалар менән бик ҡыҙыҡлы эксперимент уҙғара. Ҙур ғына бүлмәнең бер яҡ стенаһы янына сепрәк-сапраҡ, ҡурсаҡтар, уйынсыҡ һауыт-һаба, ҡаршы яҡҡа - тимер-томор, уйынсыҡ машиналар, ҡылыс-мылтыҡ кеүек нәмәләр ҡуйыла. Балаларҙы берәмләп бүлмәгә индергәс, бына нимә күҙәтелә: ҡыҙҙарҙың бөтәһе лә тиерлек ҡурсаҡтарға табан йүнәлһә, малайҙарҙы башлыса машина-фәлән ҡыҙыҡһындырыуы асыҡлана. Был факт кешенең генетик хәтеренең енес менән бәйле булыуы тураһында фекер йөрөтөргә нигеҙ бирә.

Ә бына башҡорт малайҙары уҡ-башаҡ, йәйә эшләү менән мауыға (әйтерһең дә, улар боронғо ата-бабалары шөғөлөн генетик хәтер аша алған), һунар итеү, һуғыш уйындарына ихлас ҡушыла. Малайҙарҙың атайға, ир-атҡа оҡшарға тырышыуы тәбиғи рәүештә бик иртә уянып, бүтәндәрҙән өлгө алып ҡабатлау, ололар өйрәтеүе һөҙөмтәһендә нығына.

➔ **Малайҙар психологияһындағы, уларҙың холоҡ-фиғелендәге ниндәй үҙенсәлектәргә ҡарата үтә иғтибарлы булыу кәрәк?**

Бәләкәйҙән үк малайҙарҙың телмәре аҡрыныраҡ үҫешә, шуның өсөн уларҙы ғаиләлә күберәк һөйләндереү юлдарын табырға кәрәк. Ә бына һан, күләм, арауыҡ кеүек математик төшөнсәләрҙе улар тиҙерәк үҙләштерә, тап шуға күрә талантлы физик-математиктар, инженер-конструкторҙар башлыса ир затынан була. Һәләте һиҙемләнгән баланы мөмкин тиклем иртәрәк өйрәтә башлау фарыз, быға мин үҙ тәжрибәмдә лә инандым. Информатика, математика өлкәһендә үҙ һөнәрен тапҡан улым алты йәшендә үк арифметик ғәмәлдәрҙе аңлы рәүештә ыңғай һәм тиҫкәре һандар менән башҡара ала ине.

Малайҙарҙың холоҡ-фиғеленә килгәндә, уларға физик әүҙемлек, тик тора алмаусанлыҡ (быны гиперхәрәкәтсәнлек тип тә атайҙар) хас. Улар, нисек тә булһа күңеле теләгәнде эшләргә теләп, ололар ҡуйған сиктәрҙән сығып китеп, артыҡ үҙаллы эш итергә әүәҫ. Үҫмерлек осоронда был сифат көсәйә барып, малайҙарҙың үҙ һүҙлелеге, тыңлашмаусанлығы улар менән ололар араһында көсөргәнешлек барлыҡҡа килтерә. Өҫтәүенә, малайҙар үҙҙәрен ҡыҙҙарға ҡарағанда күпкә "һуғышсаныраҡ", агрессивыраҡ тота. Быны сәбәбе - ирҙәрҙең йәмғиәттә меңәр йылдар буйы ҡабатлана килгән социаль роле талап иткән сифаттарҙың уларҙың тәбиғәтенә, генетик хәтеренә һеңеүе булһа, малайҙар мөхитенә хас бер-береһе менән ярышыу, өҫтөнлөк алыу, беренсе булыу, лидерлыҡҡа өлгәшеү өсөн көрәш конфликтлы ситуацияларҙы йышыраҡ тыуҙыра. Тап шуның арҡаһында тәүҙә балалар баҡсаһында, ә аҙаҡ мәктәптә ошондай холоҡло малайҙарҙы тәрбиәсе-уҡытыусылар "проблемалы", тип атайҙар ҙа инде.

➔ **Ә беҙ бындай малайҙарҙы дөрөҫ тәрбиәләйбеҙме һуң?**

Бар осраҡта ла әүҙемлек күрһәтеп, мин-минлеген алдараҡ йөрөткән, шау-шыу сығыуҙан ҡурҡып бармағандар беҙҙең тәрбиә системаһында кире баһаланып, уларҙың бойондороҡһоҙлоғо мөмкин булған бөтә ысулдар менән ғаиләлә лә, мәктәптә лә аяуһыҙ баҫтырылып, юҡҡа сығарылып барыла. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙә егетлекте һүҙ һөйләп кенә тәрбиәләргә тырышыу өҫтөнлөк алған. Шым ғына йөрөп, конфликтлы ситуацияларҙан ситтә ҡала килеп, хәүефле мәлдәрҙә гелән боҫоп ҡалырға өйрәнгән ир-атҡа еңеүсе психологияһын бер нисек тә һеңдереп булмаясаҡ. Исмаһам, халҡыбыҙҙың "Малай булһа - шуҡ булһын, ике күҙе ут булһын", тигәненә ҡолаҡ һалһаҡ ине лә бит. Малайҙарҙың әүҙемлеген бишектән тиерлек сикләй барып, тыйыу + яза биреү юлы менән ысын ир-егетлекте тәрбиәләп буламы ни ул! Шунан килеп, эй аптыраған булабыҙ, башҡорт ирҙәре араһында лидерҙар аҙ, әүҙемлек етешмәй, битарафлыҡ көслө, тип. Бала саҡтан башҡалар менән көс һынашмай, аҙмы-күпме яғалашмай, еңеү-еңелеү тойғоһон татымай, ауыртыу-ҡурҡыуын йүгәнләй алырға күнекмәгән малайҙан, үҫеп, буй еткәс, үҙен генә түгел, көсһеҙерәк заттарҙы ла ҡурсалай алырлыҡ ир-егет сығырмы һуң? Ай-һай, юҡтыр.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Виктор Иосифович "батшаларҙың Башҡортостанға ҡарата колониаль сәйәсәтен аҡлаусы тарихсыларға эйәрмәй. Ул башҡорт халҡы тарихының мөһим дәүерҙәрен, батша хөкүмәте менән мөнәсәбәтен яҡтыртырға тырыша."*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ОЛУҒ ҒАЛИМЫБЫҘ ӘЙТКӘН ҺҮҘ,

## йәки Әхмәтзәки Вәлидиҙең Рәсәйҙәге ғилми эшмәкәрлеге



**"Тарихсыларҙың тарихты дөрөҫ итеп яҙыу кеүек ауыр эше бар. Ышаныслы тарих йәки хәҡиҡәт бик күп тарихи мәғлүмәттәрҙе үтә нескә иләк менән иләгәндән һуң ҡалғандарҙан ғына хасил була ала", тигән Әхмәтзәки Вәлиди. Тарихты һәм тарихсының ролен юғары баһалаған һүҙҙәренә раҫ итеп, ғалимдың башҡорттарҙың тарихы һәм этнографияһы буйынса хеҙмәттәренән өҙөк тәҡдим итәбеҙ.**

Ә. Вәлидиҙең башҡорттарға арналған тағы бер хеҙмәте - ул тюрколог В.И. Филоненконың (1884-1977) "Башҡорттар" тигән китабына яҙған баһаламаһы. Ул 1915 йылда Ф.Г. Соловьевтың электр типографияһында нәшер ителә. Китап инештән, 10 бүлектән, шулай уҡ башҡорттар тураһында әҙәбиәт күрһәткесенә өҫтәмәләрҙән тора.

XX быуат башында, бигерәк тә 1905-1907 йылдарҙағы революциянан һуң, Өфөлә һәм Ырымбурҙа ғилми-тикшеренеү, крайҙы өйрәнеү эштәренең көсәйеүе күҙәтелә. 1908 йылда Өфөлә тыуған яҡты өйрәнеү буйынса йәмғиәт ойошторола һәм унда урындағы зыялыларҙың иң алдынғылары инә: уҡытыусылар, табиптар, земство хеҙмәткәрҙәре һ.б. Йәмғиәттең етәксеһе итеп 2-се һанлы ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһы мөғәллиме Виктор Иосифович Филоненко һайлана.

Тыуған яҡты өйрәнеү буйынса йәмғиәттең баҫма органы булмаған, әммә ул урындағы баҫмаларҙы киң файҙаланған. Өфө краеведтары үҙҙәренең эштәрендә башҡорттарҙың тарихына, мәҙәниәтенә, этнографияһына, халыҡ ижадына, теленә, Өфө ҡалаһының тарихына, Башҡортостанды колонизациялау мәсьәләләренә ҙур иғтибар бүлә.

1908 йылда В.И. Филоненко йәмғиәт ағзаларының йыйылышында башҡорттарҙың килеп сығышы хаҡында доклад яһай һәм был уның башҡорттар тураһында хеҙмәтенең башы була. Баҫылып сыҡҡан тарихи тикшеренеүҙәрҙе, архив сығанаҡтарын һәм башҡа материалдарҙы файҙаланып, ул башҡорттарҙың боронғо дәүерҙән алып XX быуатҡа тиклемге тарихы буйынса хеҙмәт яҙа. В.И. Филоненконың монографияһы тәүҙә мәҡәләләр серияһы рәүешендә 1913-1914 йылдарҙа "Вестник Оренбургского учебного округа" журналында (Өфөлә 1912 йылдан башлап сыға) донъя күрә. Һуңынан Өфөлә (1915 йыл) айырым китап булып сыға. Китапта башҡорттарҙың килеп сығышы, теле һәм дине, Башҡортостандың боронғо дәүерҙән алып Рәсәй составына кергәнсе һәм унан һуңғы тарихи ваҡиғалары, шулай уҡ крайҙы колонизациялау, башҡорт ерҙәрен тартып алыу, Башҡортостан территорияһында тау заводтарының барлыҡҡа килеүе, башҡорттарҙың хәрби хеҙмәте, башҡорт ихтилалдары, Башҡортостан менән идара итеүҙең төрлө аспекттары урын ала. Башҡорт фольклорына ла ярайһы уҡ урын бирелә.

В.И. Филоненконың тикшеренеүе Башҡортостан тарихы буйынса бик үҙенсәлекле хеҙмәт булып һанала. "Башҡорт АССР-ы тарихы буйынса очерктар" китабының беренсе томы авторҙары баһалауынса, Виктор Иосифович "батшаларҙың Башҡортостанға ҡарата колониаль сәйәсәтен аҡлаусы монархист тарихсыларға эйәрмәй. Ул башҡорт халҡы тарихының мөһим дәүерҙәрен, батша хөкүмәте менән мөнәсәбәтен һәм башҡа мәсьәләләрҙе яҡтыртырға тырыша. Автор башҡорттарҙың мәҙәниәт тарихына, йәшәү рәүешенә һәм халыҡ ижадына иғтибар итә. Уға тиклемге был яҡты өйрәнеүселәр халыҡтың бөтөн тарихы менән шөғөлләнмәйенсә, тик этнографик күҙлектән генә тикшеренеүҙәр үткәргән икәнен билдәләп китергә кәрәк".

В. Филоненко үҙ хеҙмәтен яҙған саҡта Өфө ҡалаһының элекке башлығы Волковтың баҫылмаған ҡулъяҙмаларын файҙалана. Был материалдар араһында "тәржемәсе Өмөтбаевтан" тип исемләнгән 10 битлек иҫке ҡулъяҙма ла була. Улар билдәле башҡорт мәғрифәтсеһе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев тарафынан эшләнгән булған.

"Башҡорттар "башҡорт (баш бүре)" тигән исем аҫтында X быуат башында уҡ территория биләгәндәр", тип яҙа В.И. Филоненко. Башҡорттарҙың килеп сығышы мәсьәләһенә ҡағылып, ул: "Хәҙерге ваҡытта башҡорттарҙың төрки телендә һөйләшеүен генә билдәләп була", - ти.

Ә. Вәлиди был хеҙмәткә ентекле баһалама яҙа һәм уны "Башҡорттар тураһында яңы әҫәрҙәр" тип исемләй. Рецензияланған хеҙмәттең иң әһәмиәтле өлөшө тип Ә. Вәлиди рустарҙың Башҡортостанға күсеп килеүе, башҡорттарҙың хәҙерге тормошо һәм уларҙың татарлашыуы хаҡында һөйләнелгән бүлектәрҙе атап китә. "Китаптың ҡиммәтле урындары, әлбиттә, ошо ерҙәлер. Ләкин был бабтарға (бағышлауҙарға. - **авт.**) ғына ҡарап, беҙ был китапты башҡорттоң фәнни тарихи бабында бер аҙым алға китеү тип әйтә алмайбыҙ", ти ул.

Ә. Вәлидиҙең башҡорттар тураһындағы хеҙмәттәренең сираттағыһы - башҡорт ғәскәре тарихы хаҡындағы мәҡәлә. Ул Петербург ҡалаһында Башҡорт дивизияһының сәйәси бүлеге хеҙмәткәрҙәре тарафынан сығарылған "Бәхет көнө" журнал-альбомында 1920 йылда донъя күрә. Башҡорт ғәскәрҙәренең Ҡыҙыл Армия яғына күсеүенең беренсе йыллығына арналған был йыйынтыҡ бай иллюстрацияланған. Унда Башҡорт бригадаһының һәм дивизияһының сәйәси бүлеге өндәмәләре, Х. Әмировтың, Ғ. Ибраһимовтың башҡорт ғәскәрҙәре тураһындағы мәҡәләләре индерелгән. Улар араһында Ә.Вәлидиҙең "Боронғо башҡорт ғәскәре" исемле хеҙмәте лә бар. Автор сығанаҡтарҙы күрһәтмәйенсә, ҡыҫҡаса уның тарихын һөйләп бирә.

Ошо тема өҫтөндә эшләргә ул йылдарҙа 1-се башҡорт кантоны башлығы Ғабдулла Дәүләтшиндың улы генерал Ғәбделғәзиз Дәүләтшин теләк белдергән. Ғабдулла 1812 йылда Себенле ауылында тыуған, атаһының мәҙрәсәһен тамамлаған, ахун дәрәжәһен алған, 1839 йылғы Хиуа походында, 1854 йылда батша Александр II коронациялау тантанаһында башҡорт ғәскәренең вәкиле булараҡ ҡатнаша. Ә уның улы Ғәбделғәзиз Неплюев исемендәге кадет корпусын, Петербург юғары хәрби училищеһын, Баш штаб эргәһендәге көнсығыш телдәре курсын тамамлаған, Урта Азияла, аҙаҡ Петербургта Баш штабта хеҙмәт иткән. 1919 йылдың 13 ноябрендә ул Әхмәтзәки Вәлидигә түбәндәге хатты яҙа: "Күп йылдар инде мине башҡорт ғәскәрҙәре тураһында тарихи очерк яҙыу фекере ташламай. Башҡорт ғәскәрҙәренең мәсьәләләре менән шөғөлләнеүсе хәрби министрлыҡтың етәксе органы булған Азия бүлегендә хеҙмәт итә башлағанда уҡ башымда күсермәләр, яҙмалар эшләп барырға кәрәк, тигән фекер тыуғайны. Әммә эшем күп булды, шулай уҡ Мәскәүҙән (Баш штабтың иҫке эштәре Мәскәүҙә Лефортово һарайында һаҡлана) кәрәкле ҡағыҙҙарҙы яҙҙырып алырға ваҡытым булманы.

Хәҙер мин нигеҙҙә архив материалдарын һәм әҙәби сығанаҡтарҙы файҙаланып, был эш менән етди шөғөлләнергә уйлайым. Башҡортостан эштәрендә әүҙем ҡатнашырға мөмкинлегем булмағас, ошо юл менән булһа ла тыуған халҡыма билдәле файҙа килтерергә һәм атайым мәрхүмдең васыятын үтәргә теләйем. Киләсәктә ниндәй генә хәлдәр тыуыуына ҡарамаҫтан, үҙ халҡындың яҡындағы үткәнен белеү һәм тарихи үрнәктәрҙе өйрәнеү файҙалы булыр тип уйлайым. Яҡынса схемам:

1. Инеш - башҡорттарҙың боронғо тарихынан ҡыҫҡаса мәғлүмәттәр. XVIII быуаттың икенсе яртыһына тиклемге Башҡортостан идараһы.

2. Башҡорттар менән яңыса идара итеүҙе ойоштороу (башҡорт ғәскәрҙәре). Реформаның сәбәптәре. Идара сафына башҡорттарҙы ылыҡтырыу. Яңы реформа ни ҡәҙәре башҡорттарҙың рухына һәм йәшәү рәүешенә яуап биргән. Ер реформаһы.

3. Башҡорттарҙың хәрби хеҙмәте. Көнбайыштағы һуғыштарҙа, Ҡырым компанияһында һәм Урта Азиялағы дала сәфәрҙәрендә ҡатнашыуҙары.

4. Башҡорт ғәскәрҙәре бөтөрөлгәндән һуң ойошторолған башҡорт частары.

5. Йомғаҡлау, һығымталар".

Шулай итеп, Ә. Вәлиди Башҡортостан тарихының иң актуаль мәсьәләләренең береһенә мөрәжәғәт итә. Ул йылдарҙа башҡорт халҡы алдында үҙ ғәскәрен булдырыу мәсьәләһе килеп баҫа. Был мәсьәлә өсөнсө Бөтә башҡорттар ҡоролтайында ҡарала. Тарихсы М.М. Ҡолшәрипов билдәләүенсә, Ә.Вәлиди Башҡорт хөкүмәтенең шәхси хәрби көстәре булыуына ҙур мәғәнә һала. Башҡорт Үҙәк Советының 1-се һанлы фарманында былай тиелә: "Һеҙ, башҡорттар, үҙегеҙҙең Мәркәз шурағыҙға бик ауыр бурыстар йөкләнегеҙ. Һеҙ Мәркәз шураға ярты быуат элек юғалтҡан эскадрондарығыҙҙы тергеҙергә ҡуштығыҙ". Граждандар һуғышы йылдарында Ә. Вәлиди юғары хәрби вазифаларға үрләй. Ул Башҡорт хөкүмәте эргәһендә хәрби һәм эске эштәр мөдире, ғәскәрҙәр командующийы, хәрби комиссар була.

**Әхәт СӘЛИХОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

**(Дауамы. Башы 5-се һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

## БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### ХАНЛЫҠТАР

### 2. Чердын (Шырҙан) ханлығы

Профессор Р. Буканова тарафынан табылған ғәрәп графикаһы менән яҙылған (иҫке төркисәнән уны Петербургта В.Н. Татищевтың канцелярияһында хеҙмәттә булған Арыҫлан Бикмәтов тәржемә итә) боронғо башҡорт ҡулъяҙмаһында яҙылғанса, Урал алдында күп һандағы хан ставкалары, кенәз үҙәктәре булған. Ҡулдан яҙылған ошо китаптың "Хандар хаҡында мәҡәлә" тигән өлөшөндә XV-XVI быуат хандары йәшәгән торлаҡтарҙың торошо хаҡында мәғлүмәт бар. Башҡалар рәтендә: "Болғар - Болғар хандың торлағы... Ағиҙел тамағы - Кора (Ҡара) хандың торлағы, Черемшан (Сәрмәсән) - Ғүмәрхужа хандың торлағы, Ҡаҙан - Шәғәләй хандың торлағы, Зәйен тамағы - Бүләр хандың торлағы, Тубыл - Урыҫ хандың торлағы" һ.б. яҙмалар бар.

Тарихсылар Пермь ерҙәрен төрки телле халыҡтарҙың даими йәшәгән, дәүләт ҡорған урыны тип ҡарай. Сығанаҡтарға ҡарағанда, Чердын (Шырҙан) ханлығы Рәсәйҙең Пермь крайының иң ситендә, Колва йылғаһы (Колва Вишераға, Вишера Камаға ҡоя) буйында урынлашҡан. Ханлыҡ өс йылға бассейнын биләгән, баш ҡалаһы булып Чердын (Шырҙан)ҡалаһы иҫәпләнгән. Чердын үҙенең урынын бер нисә тапҡыр үҙгәрткән, тарихи үҙгәрештәргә ярашлы ҡаланың атамаһы үҙгәреп торған. Сығанаҡтарҙа был уның атамаһын Чардан, Чардин, Чардын, Чырдын тип уҡыйбыҙ. Унда нигеҙҙә төрки телле халыҡтар йәшәгән.

Сардин - ахыры, ул төркисәнән "сардар" - ғәскәр башлығы, тигәнде аңлатҡандыр. Быны Чердынға (Шырҙан) эре Искер (Искор) ҡәлғәһенең яҡын урынлашыуы раҫлай. Искер дошмандың һөжүмен кире ҡағыу өсөн төҙөлә. Шулай итеп, был факттар Чердындың (Шырҙандың) бөйөк хандар заманында уҡ төрки телле халыҡтар асылда башҡорттар ҡарамағындағы ханлыҡ булғанлығы хаҡында һөйләй. Сығанаҡтарҙан шул билдәле: Чердын (Шырҙан) бөтә төньяҡ төркиҙәренең баш ҡалаһы һаналған. Уның хакимдары урындағы хандарға хан ярлыҡтары биргән. Мәҫәлән, А. Фәтихов үҙенең "Ғәйнә иле" тигән китабында ("Ғәйнә иле", 1995 й. Барда) Чердын (Шырҙан) крайы халҡы тормошонда төп ролде уйнаған кеше хаҡында: "... Ғәйнетдин һәм ниндәйҙер Бикҡол Чердынға батшаға барып идара итергә ярлыҡ алған..." - тип яҙа. Тимәк, Чердын (Шырҙан) ябай ғына ҡала булмаған, ә ғәйнә башҡорттарының баш ҡалаһы булып торған. Ғалимдар ҙа шундай уҡ фекерҙә: "Бынан ике мең йыллап элек ошо ерҙә ҙур ҡалалар һәм ауылдар төҙөү мөмкинлеге барлыҡҡа килгән икән, был дәүләтселек шарттарында ғына мөмкин..." - тип яҙған В. И. Вернадский. Шуға күрә беҙ бында төньяҡ башҡорттарының Чердын (Шырҙан) дәүләте хаҡында һүҙ алып бара алабыҙ. Үткәндең тарихи материалдарын өйрәнеп, беҙ шундай һығымтаға киләбеҙ: башҡорттарҙың Чердын (Шырҙан) ханлығы, һис шикһеҙ, Бөйөк Башҡорт иленең бер өлөшө һаналған.

**(Дауамы бар).**

# БЕЛЕМЕ БУЛҒАНДАР

**Редакциябыҙҙың сираттағы ҡунағы - "заман толпарын" ауыҙлыҡлап алып, уны үҙенә хеҙмәт иттереүгә өлгәшкән арҙаҡлы ир-егеттәребеҙҙең береһе Хәлим ӘЙЮПОВ. Хәлим Ғайса улы баш ҡалала шәхси автомәктәптәр асып ебәреүсе беренсе башҡорт. Уның белгәндәре һәм кәңәштәре, тормошҡа ҡарашы һәм уны ҡабул итеүе, йәшәйеше һәм эшләгән эштәре - үҙе бер тәрбиә мәктәбе.**

**▸ Һәр иғтибарға лайыҡ нәмәнең, эштең, тарихтың башланғысы бар. Шул башланғысты ҡуҙғатып ебәрер сәбәптәре, сәбәптәрҙә хәрәкәткә килтерер маҡсаты, маҡсатты уятыр хыял була. Һеҙҙә, мәҫәлән, шәхси автомәктәп асыу идеяһы ҡайҙан барлыҡҡа килде һәм уны тормошҡа ашырыу ниндәй шарттарҙа үтте?**

- Мин оҙаҡ йылдар төрлө урындарҙа эшләнем, Себер тарафтарында ла йөрөп ҡайтырға тура килде. Һөнәрем буйынса водителмен. 1995 йылда Өфө ҡалаһының ДОСААФ системаһына инструктор булып эшкә урынлаштым. Шул өлкәлә тиҫтә йылға яҡын хеҙмәт иткәс, миндә шәхси автомәктәп асып ҡарау теләге тыуҙы. Ул арала малайҙар үҫеп еткәйне инде. Икенсе улым автомеханика буйынса урта һәм юғары белем үҙләштерҙе. Минең дә тәжрибәмде иҫәпкә алып, автомәктәп асыу эшенә тотондоҡ. Башта 100 квадрат метрҙан да кәм булмаған майҙанлы бүлмә талап ителде. Унан автомобилдәр кәрәк булды. Быларын атҡарып сыҡтыҡ һәм курстарҙы асып ебәрҙек. Торараҡ тағы ла бер автомәктәп астыҡ. Һәм әлеге көндә өсөнсөһө ҡағыҙ-документ тикшереүҙәрен үтеү өҫтөндә. Киләсәктә уныһы ла уҡыусыларын ҡабул итә башлар, тип уйлайбыҙ. Тарих ҡыҫҡаса ошолай.

**▸ 2014 йылда Рәсәй буйынса шәхси автомәктәптәрҙең эш сифаты Рәсәй Президенты тарафынан тәнҡиткә алынып, ҡаты тикшереүҙәр үткәйне. Был һеҙҙең мәктәптәр өсөн һынау булдымы?**

- Эйе, бындай тикшереүҙәрҙе беҙ уңышлы үтә алдыҡ. Рәсәй автомәктәптәренең ҡайһы бер талаптарға яуап бирмәүе, сифатһыҙ белем биреүе һәм башҡа күренештәр сәбәпсе булғайны был хәлдәргә. Автомәктәптәрҙе уҡып бөтөп, уңышлы имтихандар тапшырып һәм ике йыл стажы була тороп та, аварияларяһаусыларҙың һаны күбәйеүе ил етәкселеген хәүефкә һалғайны. Асылда, Рәсәй буйынса 35-40 процент автомәктәптәр генә ошо тикшереүҙе үтә алды. Өфөләге 83 мәктәптең 37-һенә генә эшен дауам итеү хоҡуғы бирелде. Мин был сикләүҙәр менән килешәм, бары тик белеме булғандарҙың ғына руль артына ултырыуы яҡлымын.

Ошо ваҡиғаларҙан һуң автомәктәптәр эшенә ҡайһы бер яңылыҡтар ҙа индерелде. Мәҫәлән, һәр автомәктәптең машинала йөрөп өйрәнеү өсөн 25 сутыйҙан да кәм булмаған ябыҡ майҙаны булырға тейеш. Имтихан ҡабул итеүҙәрҙә лә өҫтәмәләр бар. Элек теорияла 20 һорау булып, ике хата менән имтихан бирелһә, хәҙер был һорауҙар 4 бүлеккә бүленгән һәм бер бүлегендә хата ебәрелһә, шул уҡ бүлектән биш өҫтәмә һорау бирелә. Шуның өсөн ҡағиҙәләрҙе ятлап алыу ғына түгел, ә күңелгә һеңдергәнсе аңлап уҡыу кәрәк.

Практика мәлендә автодромдан тыш, ҡала эсендә йөрөтөү ҙә тикшерелә хәҙер. Элек, иң мөһиме, имтиханды тапшырыу, ҡала эсендә аҙаҡ та йөрөргә өйрәнелер әле, тип уйланы уҡыусы. Хәҙер ҡала эсендә йөрөй белеү төп факторҙарҙың береһе булып ҡалды.

**▸ Тимәк, уҡыуҙың, йәғни белем алыуҙың сифатын яҡшыртыу һәм талаптарҙы арттырыу маҡсатында эшләнә барыһы ла. Ошоға ярашлы, уҡыу хаҡы ла артҡандыр бит? Ғөмүмән, бөгөн автомобиль йөрөтөүсе таныҡлығын алырға теләүселәр кемдәр улар: күберәк ҡатын-ҡыҙмы, ир-егеттәрме?**

- Һорауҙың беренсе өлөшөнә яуап биргәндә, эйе, түләү хаҡы артты, хатта ике тапҡырға. Үрҙә телгә алынған тикшереүҙәрҙән һуң, автомәктәптәргә автомобилдәр, прицептар, компьютерҙар, уҡыу әсбаптары, ҡағиҙә билдәләре кеүек өҫтәмә әйберҙәр һатып алырға, базаны тулыландырырға тура килде. Майҙанды, бинаны ҡуртымға алыу ҙа ҡиммәтләнде. Һәм, эҙмә-эҙлекле рәүештә, уҡыу хаҡы ла түңәрәкләнде. Атап әйткәндә, хеҙмәтләндереү, төрҙәренә ҡарап, егерме мең тирәһенән башлана.

Ғәҙәттә, утыҙ кешенән торған төркөмдә яҡынса егерме ҡатын-ҡыҙ ҙа, ун ир-ат иҫәпләнә икән, курстан һуң шул ун ирҙең барыһы ла руль артына ултыра, ә ҡатын-ҡыҙҙың бары бишәүһе генә ныҡлап өйрәнеп китә ала. Уҡыған ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙарға теория еңел бирелә, улар йәһәт кенә аңлап, ятлап алып бөтә. Ә йөрөтөүгә килеп төртөлһә, баҙап ҡалалар. Ир-егеттәр теорияла хаталанырға ла мөмкиндәр, ә йөрөтөүҙә баш ватып тормайҙар. Был минең күп йыллыҡ күҙәтеүҙәрем һөҙөмтәһе.

**▸ Бөгөн халыҡта транспорт күп, шулаймы? Был үҙенә ҡүрә уңайһыҙлыҡтар ҙа, ризаһыҙлыҡ та тыуҙыра...**

- Кешелә транспорт ҡырҡа күбәйҙе, күрәһегеҙ, йорттар араһында автомобилдәрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Был заман шауҡымылыр. Хәҙер кешенең кредитҡа машина алыу мөмкинлеге лә ҙур бит. Йәштәр ҙә әйә була ала транспортҡа. Элек бит руль артында ултырған ҡатын-ҡыҙҙы күреү ҙә сәйер, хатта мөмкин түгел ине. Ә совет заманында машина алыу өсөн кеше сиратҡа яҙылып, йылдар буйы көтә һәм уны пенсияға сығыр алдынан ғына күрер ине. Унан һуң шул машинаһын һылап-һыйпап ҡына баҡсаға йөрөй. Ҡыш көнө йөрөтмәй, һаҡлай. Ихатала машина ҡалдырырға ярамай, ГАИ хеҙмәткәрҙәре шунда уҡ номерын һалдырып алып китә. Шулай була торғайны. Әммә бөгөн бөтөнләй икенсе күренеш. Элек автомобиле байлыҡ билдәһе итеп ҡараһалар, хәҙер халыҡ уны уңайлыҡтар тыуҙырыусы, ярҙамсы вазифаһында күрә.



Ә инде транспорт күплегенә ризаһыҙлыҡтың сәбәбе - ҡалалағы йорттарҙың, юлдарҙың, тротуарҙарҙың ҡулайлы булмауында. Йорт төҙөлгәндә үк унда йәшәүселәрҙең транспорты ла иҫәпкә алынырға тейеш тә бит. Кеше бит транспортын ҡайҙалыр йорто янына ҡуйып инергә тейеш. Әгәр махсус урын юҡ икән, ул уны ҡайҙа илтһен, ҡалдыра шунда - урамда, йәйәүлеләр юлында, тейешһеҙ урындарҙа. Ошо арҡала унайһыҙлыҡтар ҙа тыуа.

**▸ Яңынан-яңы автомобилдәр етештерелә, уларҙың заманса ҡулайламалары, уңайлыҡтары ла бихисап. Ә шулай ҙа, һеҙҙең ҡарамаҡҡа, һуңғы ваҡыттарҙа барлыҡҡа килгән айырыуса файҙалы яңылыҡтар иҫәбенә нимәне индерә алаһығыҙ?**

- Эйе, яңылыҡтар етерлек. Шуларҙың береһе, мәҫәлән, 2017 йылдан автомобилдәргә "Эра-ГЛОНАСС" тигән күҙәтеү системаһын ҡуясаҡтар. Әгәр водитель ҡайҙалыр юл фажиғәһенә осраһа, был хаҡта ГИБДД хеҙмәтенә автоматик рәүештә мәғлүмәт киләсәк. Руль артында ултырыусы фажиғә мәлендә ниндәй хәлдә булмаҫҡа мөмкин, бәлки, ул тиҙ ярҙам саҡырырлыҡ хәлдә түгелдер, бәлки, иҫен юйғандыр һ.б. Ә прибор тейешле урынға тулы һәм дөрөҫ хәбәр ебәрә аласаҡ. Быйылдан алып сит илдән индереләсәк автомобилдәрҙең ошо приборы булмаһа, улар һатыуға сығарылмаясаҡ. Прибор машинаға ҡуша ҡоролған, уның өлөшө булып тора. Был теҙмәгә автобустар ҙа инә. Дөйөм алып әйткәндә, ҡоролма транспорттың хәрәкәт итеү тиҙлеген дә, башҡа фактҙарҙы ла теркәп, яҙып барасаҡ.

Ә инде "яңылыҡтар" тигәнгә айырыуса баҫым яһағанда, хатта ҙур стажы булған водитель дә юл йөрөү ҡағиҙәләре китабын әленән-әле алып уҡып, ҡабатлап торорға бурыслы. Мин үҙем дә шулай итәм. Башҡаса мөмкин түгел. Уҡыным, беләм, ятлағанмын, тигән фекер төптө хата. Бына бөгөн ун-ун биш йыл стажлы водителдәрҙе имтиханға алып бар, уларҙың илле проценты һынауҙы үтә алмаясаҡ. Сөнки иҫке ҡағиҙәләрҙе нисек хәтерләп ҡалғандар, белемдәре лә шулар буйынса ғына. Йөрөй белеү менән юл йөрөү ҡағиҙәһен белеү араһында айырма бар.

**▸ Аңлауымса, автомәктәптәр һеҙҙең ғаилә бизнесы, шулай бит? Ошондай эшкә тотонғанда яуаплылыҡ үҙенә генә түгел, ә балалар иңенә лә яталыр бит инде?**

- Эйе, улым һәм ҡыҙым менән бергә эшләйбеҙ. Әлбиттә, һәр эштең үҙ ауырлыҡтары булған кеүек, бында ла еңел түгел. Әммә минең бер "тимер" тәртибем бар: белмәгән эшеңә тотонма. Күпмелер йылдар эшләп, өйрәнеп, тәжрибә туплап һәм эште үҙаллы алып бара алырымды аңлағас ҡына бында ғаиләмде лә әйҙәнем. Минең тәжрибәгә улдарымдың заманса белеме, йәштәрсә ҡыйыулығы, маҡсатҡа ынтылышы ҡушылды. Ә инде үҙең яҡшылап аңламаған, көсөңә ышанысың булмаған хәлдә нимәгәләр, хатта бәләкәй генә эшкә лә тотоноу ҡоро ҡул ҡабартыу ғына ул. Ысын оҫталыҡҡа, маһирлыҡҡа өҫтөнлөк бирәм. Беҙҙең хеҙмәт бөҙрәхана йәки сауҙа өлкәһе түгел, уларҙа сифатһыҙ тип

**руль артына**

иҫәпләгәндә тауарҙы кире ҡайтарырға ла, йәки сәсте ҡабаттан үҫтереп алырға ла була. Ә белемһеҙ водитель хатаһын күп осраҡта төҙәтеп булмай. Айырма шунда. 2014-2015 йылғы тикшереүҙәр һөҙөмтәһе лә шуны күрһәтте, еңел юл менән асылған, аҡса эшләү маҡсатына ғына ҡоролған автомәктәптәр һынауҙарҙы үтә алманы. Әлбиттә, беҙҙең бизнес та килем алыуға ҡоролған, әммә шәхсән минең өсөн курсанттың танытма алыуы түгел, ә шул танытма буйынса водитель булып китеүе күрһәткес. Үҙебеҙҙә уҡып сыҡҡандарҙың руль артында йөрөүен күреү һөйөндөрә.

**▸ Юл фажиғәләренең иң төп сәбәпселәренең береһе - эскән килеш руль артына ултырыу. Күпме генә һөйләнһә лә, яҙалары ҡатыланһа ла, йәмғиәт әле был сирҙән ҡотола алмай. Һеҙҙең быға ҡарашығыҙ нисек? Дүрт тиҫтәнән ашыу йыл руль артында булып та, берәй тапҡыр ғына булһа ла үҙегеҙгә ошондай йомшаҡлыҡты рөхсәт иткәнегеҙ булманымы?**

- Эйе, үкенескә ҡаршы, ҡайһы берәүҙәр штрафтар ҙурлығына, хатта төрмәгә юлығыу ҡурҡынысы булыуына ла ҡарамай, эскән килеш машина йөрөтөүҙә дауам итә. Ундайҙарҙы мин аңлы рәүештә үлтереүсе булырға ынтылыуға тиңләйем. Быға башҡаса аңлатма юҡ. Үҙемә килгәндә, руль артында түгел, башҡа ваҡытта ла спиртлы эсемлекте ауыҙыма алмайым. Дуҫлыҡ юҡ ул ғәҙәт менән.

Беҙҙең ғаиләлә биш бала тәрбиәләнеп үҫте, уларҙың өсәүһе - малайҙар. Балалар тәрбиәләүҙәге төп маҡсатыбыҙ - уларҙа эскелеккә һәм уға әйҙәп килеүсе насар ғәҙәттәргә нәфрәт,

*✓ Ир затынан булған башҡалар алдында улығыҙҙың абруйына тап төшөрмәгеҙ. Малайығыҙҙы асырғанып әрләмәгеҙ, кеше алдында уға тауыш күтәрмәгеҙ, әгәр ул бәләкәй генә хата эшләне икән, быны өсөн дау ҡуптармағыҙ.*



# ҒЫНА...

## ултырырға тейеш

кире ҡараш уятыу ине. Бының өсөн балаға һүҙ менән генә һөйләп аңлатыуҙың, әрләү-туҡмауҙың файҙаһы юҡ, ә әсәй-атайҙың йәшәйеш, тормошҡа ҡараш, ҡылыҡтары өлгөнө иң һөҙөмтәлеһе икәнен дә белдек. Балаларыбыҙ иҫерек табындар, иҫерек ғауғалар ишетмәй үҫте. Һәм, бәхеткә ҡаршы, хәҙер улар үҙ ғаиләләрендә лә был ҡағиҙәләрҙе, тәртипте тота.

**Руль артында ултырған ҡатын-ҡыҙға ташлама яһалырға тейешме? Уҡытҡанда, имтихан алғанда йәки башҡа автомәсьәләләрҙә?**

- Водитель - ул ҡатын-ҡыҙ ҙа, ир-егет тә түгел, ул - водитель. Машина йөрөтөүсенең милләте лә, енесе лә, башҡа ташлама алырлыҡ айырмаһы ла юҡ. Мәҫәлән, авария булғанда бит машина, туҡта, мин йомшағыраҡ бәреләйем әле, руль артында ҡатын-ҡыҙ бит, тип тормай. Йәки, ҡатын-ҡыҙға светофорҙы көтмәй үтеп китергә лә була, тигән ҡағиҙә юҡ. Ҡағиҙә барыһына ла бер төрлө һәм уны төплө белеү һәм үтәү зарур.

Уҡырға килгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың күптәре үҙҙәренә ниндәйҙер ташлама көтә ул барыбер. Мин уларға: "Бында һеҙ барығыҙ ҙа курсант, тимәк, белем алырға, уҡырға тейешһегеҙ. Руль артында һеҙ - водитель", - тип әйтәм. Күптән түгел статистик мәғлүмәттәрҙе ҡарап, аптыраным: эскән килеш тотолған водителдәрҙең утыҙ проценты ҡатын-ҡыҙ булып сыға икән. Бындайҙы ишетеүе, мәҫәлән, миңә бик ауыр.

**Ун һигеҙ йәштән водитель таныҡлығына эйә булып була, уныһы билдәле. Ә нисә йәшкә тиклем машина йөрөтөргә мөмкин? Бындай сикләүҙәр бармы ул, әллә хәлеңдән килгән ҡәҙәр машина йөрөтөргә мөмкинме?**

- Хәҙер йәш буйынса сикләүҙәр юҡ, әммә медицина тикшереүе бар бит. Элек ҡатын-ҡыҙҙар 55-тән, ирҙәр 60-тан үтһә, өс йыл һайын медицина тикшереүе тейеш ине, 2015 йылдан барыһы ла йыл да үтә был комиссияны. Әлбиттә, оло кешенең рулгә ултырыуын медкомиссия сикләй ала. Мәҫәлән, уның ҡолағы насар ишетһә, күҙе күрмәһә, реакцияһы яйланһа йәки психиатр тестарын үтә алмаһа, йәки ошоларҙың береһе генә аҡһаһа ла, ул водитель булыуға яраҡһыҙ иҫәпләнә. Әммә күп осраҡта ололар быны үҙҙәре аңлап та етмәҫкә мөмкин. Шунлыҡтан, уларҙы ла контролдә тотоу зыян итмәҫ ине.

Бер миҫал. Бынан биш йылдар самаһы әүәл 65 йәшлек бер ҡатын беҙҙең автомәктәпкә уҡырға килде һәм шундай тырышып үҙләштерҙе барыһын да. Автодромда йөрөп сыҡҡандан һуң да үткән юлды метрлыҡ алып үлсәп, үҙенә билдәләп сыға, ҡат-ҡат һораша, шылтырата. Шул курсант имтихандарын беренсе тапҡырҙа уҡ яҡшы тапшырып, икенсе көн машинала йөрөй ҙә башланы. Мин уны әле лә юлдарҙа осратам.

Әлбиттә, медицина тикшереүен танышлыҡ буйынса яҙҙырып алыу, шулай уҡ техосмотр эшләтеү, уҡымайынса таныҡлыҡ һатып алыуҙар ҙа юҡ түгел, әммә былар барыһы ла зыян ғына килтерә. Таныҡлыҡ руль артында үҙе йөрөй алмаған кеүек, ялған медицина күрһәткестәре лә һеҙҙең сәләмәтлек өсөн яуап бирә алмай.

**Хәлим Ғайса улы, ғаиләһе, балалары, ҡатын-ҡыҙ алдындағы ир-егет яуаплылығы тураһында ла һөйләшеп үтәйек әле. Бөгөн көслө затты "яуапһыҙ" тип мөһөрләүҙәр йышайҙы. Ошо ғәйепте танышһығыҙмы, әллә инҡар итәһегеҙме?**

- Яуаплылыҡ, әлбиттә, һәр кешелә лә булырға тейеш. Әммә ҡатын-ҡыҙ менән ир-егетте сағыштырғанда, күҙгә күренгән матди бурыс ирҙәр иңендә булды һәм буласаҡ та. Ҡатын-ҡыҙҙың бурысы нескәрәк, күҙгә башҡа артыҡ ташланып бармаған, әммә шулай уҡ мөһим, хатта яуаплыраҡтыр ҙа әле, тип уйлайым. Ир кеше ғаиләнең бөтөнлөгөн, именлеген ҡайғырта. Бында аҡса табыу, ғаилә ағзаларын туйындырыу, кейендереү, торлаҡ йүнләү һ.б. төшөнсәләр инһә, ҡатын, әсә булған кеше балаларҙы тәрбиәләй, уларҙың рухи торошон дөрөҫ юҫыҡҡа һала, дөйөм ғаиләнең эске тәбиғәтен көйләй.

Үҙебеҙҙең миҫалды алғанда, мин дә, ҡатыным да ғүмер буйы үҙ бурыстарыбыҙҙы атҡарып йәшәнек, тип иҫәпләйем. Мин мал таптым, ҡатыным шуны үҙ белдеге менән урынлаштырып тора белде. Мыжыманы, һуҡранманы, талап итмәне, кәрәк булғанын кинәйәлә генә итеп аңлата, һорай йәки шелтәләй алды. Ире үлсәгәнде ҡабаттан үлсәп йәшәткән ҡатындар ҙа була. Минең холҡом ундайҙы күтәрә алмай һәм ҡатыным быны белә. Үҙ сиратымда, балаларымдың әсәһен рәнйетмәҫкә, кәмһетмәҫкә, күңелен китмәҫкә тигән эске талаптарымдан да тайпылмайым. Бына ошо ябай ғына тәртиптәргә нигеҙләнгәндә, барыһы ла үҙ урынына була ул.

**Биш бала атаһы һәм тағы ла биш ейән-ейәнсәр олатаһы булараҡ, һеҙҙән бала тәрбиәләү алымдарын да һорарға булалыр, тип уйлайым. Һеҙҙә ниндәй ҡағиҙәләргә таянды был мәктәп?**

- Ниндәйҙер айырым методика булманы инде, иң ябай тәрбиә - хеҙмәт. Балаларҙың буш ултырғанын яратманым. Ҡала тормошонда йәшәһәләр ҙә, һәр ваҡыт нимә менәндер мәшғүл булыуҙарын талап иттем. Өй эшеме, мәктәп эшеме, йәмғиәт эшеме - бергәләшеп, ҡуша ҡайнашып йөрөһөндәр, тинем. Тик уларҙы әрләп, этеп-төртөп, ҡурҡытып тоторға ярамай. Бигерәк тә малайҙарҙы баҫырға ярамай. Иптәш булһындар улар һиңә. Балалар хәтәр аҡыллы бит улар, тыңлай, ишетә белһән, хатта ейәндәр ҙә аптыратып ҡуя ҡай саҡ.

Бала сағында бала туйғансы йоҡлаһын, уйнаһын, теләгәнен ашап үҫһен, тип артыҡ шаштырыуҙар яҡлы түгелмен. Бына беҙ ҡатыным менән икебеҙ ҙә күп балалы ғаиләлә үҫтек, мин бик иртә әсәйһеҙ ҡалдым, мохтажлыҡ етерлек булды, бала саҡтан хеҙмәткә егелдек, әммә был беҙҙе кәм итмәне. Киреһенсә, сыныҡтырҙы, үҫтерҙе генә. Бөгөнгө ҡыҙыҡтары артыҡ күп булған заманда баланың күңелен күреү өсөн тырышып торорға түгел, ә уның рухын нығытыу өсөн көс һалырға кәрәк.

Ғаиләбеҙҙә биш бала булыуына ҡайһы бер кешеләр сәйерһенеп, хатта йәлләп ҡараны. Нисек аҫырай былар ул тиклем баланы, тигәндәрҙер инде. Тик беҙ был ауырлыҡты тойманыҡ та, сөнки уны ауырлыҡ итеп ҡабул итмәнек. Бында ҡатынымдың уңғанлығы ла ярҙам иткәндер. Балалар һәр ваҡыт ҡараулы, таҙа, осҡор күҙ аҫтында булдылар. Хатта мәктәптә лә йыш ҡына өлгө итеп ҡуйҙылар уларҙы. Шунлыҡтан, балаларға ғүмер бирһәгеҙ икән, берәүме ул, бишәүме, хөкүмәт ярҙамына мохтаж булып ултырмағыҙ, унан әллә нимәләр талап итмәй, үҙегеҙ ҡарап үҫтерерлек була белегеҙ. Балаларға ла шулай тием. Тағы ла мин уларҙы: "Бер-берегеҙгә тотоноп, терәк булып, туған булып йәшәгеҙ", - тип өйрәтәм. Ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ, ти халыҡ мәҡәле лә. Береһендә ҙур булмаған проблема килеп сыҡһа ла, башҡаларын уның янына ебәрәм, барһындар, хәленә инһендәр, ярҙам ҡулы һуҙһындар, тим. "Ҡунаҡҡа барырға ваҡыт тапмаһаң да, ярҙам итергә ваҡыт тап", - тип әйтәм. Беҙ барҙа шулай өйрәнһәләр, һуңынан бер-береһенә һыйына, бер-береһен ҡурсалай белерҙәр. Дөрөҫ ҡабул итә белгәндә туғанлыҡтың, ҡан-ҡәрҙәшлектең ҡөҙрәте ҙур бит ул.

Ейәндәремә килгәндә, уларҙы үҙ ата-әсәләре тәрбиәләй, мин яратып, ҡурсалап, ҡайһы ваҡыт бер аҙ буйлатып та ебәреүсе олатай, ҡартатай ролендәмен генә. Өлкән ейәндәрем дуҫ, серҙәш итеп тә күрә, ышаныстарын аҡларға тырышам инде, башҡаса булмай.

**Бына шулай, барыһы ла ғәҙәти, ябай, әммә шул уҡ ваҡытта эшлекле, ҡәтғи һәм тәртиптә. Хәлим Ғайса улының эшендә лә, ғаиләһендә лә был аныҡлыҡ нигеҙ итеп алынған. Ундай кеше менән аралашыу - үҙе бер фәһем.**

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**әңгәмәләште.**

*ИР-ЕГЕТ ТӘРБИӘҺЕ*

# БӨТӨН АТАЙҘАР ҘА...

## тәүҙә малай була

**Улың ысын ир-егет булып үҫһен өсөн ни эшләргә? Был турала психологтар ни ти икән, әйҙәгеҙ, уларҙың кәңәштәрен ҡарап үтәйек.**

• Улығыҙҙың тулы ғаиләлә, ысын атайлы булып үҫеүен тәьмин итегеҙ. Был үтә лә мөһим.

• Ир затынан булған башҡалар алдында улығыҙҙың абруйына тап төшөрмәгеҙ. Малайығыҙҙы асырғанып әрләмәгеҙ, кеше алдында уға тауыш күтәрмәгеҙ, әгәр ул бәләкәй генә хата эшләне икән, бының өсөн дау ҡуптармағыҙ.

• Улығыҙҙың үҙен ысын ир-егет итеп танытҡан кешеләр менән аралашыуын һәр яҡлап күтәрмәләгеҙ.

• Улығыҙға өлкән кешегә өндәшкән кеүек хөрмәт менән өндәшегеҙ. Улығыҙҙың алты ағзаһы ла теүәл, аҡыллы, тик әлегә әҙ генә бәләкәй булыуын танығыҙ.

• Улығыҙҙың "уңайһыҙ", "үҫкәс белә торған" һорауҙар яуҙырыуына ҡул һелтәмәгеҙ, был мәсьәләлә етдилек күрһәтегеҙ. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: малайҙар бер ҡасан да урынһыҙ, бер ҡатлы һорау бирмәй. Бары тик ата-әсәләр уларҙың ҡайһы бер һорауҙарҙы дөрөҫ итеп аңлатып ҡына бирә алмай.

• Улығыҙҙы иғтибар менән тыңлағыҙ, шулай ҙа ул һеҙҙең тыйғанды ла тыңламай, ләпелдәүен белә икән, был ҡылығын хупламауығыҙҙы һиҙҙереп ҡуйығыҙ.

• Улығыҙҙы әпәүләмәгеҙ, уны алдығыҙға алмағыҙ.

• Даими рәүештә уға үҙ йүнен үҙе күреүҙе талап иткән эштәр йөкмәтегеҙ. Аҙағыраҡ ғаиләгә файҙа килтерә торған йомош-эш ҡушығыҙ.

• Әгәр ул эшлекле әүҙемлек, инициатива белдерә икән, хатта уның был эше сынаяҡ ватыу һымаҡ йә башҡа төрлө сығымға килтерһә лә, тыймағыҙ.

• Улығыҙ эш менән булған берәй ир кешенең эргәһендә урала икән, ҡыумағыҙ. Киреһенсә, уны олатаһына, ағаһына йомошсо булып, ярҙам итеүгә дәртләндерегеҙ.

• Маҡтауҙа ла, шелтәлә лә сама белегеҙ.

• Әгәр улығыҙҙың тәненең берәй йәрәхәте бар икән, әрләшмәгеҙ, ай-вайламағыҙ - ауыртҡан урынын дарыулағыҙ ҙа: "Батыр яраһыҙ булмай..." - тип дәртләндерегеҙ.

• Улығыҙҙы 4-5 йәшлек сағынан уҡ йәмәғәт транспортында ололарға, ҡатын-ҡыҙҙарға, шул иҫәптән, үҙ әсәһенә урын бирергә өйрәтегеҙ. Транспортҡа инеү менән ултырғысҡа йомолоуҙан тыйығыҙ.

• Тағы, мәктәпкә бармаҫ элек уҡ улығыҙға үҙегеҙҙең ҡайһы бер эштәрегеҙ, мәшәҡәттәрегеҙ тураһында һөйләй йөрөгөҙ. Әйҙә, һеҙҙе йәлләһен, ирҙәрсә терәк була башлаһын. Бөтөн атайҙар ҙа тәүҙә малай була бит.

• Сабый сағынан көн һайын физик күнекмәләр эшләтегеҙ, йөҙөргә, саңғыла, ике тәгәрмәсле велосипедта йөрөргә, туп менән төрлө уйындар уйнарға өйрәтегеҙ.

• Улығыҙҙың ғәҙеллеген һәр яҡлап маҡтағыҙ. Алдашмаһын, "Кырын эш ҡырҡ йылдан һуң булһа ла беленә", тигән әйтемде һеңдерегеҙ, ниндәй генә хәл килеп тыуғанда ла, алдашыуға ҡарағанда, дөрөҫтө әйтеү яҡшы икәнен әйтә йөрөгөҙ.

• Улығыҙҙа бәләкәй сағынан эшлеклелек сифаттары тәрбиәләгеҙ, уны көн тәртибен тоторға, бара торған урынға аҙ ғына запас ваҡыт ҡалдырып барырға өйрәтегеҙ. Ысын ир-егет бер ваҡытта ла барыр еренә һуңламай.

• "Егет һүҙе бер була" тигән аҡылды ла улығыҙға бәләкәйҙән аңлатығыҙ. Әйткән һүҙҙе, вәғәҙәне үтәү шарты тураһында белдерегеҙ. Вәғәҙә - иман.

• Улығыҙға "алйот", "эшкинмәгән" һымаҡ һәм башҡа эпитеттар менән әрләмәгеҙ, битәрләмәгеҙ, унан көлмәгеҙ. Ундай һүҙҙәр күңелдә оҙаҡ һаҡлана.

• Улығыҙға кеше хаталарын аңлап ҡабул итергә өйрәтегеҙ. Кеселекле булыу, кешене аңлау - ысын ир-егеттәргә генә хас сифат.

• Улығыҙға 6-7 йәш тулдымы, уны ғаиләнең кәңәш ҡоро ағзаһына әйләндерегеҙ. Йорт йыһазын ҡайҙа ҡуйыу кеүек һәм башҡа мәсьәләләрҙе хәл иткәндә уның да фекерен тыңлағыҙ.

• Улығыҙҙың эшлекле йә ижади һәләттәрен мөмкин тиклем иртә асыҡларға тырышығыҙ. Ләкин берүк үҙегеҙҙең ҡарашты көсләп таҡмағыҙ, әгәр ул ҡыҙыҡһыныуҙарын йыш алыштыра икән, борсолмағыҙ. Күптәр үҙҙәренең булмышын шунда уҡ таба алмай.

• Улығыҙға төрлө эш ҡоралдары, механизмдар һатып алығыҙ һәм уларҙы бергәләп өйрәнегеҙ.

• "Кәрәк булғас, оҡшамаған эште лә эшләргә тура килә, зыянлы булғанға күрә, күңелгә ятышлы эштән дә баш тартырға тура килә", - тип, улығыҙға тотанаҡлыҡ һәм рух ныҡлығы өлгөнө күрһәтегеҙ.

• "Өҫтөң - бөтөн, тамағың - туҡ, йәшәр ерең булыуына ҡыуан да йөрө", тип, улығыҙҙы уңайһыҙ хәлдә тотмағыҙ. Әгәр ҙә инде был һүҙҙәрҙе әйтмәй сарағыҙ ҡалмаһа, тыныс, артыҡ хистәргә бирелмәй генә әйтегеҙ.

**✔ Ул ҡыуып етә лә, атты һелкә тартып туҡтатҡас, ауыҙынан кескәй генә аҡһыл йомортҡа сығарып бирә. Мин был ҡылыҡтың ахмаҡлыҡ икәнлеген инде аңлайым, әммә шул уҡ ваҡытта иҫ киткес батырлыҡ һымаҡ та ҡабул итәм.**

# АТАҠАЙ

Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

Хикәйә



Ауылдан ҡустым шылтыратты. Уның, трубканы күтәргәнемде белгәс тә өндәшмәй тороуы мәшәҡәтле мәлдә бер аҙ йәнемә тейҙе, шуға ҡоро тоттом:

- Эйе! Сәләм! Йә, тыңлайым!

Ул тағы ла саҡ ҡына пауза яһаны ла сәләмһеҙ-ниһеҙ:

- Атай үлде, - тине.

- Үлде?! Нисек... үлде? - ҡапылда аңлай алманым.

- Үлгән булған... иртәнсәккә. Районға алып китәбеҙ хәҙер. Беҙ йөрөп ҡайтҡансы, һеҙ йыйыла тороғоҙ.

Иҫемә төшкән беренсе һорауҙы бирәм:

- Эскәйнеме?..

- Ы-ы... һуҡмышлап йөрөнө. Бахмур тиһәң, эргәһендә эсеп бөтөлмәгән шешәһе ултыра. Бөткәндер инде организм да, машина түгел бит. Икенсе яҡтан, йәше лә арыуыҡ - һикһәнен тултырҙы. Ярай - шул минең, ҡайтығыҙ.

Шул мәл коллегаларымдың тауышын ишетмәҫ булдым. Улар һаман хәлемде аңғармаҫтан бәхәсләштеләр-бәхәсләштеләр ҙә, фекеремде ишетергә теләпме, барыһы берсә миңә төбәлде. Уларҙың һораулы ҡараштарына ҡаршы тороп баҫтым һәм "Атайым вафат" тигән ике ауыҙ һүҙҙе генә һығып сығарып, тышҡа ынтылдым. Юҡ, иларға, сәбәләнергә тип түгел, ә ҡапылдан бәгеремдәге һыҙланыуға сыҙамауҙан...

"Атай үлде" тип илап ултырыусы булманы. Ғүмерҙең мәңгелек түгеллеген аңларлыҡ, йәшәрен йәшәгән, ашарын ашаған йәнде оҙатыуыбыҙҙы ла белер йәштәбеҙ барыбыҙ ҙа. Кеше мәрхүм булғанда беҙҙә артыҡ илаулау юҡ ул былай, әммә әсәйҙе оҙатҡанда күҙ йәштәрен тыйып алып булмай ине. Икеһе лә ғәзиз кешеләр, беҙгә ғүмер биреүселәр, тибеҙ ҙә, нисек кенә булһа ла икеһен ике төрлө ҡабул итәбеҙ шул. Ниңә улай икән? Улай тиһәң, яуап үҙе үк килә. Атай... әсәй була алмай инде. Әсәй - ул әсәй. Ул - бәрәү. Атай ҙа бәрәү ... Тик ул алыҫыраҡ, унда әсәй йылылығы, әсә наҙы юҡ. Шуғалырмы...

Ғәҙәтенсә, ауылса, мосолманса оҙаттыҡ атайҙы. Йола ҡушҡанса саҡырыла торғандарҙы саҡырҙыҡ, бар тәртиптәрен үтәнек, аш-һыуын әҙерләнек, аяттарын уҡыттыҡ, хәйерҙәрен тараттыҡ. Әйтеп ҡалдырған үтәрлек һүҙе лә булманы, васыяты ла юҡ. Әллә айнығып та етмәй китеп барғандыр, кем белә. Йоҡлай, әле уянмаған тип уйлаған өйҙәгеләр ҙә, ә ул инде һыуынып ятҡан. Төпкә төшөп киткәндә, зыяратҡа ҡуйылмаҫҡа ла тейештер. Тик... атайың тураһында көфөр әйтеп тораһыңмы инде. Ыҫта-ыҫта! Кит, нимә уйлап ултырам!

Өҫөн-етеһен бер юлы үткәреп ҡуйып, халыҡты оҙатып, кискә үҙебеҙ генә ҡалғас, өлкән ағай өҫтәл башына тороп, һүҙ алды. Беҙ уның шулай һәр йыйынылыбыҙҙа сәләмләп һәм йомғаҡлап ҡуйыуына күнеккәнбеҙ. Атай урынына уны ҡабул иткәнгәме? Атайҙан булмағас...

- Шулай, туғандар... Әсәй эргәһенә атай ҙа китеп барҙы... Ҡалайтаһың, барыбыҙ ҙа бара торған ер, тигәндәй. Тыуымдың үлеме лә бар, - һәр беребеҙ алдына ғына текәлеп тыңлап ултырабыҙ. - Атай тураһында нимә әйтә алабыҙ?.. Үлгән кеше тураһында насар хәбәр әйтергә ярамай, әммә бында бөтәбеҙ ҙә - уның балалары, мин әйтмәһәм дә һәр кем үҙенсә уйлап ултыра... Артыҡ йүнле атай була алманы, ысыны шул. Тик беҙҙең уға үпкә юҡ, ул беҙҙең атай, беҙҙе яралтҡан кеше. Ул да, моғайын, үпкәләп китмәйҙер, ҡусты менән килен һәйбәт итеп ҡараны: әсәйҙе лә, атайҙы ла. Һәр саҡ өҫтәре таҙа, урындары йылы, тамаҡтары туҡ булды. Беҙ ҙә ҡайтып, хәл белеп торҙоҡ. Нисек булғанда ла, уға ошо биргәндәре өсөн рәхмәтлебеҙ... Үҙебеҙ унан яҡшыраҡ атайҙар булайыҡ - шул.

Киләһе көн йыназаға йыйылыусылар таралды, мин бындағы ғаилә янында ҡалдым, ялым бер аҙналыҡ. Яйлап атай менән әсәй йәшәгән бүлмәне бушаттым. Әсәйҙән артыҡ әллә нимә ҡалмаған да бында. Күлдәк-яулыҡтарын күптән таратып, яҡындарына биреп бөткәнбеҙ. Атайҙың күлдәк-ыштандарын ҡараштырып, ағай-ҡустылар кәүҙәһенә самалап, ярағандайҙарын айырып һалдым. Ҡалғандарын хәйер менән бергә төйнәп, балаларҙан ауыл ҡарттарына ебәрттем. Бабайҙар еҫе сығып торған түшәк-юрғанын төрөп алып, өй ҡыйығы аҫтына, әсәйҙеке элеүле торған ергә мендереп, йәнәшәһенә бәйләп ҡуйҙым. Торалар, ана, йән әрнеткес бер күренеш булып...

Эсемде әллә нимә яндыра. Артыҡ ҡайғырмайым да кеүек, әммә өҫтөмә бөркөлгән бер нәмәне һирпеп ебәреп, ныҡлап һулыш ала ла алмайым. Күңелем тулышҡан һымаҡ, тик һыҡтарлыҡ уҡ түгелме әллә хәлем?.. Шул миктәгән баҫылғанлыҡ менән уйға сумып, мыштырлап ҡына эш менән булам.

Атайҙың урыны аҫтынан иҫке сумаҙандарҙы һөйрәп сығарҙым. Әсәй үлгәс, уның һаҡлаған бөтә альбомдарын, әллә күпме хаттарын, документтарын ҡумта-сумаҙандары менән үҙе карауатының аҫтына шылдырып ҡуйғайны. Заманында әсәй, шуларҙы барлап ултырғанда: "Дыу! Нимәһен бер шул ҡағыҙҙарыңа күмеләһең дә ултыраһың! Дауна үлеп бөткән әҙәмдәрҙе ҡарап!" - тип ебәрә ине. Хәҙер, ана, үҙе лә шул исемлеккә инде. Мин үҙенә:

- Нимәгә кәрәк был ҡый, атай, һиңә? Уларҙы тотоп та ҡарамайһың бит, - тигәндә:

- Ятһын. Әсәндеке, - тип кенә ҡуйғайны.

Ә үҙе ғүмер буйы әсәйҙең ҡәҙерен белмәне. Ошо рәнйеүҙе ишетерлек итеп әйттем. Шуны әйткем килеп торған, күрәһең. Үпкәләп түгел, хәҡиҡәт итеп. Белмәне шул ҡәҙерен әсәйемдең, ә үҙе бала шикелле унһыҙ бер көн дә тора алманы. Күҙе алдынан осоп барҙы әллә. Саҡ ҡына ҡайҙалыр сыҡһа, алаҡанлап: "Әсәң ҡайҙа?"- тине лә торҙо.

Альбомдарҙағы һүрәттәрҙе иҙәнгә туҙҙырып ташланым. Кәрәктәрен үҙемә бүлеп алмаҡсымын. Ҡалғандары ошонда - төп йортта һаҡланыр. Ейән-ейәнсәрҙәр килгәндә ҡарар, әле олатай-өләсәйҙәрен танып белмәй ҡалған тәнәйҙәре лә, тыуаһылары ла бар.

Атайымдың әрме фотолары ярым-йорто, бөкләнеп, йыртылып бөткән. Үҙенең йәшерәк сағында, эскәнендә, шулай фотоларын йомарлап, турап ташлай торған ғәҙәте булды. Былары ана шул "яуҙарҙан" ҡалғандары. Әсәй уларҙы йыйып, йәбештереп һаҡларға тырышҡан, күрәһең. Бөтөнөрәктәрен алып ҡарайым - һыу һөлөгө кеүек егет! Ундай сибәрлек, быңдай сая ҡараш, мөһабәт һын... беҙҙең беребеҙгә лә күсмәгән, ахыры. Бик матур булған ул йәшлегендә. Өс класс белеме менән уҡымышлы әсәйемде әүрәтһен әле. Өләсәйем килеп: "Был башҡорттоң кирза итегенә ҡыҙығып сыҡтыңмы?" - тип юҡҡа ғына әрләп китмәгәндер. Һо-о, кирза итегенә генә лә ғашиҡ булырға мөмкин булған шул.

Бер фотола һабантуйҙа көрәшкәне эләккән. Тиргә батҡан, йыуан билендә таҫтамал, ҡорһағы бүһерелеп алға сыҡҡан, ярһыған - ҡарашы дейеүҙеке. Ҡараһам, халыҡ араһында арттараҡ минең ярты битем эләккән. Йоҙроғомдо ауыҙыма ҡымтып борсолоп торам. Атайым өсөнмө, әллә уның ҡулына эләгәсәк башҡа батырҙар өсөнмө?

...Уның тап, шул фотолағы сағы ине, буғай. Шулай ҙур, минең ҡарамаҡҡа итләс ине. Киң арҡаһына яурынымды терәп, аяҡ һуҙып, артҡа ҡарап ултырып алғанмын арбала. Икәүләшеп йәйләүгә барыуыбыҙ. Һәр кем үҙ уйына сумып килә торғас, ул, сыбырҡы һабын иҙәп, бер аҡланға күрһәтә:

- Ошо тирәгә өләсәңдәр йәйләүгә сыҡҡан. Бынан үткән һайын: "Эй, ер-һыу ҡартаймай ҙа инде, хас беҙҙең бала саҡтағы кеүек бөтәһе лә, ти торғайны", - тип ҡуя. Тауышы йомшарып, әллә хатта ҡалтырап киткән кеүек була. Мин ҡайырылып уға ҡарап алам. Әсәһе хаҡында һөйләгәндә шулай күңеле йомшарып киткеләй. Әллә ниндәй бер эске йылылыҡ, оло һөйөү менән телгә ала өләсәйҙе. Әсәйем әйтмешләй, "ҡартайғансы бәпәй булып йәшәгәнгә"ме икән?

Икебеҙ ҙә тынып ҡалабыҙ ҙа, мин, нимә әйтергә белмәйме, юл ыңғайына килгән йылға аръяғындағы текә яр битендә сорлашҡан ҡарлуғастарға ҡарап, уйһыҙ ғына әйтеп ҡуям:

- Шул ҡарлуғас ояһынан берәйһе йомортҡа алала микән?

Бойоғоп киткән атайым "Тпр-р-ру!" тип екереп, ҡарышҡыр бейәһенең ауыҙлығын ҡайыра биреп тарта ла ҡаршы ярға эйәк ҡаға:

- Анауҙы әйтәңме?

- Эйе.

Ул күҙен ҡыҫа биреп самалай: мин нимәләр әйтеп өлгөргәнсе, дилбегәне усыма йомдороп, кирзалары менән сылғауын сискәс, ҡалған кейемендә көйө ярҙан ағымға сөңгөй. Күҙ асып йомғансы булған был хәлдән дә, уның һоро тулҡындар эсенә сумып юғалыуынан да ҡурҡып, эргәләге тауҙарҙы шаңҡытып сәрелдәп ебәрәм:

- Ата-а-ай!

Минең тауыштан саҡ торған ҡылтым бейә өркөп, ҡапыл юртып китә. Туҡтатыу ҡайҙа? Етмәһә, үҙем һаман һыуға ҡарайым. Урман эсенә елеп барғанда, уның йылға уртаһында йөҙгәнен шәйләп ҡалам, ә арба сыбыҡ-сатырға һуғылып, шатыр-шотор шырлыҡҡа инеп тә китә.

Бейә ағас араларында арыбире төртөлөп йөрөп тынысланғас, үҙ яйы менән кире юлға сыға. Мин дилбегәне исем өсөн генә тотоп, һаман ян-яҡты байҡайым. Бына бер мәл, ҡараһам, атайым! Бер яҡҡа аҡһаҡлай биреп, һәлпәнләп, ҡабаланмай ғына йүгерә. Ялан аяҡ, лыс һыу! Мин уның был хәләтенән тамам шаңҡып киләм. Ул ҡыуып етә лә, атты һелкә тартып туҡтатҡас, ауыҙынан кескәй генә аҡһыл йомортҡа сығарып бирә. Мин, әле 8-10 йәшлек кенә бала, был ҡылыҡтың башҡа һыймаҫ ахмаҡлыҡ икәнлеген инде аңлайым, әммә шул уҡ ваҡытта иҫ киткес батырлыҡ һымаҡ та ҡабул итәм. Устарымды ҡушлап, йомортҡа һалыуға оя һымаҡ итеп һуҙам, үҙем көләм:

- Алйот.

Әсте шул атайым. Иҫерһә, еңгә әйләнеп, донъя онтап, кем менән булһа ла һуғышҡыһы килә торғайны. Боласыл ғәҙәтенән барыбыҙ ҙа ғарыҡ булдыҡ. Барыһын да әрләне. Әсәйемдән башлап, кесе ҡустыма тиклем. Ниңәлер миңе үткәрҙе. Миңә аҡырайта ҡарап ала ла, иренен ҡымтый биреп торғас, "Бисура!" тиер ине. Шулай. Уның өсөн бисура булдым. Әрләү булдымы был, маҡтаумы, әллә башҡа мәғәнәләме, һәр хәлдә, шунан үтмәне. Ағайымдарға сыбытҡы ла, ҡайыш та эләкһә, миңә бармағының осон тигеҙеү түгел, елен дә ҡағылтманы. Уны, иҫерһә - белмәй, тигән булдылар. Белә ине ул. Боларып ятып, бөтә кеше ҡасып бөткәндә, инде ҙурая башлағас, юрамал янына барам, ул ҡулындағы әйберен мине ҡырлатып, икенсе яҡҡараҡ ата, шул яҡҡараҡ шылһам, икенсе юҫыҡҡа ташлай.

- Кит, кеше көлдөрмә, - тием, - бар ят, йоҡла! Һинән һуң күпме йыйыштырырға кәрәк.

Әсәйемә, шулай итә, тиһәм, юҡтыр, ул бит алйый, бер нәмә лә белмәй, тип үҙенекен һөйләй.

Быларын иҫләгем килгәндән түгел, бер ҡыҙмаса булып төшкән фотоһын ҡулға алғандан хәтерләп алам.

...Ҡышҡы юлда йәйәү ҡайтып киләм. Егерме саҡрымлап бар. Ҡараңғы төшкән. Автобус йөрөмәгән мәлдәрҙә, телефон юҡта, йәйәү йөрөлдө лә инде. Ярты юлды үткән ерҙә утар бар. Шунда йылҡы ҡышлатып яталар. Атайымдың сменаһы булырға ла мөмкин. Шулай ҙа артыҡ өмөт юҡ, тирләп-бешеп атлай бирәм. Бына бер ваҡыт килә торғас, ҡаршыма бер нәмәнең сабып килеүен шәйләнем. Нимә булырға мөмкин? Бүре түгел. Сөнки бүре улай тота килеп кешегә һөжүм итмәҫ, быны беләм. Атайым өйрәткән. Айыу ҙа, бүре лә ҡурҡыныс түгел урманда, улар кешегә теймәй, мышы тапарға, сапсырға ынтылырға мөмкин, тип ҡабатлай ине юлға оҙатҡанда.

Мин нимәгәләр юрап маташҡансы, был януар, сабып килгән ыңғайы өҫтөмә һикерҙе. "Сай" итеп кенә ҡалдым да, икәүләшеп көрт буйлап мәтәлеп киттек. Тау аҫтынаса тәгәрәтеп, битемде, йөн башлығым сиселеп ҡалғандан туҙғыған сәстәремде ялап бөттө был. Шоңҡар! Атайымдың һунар эте!

**(Дауамы бар).**

ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ...

# ҺАН МЕНӘН ТҮГЕЛ,

## сифат менән алдырабыҙ

**Халҡыбыҙҙың символы дәрәжәһенә күтәрелгән милли музыка ҡоралыбыҙ ҡурайҙы ҡайҙан һатып алырға була, тип баш ватмайһың хәҙер. Легендар оҫта Вәкил Шөғәйепов эҙенән барыусы ҡурай яһаусылар бихисап. Баш ҡалала йыл һайын үткәрелә килгән төрлө күргәҙмәләрҙә, ил, донъя кимәлендәге сараларҙа ҡурай эшләүсе ағайҙарҙы йыш осратырға була. Шөкөр, ағайҙар быуыны ғына түгел, беҙҙең йәштәштәр ҙә, ҡустылар ҙа ата-бабаларҙан килеп еткән моңло һандуғасыбыҙ ҡурайҙы етештереүҙе үҙ ҡулына ала башланы. Мәҙәни, иҡтисади көрсөк быуындар күсәгилешлеген, оҫталар сылбырын өҙә алманы, тип һөйөнөргә урын бар. Ҡыуаныстар быны менән генә бөтмәй әле. Башҡорт оҫталары тегеге йәки был музыка ҡоралын ныҡлығы, көй сығарыу сифаты, файҙаланыу уңайлылығы яғынан да камиллаштырыуға ынтыла, уйлап тапҡанын патенттар рәүешендә законлаштырып ҡуя. Шундай оҫталарҙың береһе - Күгәрсен районы Юлдыбай ауылында йәшәүсе, даны республикабыҙға күптән билдәле Рәмил Хөснуллин. Ул ҡурайҙы һәм дөңгөрҙә ғәжәйеп ябай юл менән яҡшыртыуға өлгәшкән оҫта. Бөгөн беҙ Рәмил Хөснуллиндың өлкән улы Урал ағай менән әңгәмәләшәбеҙ. Урал ағай атаһының оҫталыҡ серҙәрен бик яҡшы үҙләштергән булып сыҡты. Ни тиһәң дә, тиҫтә йыллап атаһына ҡурай эшләшә. Әйҙәгеҙ, һүҙҙе ҡунағыбыҙға бирәйек:**









### Һимеҙ һыйыр аҫыра

Халҡыбыҙҙың "Һигеҙ һыйыр аҫырама, һимеҙ һыйыр аҫыра" тигән бик тапҡыр әйтеме бар. Ул һан менән түгел, ә сифат менән алдырырға өйрәтә. Атайым ошо әйтемде беҙгә, дүрт улына, йыш ҡына иҫкәртә тора. Юлай - Стәрлетамаҡта, Раян - Өфөлә 15-се һанлы балалар музыкаль мәктәбе директоры; мин ғаиләм менән, һәм Азат Юлдыбайҙа йәшәйбеҙ. Кинйәбеҙ Азаттан башҡа барыбыҙ ҙа өйләнгәнбеҙ. Азат та беҙҙең менән оҫтаханала эшләй, Ул думбыра, гитара эшләү менән мауыға. Раян ҡустыбыҙ - профессиональ баянсы, гитарала, думбырала ла шәп уйнай. Юлай музыка менән мауыға, компьютерҙа матур көйҙәр яҙа. Мин 15 йылдан артыҡ атайым менән оҫтаханала эшләйем .

Атайыбыҙ үҙ эшен йорт йыһаздары эшләүҙән башлағайны. Оҫтаны һәүәҫкәрҙән заманса ҡорамалдары ла, эшләгән әйберҙәрҙең һаны ла түгел, ә тауарының сифаты айырып тора. Атайҙы республикала оҫта тип ололайҙар икән, был уның тәжрибәһе һөҙөмтәһе. Уның эше бер нисә яҫылыҡтың бер нөктәлә уңышлы киҫешеүе менән бәйле. Тәүгеһе - материалдың үҙенсәлеге, икенсеһе - ваҡыт ағышы, өсөнсөһө - иң мөһиме - намыҫ талабы. Ошо өс башланғысты бер нөктәлә яраштыра алһаң ғына һин үҙ эшеңдең оҫтаһы булаһың.

Ҡурайҙы, ғәҙәттә, конус рәүешендәге формаға ҡат-ҡат итеп йоҡа ағас "йәймә"ләрен уратыу ысулы менән яһайҙар. Был ысул заманында башҡорт шпон ҡурайын етештереүҙе уңайлы итә. Атай шпон ҡурай төҙөлөшөнә инженерҙарса яңылыҡ индерҙе. Атап әйткәндә, ҡурайҙың эске ҡатын ул йәймә һымаҡ түгел, ә таҫманы спираль итеп урау рәүешендә эшләй башланы. Эске ҡатын спираль рәүештә уратып, уның тышынан ҡәҙимгесә буйға шпон йәбештереү ысулы ҡурайҙың ныҡлығын арттырҙы һәм шул уҡ ваҡытта уның ҡалынлығын кәметте. Ҡурай ни тиклем йоҡа, уның тауышы ла шул тиклем сағыуыраҡ, шәберәк сыға. Тауыш сифаты өсөн тырыша торғас, атай тағы бер асыш яһаны. Дөңгөрҙең тиреһен тарттырыуҙың яңы ысулын уйлап тапты. Быға саҡлы барабан тиреһен болттар ярҙамында ныҒытһалар, атай барабан һауыты эсенә - тиреһенең аҫтына - велосипед тәгәрмәсе ҡыуығын беркетте. Был ысул ярҙамында ул музыканттарҙы болттарҙы бушатып-ныҒытып, оҙаҡ булышыу мәшәҡәтенән арындырып ҡына ҡалманы, ә дөңгөрҙең тауышын теләгән кимәлгә көйләргә мөмкинлек булдырҙы. Был ике асышын да ул Рәсәй патент бюроһында теркәне.

Алдараҡ, оҫтаны ҡорамалдарының яңы, шәп булыуы ғына билдәләмәй, тигәйнек. Был ысынлап та шулай, әммә атай станоктарҙың да замансаларын ҡуллана. Ағастың теләһә ҡайһы урынына теләгән бер һин бирәү мөмкинлеге бирә улар. Артабан ҡурай эшләүҙең ҡайһы бер баҫҡыстарын һанап үтәйек.

### Ҡурай эшләгәндә...

Ҡурайҙың башына мундштук эшләп ҡуябыҙ. Ул, ҡурайсының ҡарамағына, саған ағасынан, йәки пластиктан эшләнә. Тәүҙә көпшәнең төп өлөшө яһала, унан һуң уға киртеп, елемгә ултыртыла торған, ҡурайсы тешенә бирешмәй торған мундштук кейҙерелә. Һәр ҡурайҙың мундштугы айырым яратыла. Мундштук ашалып китһә, уны алыштырып та бирәбеҙ. Шулай итеп, ҡурай яңыра ла ҡуя. Урталай айырып алып, теләгәндә, кире тоташтырып була торған ике өлөшлө ҡурай ҙа ошо ҡағиҙә менән эшләнә. Уларҙы бер-береһенә яратыу ҡыйынғараҡ төшә, әлбиттә. Уның ҡарауы, ҡапсығың эсенә, хатта ки, түш кеҫәңә генә һыймалы бындай ҡурайҙар юл йөрөүселәр өсөн ныҡ уңайлы. Һәр шпон ҡурайҙы тышынан да, эсенән дә лак менән ҡаплайбыҙ. Лак кипкәс, уның еҫе осоп бөтһөн өсөн, әҙер ҡурайҙарҙы махсус ҡумта эсенә һалып, улар аша һауа өрҙөртәбеҙ. Унан һуң ҡурайҙарҙы бернисә көн һалып ҡуйып еллэтәбеҙ.

Һәр ҡурай әҙер формаға урау ысулы менән эшләнә, тигәйнем инде. Уларҙың уйымдарын, диаметрын билдәләргә беҙгә Роберт Юлдашев, Азат Биксурин, Фәйез Шәрипов, Ишморат Илбәковтар үҙҙәре ярҙам итте. Шуға, ҡурайҙарҙың нотаға тура килеүенә шик юҡ. Тик бер генә үҙенсәлекте: ҡурай уйнаусының ауыҙ ҡыуышлығы, тауыш сығарыу аппараты төрлөлөгән дә күҙ уңында тоторға кәрәк. Ҡурай төрлө кешегә төрлөсә "ята", тура килә, яңғырай. Шуға ҡурай алыусыларға уны уйнап ҡарап алырға тәҡдим итәбеҙ. Тауышты, ҡурай тауышының юғарылығын үлсәй торған программа ярҙамында тикшергәс, әлеге ҡурай һиңә тап киләме, юҡмы икәне беленә. Ә профессиональ ҡурайсылар инде, беҙҙең оҫтаханаға үҙҙәре килеп, оҡшаған көпшә һайлап, ҡурай эшләтеп ала. Бынан тыш, ҡурайҙың семәрле һауыты тураһында ла әйтеп үтеү яҙыҡ булмаҫтыр. Үҙе өсөн генә уйнаусы, профессионал булмаған кешегә бер ҡурайы булһа, етә. Ундайҙарға ҡурайҙы айырым һауытҡа - ҡурай ҡынына һалып бирәбеҙ. Ике төрлө: семәрле һәм "ғәҙәти" һауыттарыбыҙ бар. Улар икеһе лә махсус станокта ағасты ҡырыу ысулы менән яһала. Ә күп ҡурай йөрөтөүселәр өсөн ҡумталар эшләйбеҙ.

### Аҡмаһа ла, тама...

Кемдер ҡурай һөнәрсеһе аҡсаны көрәп ала икән, тип уйларға мөмкин. Үҙебеҙгә килгәндә, беҙҙең маҡсат - милли музыка ҡоралдарыбыҙҙы мөмкин тиклем күберәк таратыу. Йәғни, хаҡын яһалма рәүештә өҫтәмәү яғындабыҙ. Һәр башҡорттоң яҡшы сифатлы ҡурайы булырға тейеш, тигәндә лә, бер ҡурайыбыҙ республикалағы уртаса хаҡтан осһоҙораҡ. Зарланмайбыҙ, ауыл өсөн яҡшы һаналған килем алабыҙ. Уртаса һанап сығарғанда, мин айына 15 мең самаһы эш хаҡы алам. Музыка ҡоралдары етештереүҙең миҙгелле эш икәнен дә онотоарға ярамай, ни өсөн тигәндә, йәй етеү менән музыкаль белем биреү учреждениелары, урта мәктәптәр каникулға сыға, шунлыҡтан, ҡүмәртәләп һорау кәмей. Беҙҙең эш "енелләштерелгән" режимда дауам итә. Ә инде "ҡыҙыу миҙгел" етһә, һорауселар ҙа күбәйә, әлбиттә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бала саҡта ни өсөндөр роботтар уйлап табыусы инженер-конструктор булырға хыялланғайным. Гуманитар фәндәргә ауыбыраҡ киткәс, теүәл фәндәр менән юлды аймылыштырырға тура килде. Әлеге әңгәмәнән шәхсән мин шуны аңланым: производствоны еңеллэштерәм, тормошто уңайлы итәм, тиһәң, быны һәр өлкәлә эшләп була икән! Роботтар, програмалар менән эш итмәһәң дә була. Башың һәм ғәмең генә булһын, Рәмил ағайҙағы, уның улдарындағы һымаҡ...**

Илгиз ИШБУЛАТОВ
яҙып алды.

✓ *Ир-аттар мейеһенең һул ярымшары нығыраҡ үҫешкән һәм ул логик фекерләү өсөн яуап бирә, ҡатын-ҡыҙҙыҡы - киреһенсә, һәм ижад, хис-тойғолар өсөн яуаплы.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺУЛ ҠАБЫРҒАЛА...
## йоҡлағыҙ

■ Һул ҡабырғаға ятып йоҡлау файҙалыраҡ, ти белгестәр. Кемдең үҙәге көйә - был бигерәк тә файҙалы. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ғырылдап йоҡлаусыларға ла һул ҡабырғала йоҡлау ярҙам итә. Баҡтиһәң, һул яҡҡа ятып йоҡлағанда гравитация нәҙек эсәктәге ризыҡ ҡалдыҡтарын йыуан эсәккә этеп сығара. Тимәк, аш һеңдереү эшмәкәрлеге яҡшыра. Йөрәк - кеше организмындағы иң мөһим ағзаларҙың береһе. Һул ҡабырғала йоҡлаһағыҙ, тартыу көсө йөрәк йүнәлешенә ҡарай ҡан йөрөшөнә "ярҙам итә", тимәк, йоҡлаған саҡта йөрәкте көсөргәнештән арындыра. Был ғәҙәт талаҡты ла сәләмәтләндерә. Лимфа төйөндәре кеше һаулығында ҙур роль уйнай. Тәндең һул өлөшө өҫтөнлөклө лимфатик яҡ тип иҫәпләнә, һул ҡабырғала йоҡлаған саҡта организм лимфаны әүҙемерәк фильтрлаясаҡ. Варикоз менән яфаланыусыларға мотлаҡ һул ҡабырғала йоҡларға кәрәк, ҡан әйләнеше яҡшыра. Ауырлы саҡта һул ҡабырғала йоҡлау йөрәктең ҡан әйләнешен яҡшырта, был әсәгә лә, балаға ла яҡшы тәьҫир итә.

■ Эшегеҙҙә көнө буйы ултырып эшләргә мәжбүр булһағыҙ, ярты сәғәт булһа ла физик күнекмәләргә ваҡыт бүлегеҙ, тип кәңәш итә Америка диетологы Ребекка Скритчфилд. Физик әүҙемлекте арттырыу өсөн лифт, транспорт менән ҡулланмаҫҡа ла була. Эшкә йәйәү йөрөү ҙә файҙалы. Көндөҙ нимә ашауығыҙға ла иғтибар итегеҙ. Печенье урынына кипкән емештәр яҡшы. Емеш-еләк, йогурт, эремсек тә ҡапҡылап алыу өсөн уңайлы. Төшкө ашҡа ауыр эшкәртелеүсе ризыҡтарға ҡарағанда йәшелсә, буҡталар ашау артыҡ ауырлыҡ йыймаҫҡа булышлыҡ итәсәк. Ҡайһы саҡта ашағы килеү асығыуҙы аңлатмай, организм ошо рәүешле һыу һорай. Көн дауамында һыуҙы етерлек эсегеҙ. Һәр сәғәт һайын тороп, йөрөп алырға кәрәк.

■ Көндө ҡәһүә эсеүҙән башлайһығыҙмы? Ҡәһүәне башҡа эсемлектәр менән алыштырырға ла була, ти табиптар. Мәҫәлән, 1 грейпфрут, 1 алма, семтем дәрсенгә һыу өҫтәп, блендерҙа болғап, эсергә була. Был эсемлек дәрт өҫтәй һәм бер нисә сәғәткә етерлек энергия бирә. Какао эсемлегенә ҡара борос, мускат сәтләүеге, дәрсен, кардамон тәмләткестәре өҫтәп эсергә була. Киҙеү мәлендә ул айырыуса файҙалы, сөнки специфик булмаған иммунитетты "уятып" ебәрә. Һалҡын миҙгелдә лимонлы сәй ҙә яҡшы. Цикорий ҡәһүәне алыштыра ала, тәме буйынса улар оҡшаш, кофеины юҡ. Цикорийға имбир өҫтәргә була. Тик цикорийҙы варикоз менән яфаланыусыларға эсергә ярамай. Мүк еләге лә ҡыш миҙгелендә мул була. Ул С витаминына бай. Шәкәр ҙә өҫтәп, өҫтөнә йылы һыу ҡойорға һәм витаминлы эсемлек әҙер.

■ Күңел болғанғанда, мускулдар һыҙлағанда имбир файҙалы. Ул ҡандағы шәкәр кимәлен дә түбәнәйтә, аш һеңдереүгә булышлыҡ итә. Имбирҙе Азия илдәрендә ит, балыҡ ризыҡтарына ла, сәйгә лә өҫтәйҙәр. Гингерол - төп биологик әүҙем матдә имбиргә файҙалы сифаттар өҫтәй. Яман шештең ҡайһы бер формаларын имбир менән дауалап була. Бигерәк ашҡаҙан аҫты, һөт биҙҙәре яман шешен булдырмау өсөн имбир ҡулланырға кәңәш итәләр. Был тәмләткес респираторлы инфекцияларға ҡаршы көрәшә.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Ғаиләлә малай тыуыуы - ҙур ҡыуаныс һәм оло байрам, сөнки ир затына борон-борондан буласаҡ ғаилә, ил һаҡсыһы, туйындырыусы һәм тоҡомдо дауам итеүсе тип ҡарағандар. Быңдай ҡараш-инаныуҙарҙың өмөттө аҡлауы ошо сабыйҙың биологик, физиологик, социаль һәм психик яҡтан дөрөҫ үҫешенә бәйле.**

# ИР-АТТЫ АҢЛАЙЫҠ ҺӘМ ҺАҠЛАЙЫҠ!



Малай генетик яҡтан ҡыҙҙарҙан ДНК-ла XY хромосомаһы (ҡыҙҙарҙа XX) менән айырыла. Әсә ҡарынында 12-16 аҙнала уның енси ағзалары формалаша. Малай тыуғанда, ҡағиҙә булараҡ (97 процент), йомортҡалыҡ ҡаҫаға (мошонка) төшә. 1 йәштә лә был хәл күҙәтелмәй икән, был инде ғәҙәти күренештән тайпылыу - крипторхизм тип атала.

Енси ағзаларҙың үҫеше гигиена менән ныҡ бәйле. Ата-әсә быны беренсе көндән үк иҫендә тотоп, дөрөҫ гигиена буйынса табип менән кәңәшләшергә тейеш. Сөнки гигиена талаптарының боҙолоуы парафимозға килтереүе мөмкин.

Малай беренсе айҙарҙа уҡ ҡыҙҙарҙан хәрәкәтсәнлеге, тынғыһыҙлығы, әйберҙәрҙе тоторға тырышыу рефлексы үҫеше менән айырыла. Был малайҙарҙың һул яҡ мейе ярымшары үҫеше менән аңлатыла. 1 йәштән үк техник уйынсыҡтарға ынтылыуы күҙәтелә, теле һуңыраҡ асыла. 3 йәштәрҙә малайҙар менән уйнауға өҫтөнлөк бирә башлай. Ҡыҙҙарҙа был осорҙа ундай ынтылыш күҙәтелмәй. Был мейенең уң яҡ ярымшары менән бәйле. Малайҙың бала саҡ осоро тыуғандан алып 10 йәшкә тиклем дауам итә.

10-12 йәштән пубертат осоро башлана. Енси биҙҙәрҙә гормондар секрецияһы (андрогендар, эстрогендар, соматотропин һ.б.) күҙәтелә, тауыш үҙгәрә, төктәр сыға, буйға үҫешә. 15 йәштә төнгө поллюция осоро башлана, ирҙәргә хас булған енси билдәләр барлыҡҡа килә. Пубертат осор 17-18 йәшкәсә дауам итә. Әгәр 14 йәштә енси билдәләре барлыҡҡа килеүе күҙәтелмәһә, был ата-әсәлә борсолоу тыуҙырырға тейеш. Шулай уҡ, 9 йәштән енси үҙгәрештәр башланыуы (ул артыҡ тән ауырлығы менән дә бәйле булыуы ихтимал, был саҡта буйға үҫеш тотҡарланыуы мөмкин) ла табипҡа (эндокринолог) мөрәжәғәт итеүгә сәбәп булып тора.

Тағы ла шуны әйтеп үтергә кәрәк, инфекцион йәки эпидемик паротит (свинка) сире - йомортҡалыҡтың елһенеүенә, аҙаҡ түлһеҙлеккә килтереүе ихтимал. Шуға күрә, әгәр бала шундай сир үткәрә икән, уны мотлаҡ урологҡа йәки эндокринологҡа күрһәтергә кәрәк.

13 йәштән 18 йәшкә тиклем осор гормональ үҙгәрештәр осоро ғына түгел, был психик яҡтан ҡатмарлы этап та. Уны малайҙар ҡыҙҙарға ҡарағанда ике тапҡырға ауырыраҡ кисерә. Эмоциональ яҡтан тиҙ ҡыҙыусанға әйләнеү, тәнҡиткә агрессия менән яуап биреү, йәмғиәттән, ғаиләнән алыҫлашыу тестостерон һәм башҡа гормондарҙың кинәт үҙгәреүе менән бәйле. Был осорҙа ғаилә ағзаларының дөрөҫ ҡабул итеүе, тәрбиәүи саралар, өй эштәре, спортҡа ылыҡтырыу, ҡыҙыҡһыныуҙарын хуплау, шиктәр урынына күҙгә-күҙ ҡарашып, тыныс асыҡ һөйләшеү, балаға ышаныс белдереү кеүек саралар ярҙам итә. Һәм, әлбиттә, ғаилә ағзаларының һөйөүе, ихтирамы малайҙы ҙур бәләнән һаҡлаясаҡ.

Шуны иҫтә тотоу кәрәк: 23-25 йәштә генә көслө заттарҙың ир булып етлегеүе, ир ҡорона инеүе күҙәтелә. Был инде уларҙың ҡыҙҙарға ҡарағанда 2-4 йәшкә, бигерәк тә психологик яҡтан, тотҡарлығы билдәле. Ә инде 26-30 йәштәргә был айырма юйыла бара.

Ир-егеттәр организмы, статистика буйынса, ҡан тамырҙары, инсульт, инфаркт, ҡан баҫымы, ашҡаҙандың сей яраһы кеүек сирҙәргә бирешеүсән. Был уларҙың стресҡа ҡаршы тороусанлығының түбән булыуы күрһәткесе. Ирҙәр араһында бәхетһеҙлек осраҡтары йышыраҡ осрауы күбеһенсә ауыр, зарарлы хеҙмәт шарттарында техника, механизация менән бәйле эштәрҙе башҡарыуы менән аңлатыла. Шулай уҡ ирҙәр тәүәккәллерәк. Етәксе вазифаларҙа ла ирҙәрҙең күберәк булыуы, йәмғиәт, ғаилә алдындағы яуаплылығы, иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ - былар барыһы ла стрестың үҫеүенә килтерә. Һөҙөмтәлә ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда 5-6 йылға әҙерәк йәшәй. Быға ирҙәрҙең тәмәке тартыу, спиртлы эсемлектәр менән мауығыу, зарарлы, калориялы аҙыҡ менән туҡланыу кеүек яман ғәҙәттәре тос өлөш индерә.

Үрҙә яҙып үткәндәрҙе йомғаҡлап, шуны әйтке килә: малайҙың дөрөҫ физиологик, психик үҫеше, әлбиттә, ғаиләнән, тәү сиратта, ата-әсәнән килә. Ир-егет ҡорона кергәс инде, уларҙың үҙ организмына һаҡсыл, иғтибарлы булыуы мөһим. Дөрөҫ йәшәү рәүеше, спорт менән шөғөлләнеү, интеллектуаль үҫеш, йәмғиәттә, ғаиләлә сәләмәт мөнәсәбәттәр булдырыу, маҡсаттар ҡуя белеү һәм уны тормошҡа ашырыу ғүмерҙең сифаты яҡшырыуына һәм ғүмер оҙайлығына булышлыҡ итә.

**Әлфиә АЛТЫНБАЕВА,**
**табибә.**

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# БАЛА ТАБА АЛҺАЛАР...
## ауыртыныуҙан үлер инеләр



**Ҡатын-ҡыҙҙы ғына сер йомғағы тип уйлаусылар яңылыша. Уйлап ҡараһаң, ир-егеттәр ҙә шундай уҡ кеше һәм уларҙың да үҙҙәренә генә хас үҙенсәлеге бар. Әйткәндәй, Ватанды һаҡлаусы көслө заттың мейеһе гүзәл заттыҡына ҡарағанда ҙурыраҡ, ә ҡаны ҡуйыраҡ. Тағы ниндәй айырмалыҡтары менән аптырата алалар икән? Булмаһа, әйҙәгеҙ, "серҙәренә" күҙ һалайыҡ.**

● Ир-аттың йөрәге минутына уртаса 70 тапҡыр тибә. Ҡатын-ҡыҙҙың - 80.

● Планеталағы барлыҡ ир-ат араһында һулаҡайҙар ике тапҡырға күберәк.

● Ир-аттың иммунитеты көсһөҙөрәк, ә аутоиммун сирҙәр, мәҫәлән, тарҡау склероз өс тапҡырға йышыраҡ осрай.

● Тән температураһы ҡатын-ҡыҙҙыҡына ҡарағанда 0,2 процентҡа артығыраҡ. Ысынлап та, егеттәр ҡыҙыу шул!

● Ир-аттар мейеһенең һул ярымшары нығыраҡ үҫешкән һәм ул логик фекерләү өсөн яуап бирә, ҡатын-ҡыҙҙыҡы - киреһенсә, һәм ижад, хис-тойғолар өсөн яуаплы.

● Ашҡаҙан сей яраһы һәм хроник гастрит ир-атты ике тапҡырға йышыраҡ зарарлай.

● Көслө зат стресты ауыр кисерә һәм эсенә йомола, һөҙөмтәлә эске ағзалар сире менән йышыраҡ ауырый, ә ҡатын-ҡыҙ "пар сығарып" тыныслана.

● Ҡандарының ҡуйылығы арҡаһында тромбтар барлыҡҡа килеү хәүефе ҙурыраҡ.

● Ир-ат үҙенә енси партнерҙы күҙҙәре менән эҙләй, сөнки еҫ тойоу һәм ишетеү анализаторҙары көсһөҙөрәк.

● Иң шәһүәтле осорҙары - 19-30 йәш. Ә бына аталандырыу һәләтен үлгәнсе һаҡлайҙар.

● Әгәр ир-ат бала таба алһа, ул ауыртыныуҙан үлер ине, сөнки нервылары 1,3 тапҡырға нескәрәк.

*✓ Ир-аттың урта йәш көрсөгө 40-45 йәштәр араһында күҙәтелә һәм, тәү сиратта, йәмғиәт көсләп таҡҡан тәртип схемаһына бәйле: беренсенән, 30 йәшкә тиклем кеше нимәгәлер өлгәшергә тейеш, артабан, 40 йәштә, 45 йәштә һ.б.*

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# НИНДӘЙ ЙӘШТӘ...

## еңел һуларға була?



**Британия ғалимдары үҫмерҙәрҙән алып пенсия йәшендәге 1 мең ир-ат араһында социологик тикшеренеү үткәргәндән һуң, ир-егеттәр өсөн иң уңайлы ваҡыт - ул 54 йәш, тигән фекергә килгән. Ни өсөн тап ошо йәш? Был ваҡытта күптәрҙең барлыҡ маҡсаттары тормошҡа ашҡан: карьера яһалған, өй төҙөлгән, балалар үҫкән була.**

Ә 30 йәшлек ир-аттар араһында иһә үҙ көсөнә ышанмау, алдағы билдәһеҙлек бик йыш депрессия сәбәбе булып тора. Тап шул йәштә улар нимәгә өлгәшкәненә һәм нимә эшләргә тейешлегенә йомғаҡ яһай, тап ошо йәштә күпселек ир-аттың ғаиләһендә балалар тыуа һәм уларҙың киләсәген тәьмин итеү өсөн атай кеше алһыҙ-ялһыҙ тулы көсөнә эшләргә тейеш була. 30 йәштә ир-атҡа туҡтап ял итеп алыуы ҡыйын һәм был ваҡытта ниндәйҙер уңайлылыҡ тураһында һүҙ ҙә булырға тейеш түгел. Ошо йәштәге күпселек ир-ат өсөн, бигерәк тә ғаиләле булһалар, үҙ йорто булыуы мөһим. Утыҙҙы уҙған ирҙәрҙең үҙ ҡыйығы булмауы уларҙың хәл-торошона кире йоғонто яһай. Шулай уҡ алда торған ҡартлыҡ, физик торошо насарайыуы, сәләмәтлеге ҡаҡшауы ла борсолоу тыуҙыра. Күпселеге пеләшләнеүенән һәм икенсе эйәге үҫеүҙән ҡурҡа. Шулай уҡ сәләмәтлеккә ҡағылышлы проблемалар, һуҡырайыу, импотенция, аҡса юҡлығы, айырылышыу хәүеф тыуҙыра.

Шуныһы ҡыҙыҡлы: йәш ҡыҙҙар ҡосағында икенсе йәшлеген кисергән һәм ҡарт, ялҡытып бөткән ҡатынын ташлап киткән ирҙәр, ғәмәлдә, физик көсөн һәм йәшлеген юғалтыуҙан түгел, ә яңғыҙ ҡалыуҙан ҡурҡа. Сөнки ир-ат өсөн иң мөһиме - үҙенең кәрәклеген, үҙенсәлеген, ауыр ваҡытта ярҙамға килергә әҙер булыуын тойоу. Физик энергияны юғалтыу был маҡсаттан алыҫлаштыра, олоғая килә эш урынын юғалтыу ғаиләне, балаларҙы, ҡатынды ҡарау мөмкинлегенән мәхрүм итә, үҙенең кәрәклеген, башҡаларға ярҙам итеүен, өҫтөнлөгөн юҡҡа сығара. Бик йыш оҙаҡ йылдар тормош юлдашы булған ҡатындан айырылып, иҫке ғәҙәттәрҙән, иҫке тормоштан, көйләнелгән ритмдан баш тартыу ир-ат өсөн яңы тормош кимәленә сығыу өсөн ҡулсанан ҡотолоу ысулы булып торған кеүек. Күпселек психологтар фекеренсә, ҡатын-ҡыҙға тормоштарындағы теге йәки был көрсөк осорон үтеүе еңелерәк, сөнки уларҙың йәшәүенә мәғәнә биргән тәбиғи маҡсаттары күберәк: бала табыу, уларға тәрбиә биреү, ейән-ейәнсәрҙәрҙе үҫтереү.

Ир-аттың урта йәш көрсөгө 40-45 йәштәр араһында күҙәтелә һәм, тәү сиратта, йәмғиәт көсләп таҡҡан тәртип схемаһына бәйле: беренсенән, 30 йәшкә тиклем кеше нимәгәлер өлгәшергә тейеш, артабан, 40 йәштә, 45 йәштә һ.б. Был схема аңға шул тиклем ныҡ һеңгән, уны күрмәҫкә тырышыу әҙәпһеҙлек булып һанала. Схема үҙенә күрә "карьера баҫҡысынан" үрләү өсөн ниндәйҙер кимәлдә күрһәтмә булып тора, әммә ул уҡ, нимәлер план буйынса бармай икән, абындырып тороусы ташҡа әйләнә. Иң ҡыҙығы, был планды тормошҡа ашырғанда ир-ат уның ҡайҙан барлыҡҡа килгәнен дә онота: үҙе уйлап сығарғанмы, әллә тирә-яҡтағылар көсләп таҡҡанмы?

Ҡаҙаныштар артынан даими ҡыуыу, киләсәктән һәм елеп үтеп барыусы ваҡыттан ҡурҡыу 30-50 йәшлек ир-атты даими стресс торошонда тота, шуға күрә пенсияға сығыр алдынан ул йә яуланған ҡаҙаныштары, йә уларҙы яулап өлгөрмәүе арҡаһында ниндәйҙер уңайһыҙлыҡ кисерә. Артабан инде ир-ат тыныс һулай. Уларҙың хәүефләнеп көткән ваҡыты етә, әммә ул файҙаға ғына: тынысланырға, иркен һуларға һәм тормош менән ләззәтләнергә лә мөмкин.

ӘЙТЕМСӘЛӘР

# ҺАУЛЫҠ - ҘУР БАЙЛЫҠ



### Рух сәләмәтлеге

Ығы-зығыларҙан, ваҡ-төйәк эштәрҙән арыныу әҙәмгә, әлбиттә, өҫтәмә ваҡыт, тыныслыҡ өҫтәй торғандыр.

Шуларҙы нәмәгә, ни өсөн файҙаланмаҡ, шундалыр төп хикмәт.

* * *

Тәнде түгел, рухты дауалауҙан башларға кәрәк, тип врачтар һис юҡҡа әйтмәй ҙабаһа.

Рухы ныҡтың - тәне ныҡ, рухы һауҙың - тәне һау.

Тән ауырыуын рухты һауыҡтырыу менән тиҙерәк еңергә мөмкин.

Был хәҡиҡәтте боронғо аҡыл эйәләре, табиптар әлмисаҡтан тапҡан, ҡулланған, әҙәмдәрҙе һауыҡтыра килгән.

Беҙ үҙебеҙ генә шуны белмәү йә тейешенсә иғтибарламау, ҡулланмау арҡаһында һаулығыбыҙҙы иртә юғалтабыҙ, төрлө ауырыуҙарға һабышабыҙ түгелме һуң?

### Барыһы ла үҙебеҙҙән тора

Врачтар күберәк ауырыуҙың үҙен дауалау менән мәшғүл. Ә байтаҡ ауырыуҙар дауаға ғына бирешмәй. Бындай саҡта, бигерәк тә ауырыуҙың үҙен дауаларҙан алда, уны тыуҙырған сәбәптәрҙе белергә һәм шуларҙы бөтөрөү хәстәрлеген күрергә кәрәк. Эстәге ауырыу тәнгә сыҡҡан сиҡан шикелле генә түгел бит. Ауырыу - ул тәнгә таралған зарарлы һыу кеүек.

* * *

Ауырыу, ғәҙәттә, һис көтөлмәгәндә, ҡапыл һәм һиҙҙермәҫтән йоға. Ул йәшертен, аҫтыртын рәүештә кешенең тәненә, эсенә инеп оялай. Оялай ҙа, яйлап үрсеп ята. Яйы сыҡҡан, уңайлы шарттары килгән мәлендә баш ҡалҡыта, бәреп сыға. Шуны әҙәм үҙе алдараҡ тойһа икәнсе лә, үрсеп көсәйеп еткәнсе баҫып бөтөрөп ҡуя алһасы. Тойомлау етмәй шул.

Икенсе яҡтан, ауырыуҙы белә, күрә тора, үҙебеҙ алабыҙ, эсебеҙгә һалабыҙ. Тәмәке тартыу, араҡы эсеү, күрәләтә бүтән зарарлы нәмәләрҙе үҙ-үҙебеҙгә эшләүебеҙ шулар булмай, ни булһын.

Үҙебеҙ аңғармаҫтан һалыр ауырыуҙарыбыҙ ҙа етерлек.

Ниндәйҙер үпкә, ҡайғы, хәүеф, үс-асыуҙарыбыҙҙы эскә йыябыҙ. Ул ҡайҙалыр йөрәк төбөндә бүртә башлай, хатта күңел шешенә әйләнеп китеүе бар. Шул беҙҙе гел тынғыһыҙлап, йөрәгебеҙҙе тырнап тора. Күпкә йыйыла китһә, рух ауырыуына әүерелеп китеүе мөмкин бит. Шуларҙан да ваҡытында арына белһәк икән.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Пунктуаль булығыҙ

Мөнәсәбәттәрҙең сифатын күтәреүсе мөһим аспекттарҙың береһе - ышаныслылыҡ. Теүәллек бик ҙур әһәмиәткә эйә. Һуңға ҡалыу һеҙҙең яуапһыҙлығығыҙ тураһында ғына түгел, ә осрашыу тәғәйенләнгән кешегә битарафлығығыҙҙы күрһәтә. Әгәр иртәгә иртән президент йәки премьер-министр менән осрашыу тәғәйенләнһә, үҙегеҙгә һуңға ҡалырға рөхсәт итер инегеҙме? Юҡ, әлбиттә! Ваҡытында килеү өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләйәсәкһегеҙ. Әйҙәгеҙ, хәҡиҡәттең күҙенә тура ҡарайыҡ: әгәр сәбәп булһа, ваҡытында килә алаһығыҙ. "Мин шундаймын инде!" тип үҙебеҙҙе аҡлайбыҙ. Ләкин ундай түгелбеҙ, ә бары тик шундай булыуҙың уңайлы ысулын һайлағанбыҙ. Кем менән генә осрашмағыҙ, һәр саҡ ваҡытында йөрөгөҙ! Әгәр кемделер көтөргә мәжбүр итһәгеҙ, шылтыратып, һуңлауығыҙҙың сәбәптәрен аңлатығыҙ һәм ҡасан урында булырығыҙҙы әйтегеҙ. Һеҙҙе иғтибарлылыҡ өсөн хөрмәт итәсәктәр. Һуңға ҡалған кешене көтөүҙән дә насарыраҡ нәмә юҡ.

### Исемдәрҙе хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ

Күптәр, ҡолаҡҡа май булып яғылған һүҙҙәр - үҙ исемеңде ишетеү, тигән раҫлау менән килешер. Кеше исемдәре - шәхсәнлек символы кеүек, шуға уларҙы иҫебеҙҙә тотһаҡ, мотлаҡ ихтирам һәм дуҫлыҡ яуларбыҙ. Исемдәрҙе иҫтә ҡалдырыу өсөн бер нисә минут ваҡыт китә, әммә улар һәр саҡ үҙен аҡлай. Ни өсөн кешеләрҙең исемдәрен иҫтә ҡалдырмайбыҙ? Сөнки әңгәмәсебеҙҙең нимә һөйләгәнен тыңламайбыҙ. Исемдәрҙе иҫтә ҡалдырыу өсөн башта уны дөрөҫ ишетеүегеҙгә инанығыҙ. Шунан һуң, кешенең исемен бер нисә тапҡыр эстән генә ҡабатлап, уны ҡыҙыҡлы, иҫтә ҡалырлыҡ образда күҙ алдына килтерегеҙ. Әгәр кешене хәтерегеҙгә яҙып ҡуйһағыҙ, уның исеме иҫегеҙҙә ҡаласаҡ. Бер ваҡытта ла бер кемгә лә, хатта үҙегеҙгә лә: "Мин исемдәрҙе хәтерләй алмайым", - тимәгеҙ. Шулай итеп, һеҙ төпкө аңға тормошҡа ашырға тейешле бойороҡ бирәһегеҙ. Һеҙ яңы исемде хәтерегеҙҙә ҡалдырырға тырышыу менән ул кире ҡағыла, сөнки исемдәргә хәтерегеҙ булмауына инанғанһығыҙ. Хәҙер үк кире команданан баш тартып, үҙегеҙҙе яңы исемдәрҙе еңел генә хәтерегеҙҙә ҡалдырыуығыҙ, һуңынан уларҙы еңел генә иҫләүегеҙгә ышандырығыҙ. Камиллашыуҙың өҫтөнлөклө исемлегендә исемдәрҙе иҫтә ҡалдырыу иң беренсе урында торорға тейеш. Был әңгәмәселәрегеҙгә үҙҙенең әһәмиәтен тойорға ғына түгел, ә һеҙгә ышаныс һәм үҙбаһағыҙҙы тойорға ярҙам итәсәк.

### Кешеләр менән нисек танышырға

Беренсе аҙым яһарға ҡурҡмағыҙ. Дөйөм фекергә ҡаршы килеп, күптәр донъяуи сараларҙы яратмай. Уларға ят кешеләр менән осрашыу һәм аралашыу перспективаһы идеяһы оҡшамай. Әгәр ахырынаса ғәҙел булһаҡ, бындай сараларҙа үҙен уңайһыҙ тоймаған бер генә кеше лә юҡ. Был төпкө аңыбыҙҙа башҡалар тарафынан ҡабул ителмәйәсәкбеҙ, уларға оҡшамабыҙ тигән ҡурҡыу йәшәү менән бәйле. Әгәр донъяуи сара тураһындағы уй ғына ла һеҙҙең башығыҙҙы әйләндерә һәм ҡоҫҡоғоҙҙо килтерә икән, иҫегеҙҙә тотоғоҙ: һеҙ яңғыҙ түгел. Күптәр үҙен шулай тоя. Бөтөн нәмәне тәбиғи итеп ҡабул итергә өйрәнһәгеҙ, яңы кешеләр менән танышыуы еңелерәк буласаҡ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 20 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00, 09.10 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 14.00, 03.00 Новости.
09.55 "Служебный роман". Худ. фильм.
12.15 "Служебный роман". Продолжение фильма.
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.55 "Женский журнал".
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
20.00 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Гречанка". 49-я и 50-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.10 "Вечерний Ургант" (16+).
23.45 "Познер" (16+).
00.50 Ночные новости.
01.05 "Побеждай!". Худ. фильм (12+).
03.05 "Модный приговор".
04.05 "Наедине со всеми" (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Я все помню". 1-я серия. Мелодраматический сериал (12+).
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.00 "Вольф Мессинг: видевший сквозь время". 11-я и 12-я серии. Биографический сериал (12+).

### БСТ
**Профилактика на канале**
**14.00 Новости недели.**
**14.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (6+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**17.15 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**18.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.15 "Бай" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Спортбар".**
**23.15 "Асса". Криминальная драма (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "Бәхетнамә" (12+).**

## 21 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00, 09.10 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 14.00, 03.00 Новости.
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 "Первая студия". Прямой информационный канал.
20.00 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Гречанка". 51-я и 52-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.10 "Вечерний Ургант" (16+).
23.45 Ночные новости.
24.00 "Никому не известный". Худ. фильм.
02.10, 03.05 "Большая белая надежда". Худ. фильм (12+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Я все помню". 2-я серия. Сериал (12+).
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.00 "Вольф Мессинг: видевший сквозь время". 13-я и 14-я серии. Биографический сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Динотопия". Сериал (12+).**
**11.00 "Следопыт" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Малый бизнес"**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Мелодии души" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (6+).**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.45 "Бауырһаҡ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (12+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**19.00 "Вернусь мелодией…" Памяти Арслана Янбекова (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Безымянная звезда". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00"Бәхетнамә" (12+).**
**02.15 Ш.Рахматуллин. "Моя звезда" (12+).**

## 22 ФЕВРАЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00, 09.10 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 14.00 Новости.
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет"
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым" (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон". Музыкальный конкурс.
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Одержимость". Худ. фильм (16+).
02.00 "Короли улиц-2: город моторов". Худ. фильм (18+).
03.45 "Мы не женаты". Худ. фильм (12+).
05.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Я все помню". 3-я серия (12+).
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.00 "Вольф Мессинг: видевший сквозь время". 15-я и 16-я, заключительная, серии. Биографический сериал (16+).
04.05 "Мы с вами где-то встречались". Худ. фильм.

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Динотопия". Сериал (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Следопыт" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15 "Дорожный патруль" (12+).**
**17.45 "Клио" (6+).**
**19.15 "Автограф" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Рожденные для славы". Генерал Кусимов (12+).**
**23.00 "Летят журавли". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.15 Р.Кинзябаев. "Эх, друг, Байтимер" (12+).**

## 23 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Россия от края до края".
06.40 "Отряд особого назначения". Худ. фильм (12+).
08.10 "Служили два товарища". Худ. фильм.
10.10 "Офицеры". Худ. фильм.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 Концерт, посвященный фильму "Офицеры", в Государственном Кремлевском Дворце.
13.45 "Нулевая мировая". Военно-драматический сериал (16+).
15.50 Концерт Николая Расторгуева и группы "Любэ".
17.10, 18.10 "Боевая единичка". Военно-драматический сериал (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.20 "В бой идут одни "старики". Военная драма (12+).
23.10 "Ожидание полковника Шалыгина". Худ. фильм (12+).
00.50 "Старое ружье". Худ. фильм (16+).
04.25 "Отряд особого назначения". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1
06.05 "Старики-разбойники". Худ. фильм.
08.00 "Сюрприз для любимого". Худ. фильм.
10.00, 14.20 "Затмение". Сериал (12+).
14.00 "Вести".
18.05 "Джентльмены удачи". Комедия (6+).
20.00 "Вести".
20.40 "Экипаж". Драма (12+).
23.30 "Легенда № 17". Биографическая драма (12+).
02.15 "Битва титанов. Суперсерия-72" (12+).
03.20 "Свой среди чужих, чужой среди своих". Худ. фильм.

### БСТ
**07.00, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "С праздником, защитники Отечества!"**
**08.30 "Радость нашего дома".**
**09.00 "Колонҡай". Худ. фильм.**
**09.45 "Песни маленьких солдат".**
**10.15 "Конная гвардия: умирает, но не сдается…" (12+).**
**11.00 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**11.15 "Яблоневый цвет. Мечта Хасана Ахтямова" (6+).**
**12.00 Т.Гиниатуллин. "Между небом и землей" (6+).**
**13.30 Телефильм "Надежда" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.30 "13 раунд". Худ. фильм.**
**18.00 Док. фильм "Ремесло войны".**
**19.00 "Бала-саға" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "С днем защитника Отечества!"**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Очарованный небом". Муса Гареев (12+).**
**23.00 "Белорусский вокзал". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Историческая среда" (12+).**

## 24 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.45, 06.10 "Россия от края до края".
06.00, 10.00 Новости.
06.40 "Корпус генерала Шубникова". Худ. фильм (12+).
08.20 "Это случилось в милиции". Худ. фильм.
10.10 "Раба любви". Худ. фильм (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Вам и не снилось..." Худ. фильм.
14.00 "Нулевая мировая". Военно-драматический сериал (16+).
16.00 "Они хотели меня взорвать". Исповедь русского моряка". Док. фильм (12+).
17.05 "Небесный тихоход". Музыкальная комедия.
18.40 Концерт к Дню защитника Отечества.
21.00 "Время".
21.20 "Батальон". Военная драма (12+).
23.40 "Хоть раз в жизни". Худ. фильм (16+).
01.40 "Маргарет". Худ. фильм (16+).
04.30 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1
05.40 "Кандагар". Худ. фильм (16+).
07.45 "Легенда № 17". Худ. фильм (12+).
10.35 "Джентльмены удачи". Худ. фильм.
12.20 "Ключи от прошлого". 8 серий. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Ключи от прошлого". Продолжение сериала (12+).
20.00 "Вести".
20.40 "Завтрак в постель". Мелодрама (12+).
00.30 "В тесноте, да не в обиде". Комедия (12+).
02.45 "Я его слепила". Худ. фильм (12+).

### БСТ
**07.00, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Душа - в песнях". Поет Айдар Галимов (12+).**
**08.00 "Всадник на золотом коне". Худ. фильм (6+).**
**09.15 Спектакль "Мальчишки".**
**09.45 "Песни маленьких солдат".**
**10.15, "Три письма", "Листок" (12+).**
**11.00 "Керчь! Конь мой верный, конь мой вороной…" (6+).**
**11.30 М.Карим. "И судьба - не судьба" (12+).**
**14.00 "Пламенное сердце".**
**15.30 Всемирные игры кочевников (12+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.30 "Прощание славянки". Худ. фильм.**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Алтын тирмә".**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "Хочу жилье!" (12+).**
**21.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Черный генерал" (12+).**
**23.00 "Поздняя встреча". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.00 А.Мирзагитов. "Матери ждут сыновей" (12+).**

## 25 ФЕВРАЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.30, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.30 "По законам военного времени". Худ. фильм (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.40 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Вера Алентова. "Я покажу вам королеву-мать". К юбилею актрисы (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Зависть богов". Худ. фильм (16+).
14.45 "Дачная поездка сержанта Цыбули". Худ. фильм (12+).
16.10 "Голос. Дети".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером" с Дмитрием Дибровым".
19.10 "Минута славы". Новый сезон" (12+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+).
23.00 "Невероятная жизнь Уолтера Митти" (12+).
01.00 "Жизнь хуже обычной". Худ. фильм (16+).
03.00 "Исчезающая точка". Худ. фильм 916+).
04.55 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.15 "Частный детектив Татьяна Иванова". "Венец безбрачия" Сериал (12+).
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Семейный альбом" (12+).
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Аншлаг и Компания" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Один единственный и навсегда". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "За полчаса до весны". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.55 "Путь к сердцу мужчины". Мелодрама (12+).
02.55 "Марш Турецкого". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00, 12.30, 19.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Самые правдивые истории" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "У дачи" (6+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**13.00 "Бай бакса" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байык" представляет…" (12+).**
**16.55 Волейбол. Чемпионат России. Суперлига. "Урал" (Уфа) - "Динамо" (Москва).**
**19.30 Башкирская открытая Лига КВН (12+).**
**21.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "Стройки Уфы. Народный контроль" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.30, 03.15 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 Песня года (12+).**
**23.30 "Кинзя". Худ. фильм (16+).**

## 26 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.45, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.45 "Фиктивный брак". Худ. фильм (16+).
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.25 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Свадьба в Малиновке". Худ. фильм.
14.00 "Полосатый рейс". Худ. фильм (12+).
15.40 "Экипаж". Худ. фильм (12+).
18.30 "Лучше всех!" Рецепты воспитания".
19.30 "Лучше всех!"
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Клуб Веселых и Находчивых-2017". Высшая лига (16+).
00.45 "Вечное сияние чистого разума". Драма (16+).
02.50 "Зажигай, ребята!" худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00 "Частный детектив Татьяна Иванова". "Материнский инстинкт". Сериал (12+).
07.00 "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Цена измены". Мелодрама (12+).
16.15 "Украденное счастье". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Алексей Брусилов. Служить России". Док. фильм (12+).
01.30 "Женщины на грани". Детективный сериал (12+).

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Леонардо".**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай бакса" (12+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.15 "Фанташ" (6+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (12+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Шаяниум-2016" (12+).**
**18.00 "Поспешил разбудить солнце…" Вечер памяти Рифа Туйгуна (12+).**
**19.45 "Мастера башкирского балета" (6+).**
**20.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер. com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Ловец ветра". Худ. фильм (16+).**
**02.М.Карим. "Страна Айгуль" (12+).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЭЙ, ТУҒАН ТЕЛ!




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**6-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Ҡарауылсы. Уңайһыҙланыу. Ышаныс. Кивин. Атейх. Салауат. Алеут. Кашауай. Айғыр. Ҡурсаулыҡ. Андыҙ. Сыйырсыҡ. Әсә. Арғы. Сәс. Тубырсыҡ. Мандолина. Армыт. Старшина. Көсөк. Алыш. Азамат. Ыҫлатыу. Өйөрмә. Тотҡон. Надежда. Ысул. Аҡсарлаҡ. Ҡырау. Уайльд. Ғәййәр. Шаҡмаҡ. Ала. **Вертикаль буйынса:** Әләм. Сәрмәсән. Старт. Словак. Ағуна. Атын. Рәми. Уйын. Атаҡлы. Артыш. Алырымғош. Ҡайын. Уҡлау. Сахара. Ауҙа. Ураҡ. Кеше. Гөлнара. Йома. Лингвист. Өҙөл. Нәркәс. Тауис. Ҡадир. Ылау. Тирмән. Быйма. Айыусы. Рекорд. Рәүеш. Сакс. Ихтыяж. Ҡурҡаҡ. Аждаһа.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**18 февраль "Нәркәс"** (И. Йомағолов), меломантик трагедия 12+
**19 февраль "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл 12+
**21 февраль "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+
**22 февраль "Ике төш"** (М. Багаев), драма 12+
**23 февраль "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт 12+
**24 февраль "Ғәфү ит мине"** (И. Герман), мелодрама 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**22 февраль "Яуҙы еңгән мөхәббәт"** (М. Кәрим), лирик комедия. Башлана 15.00 12+
**23 февраль "Яуҙы еңгән мөхәббәт"** (М. Кәрим), лирик комедия 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**18 февраль "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия 12+
**19 февраль "Суперзаяц"** (И. Чернышев), әкиәт. Башлана 12.00 0+
Памяти погибшим в авиакатастрофе в Краснодарском крае **21 февраль "Песни нашей памяти"**, филармония артистары 6+ **22 февраль "Ә таңдар бында тыныс"** (Б. Васильев), драма 12+
**23 февраль "Ғәлиәбаныу"** (М. Фәйзи), музыкаль драма 16+
**24 февраль "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**18 февраль "Игра в прятки"** (Н. Шувалов) 0+
**19 февраль "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова) 0+
**23 февраль "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков) 0+
**24 февраль "Волк и семеро козлят"** (А. Рахманкулова) 0+
Спектаклдәр 12.00 һәм 14.00 башлана

ИҒЛАН

Утерянные зачетную книжку и студенческий билет, выданные Башкирским государственным медицинским университетом на имя Махмутова Эмиля Шамилевича, считать недействительными.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Февраль (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (23) дүшәмбе | 6:58 | 8:28 | 13:30 | 17:01 | 18:31 | 20:01 |
| 21 (24) шишәмбе | 6:56 | 8:26 | 13:30 | 17:03 | 18:33 | 20:03 |
| 22 (25) шаршамбы | 6:54 | 8:24 | 13:30 | 17:05 | 18:35 | 20:05 |
| 23 (26) кесе йома | 6:52 | 8:22 | 13:30 | 17:07 | 18:37 | 20:07 |
| 24 (27) йома | 6:51 | 8:21 | 13:30 | 17:09 | 18:39 | 20:09 |
| 25 (28) шәмбе | 6:49 | 8:19 | 13:30 | 17:11 | 18:41 | 20:11 |
| 26 (29) йәкшәмбе | 6:47 | 8:17 | 13:30 | 17:13 | 18:43 | 20:13 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ИҒЛАН

Башҡортостан Республикаһының дәүләт автономиялы һаулыҡ һаҡлау учреждениеһы "3-сө Балалар стоматология поликлиникаһы" (Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 16/1) ошонда теркәлгән 0 йәштән алып 18-ҙе тулмаған балалар һәм үҫмерҙәрҙе ҡабул итә.

Поликлиникала медицина хеҙмәте учреждениеның эш режимына һәм белгестәрҙең эш графигына ярашлы күрһәтелә. Эш ваҡыты: дүшәмбе - йома 8.00 - 20.00. Шәмбе - 8.00 - 16.00.

1 йәшкә тиклемге пациенттар мөрәжәғәт иткән көндә сиратһыҙ ҡабул ителә. Алдан яҙылырға кәрәкмәй.

1 йәштән өлкән балалар медицина тикшеренеүе үткәндә шулай уҡ алдан яҙылмайынса көнөндә үтә.

Тиҙ ярҙам мөрәжәғәт иткән көндә күрһәтелә.

**Табипҡа яҙылыу өсөн:**

- www.gosuslugi.ru йәки rb.k-vrachu.ru электрон адресы аша интернет порталы;
- (347) 246-32-18 телефоны аша поликлиника регистратураһы;
- Кеҫә телефондары аша 09383 номеры, стационар телефондар өсөн 246-93-83 номеры аша (поликлиниканың коды - 173) контакт үҙәге;
- Поликлиникала урынлашҡан Инфомат аша.

Мотлаҡ медицина страховкаһы буйынса медицина ярҙамы алыу өсөн 14 йәшкә тиклем балаларға тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ, 14 йәштән өлкәндәргә РФ гражданины паспорты менән мотлаҡ медицина страховкаһы полисы кәрәк.

**Хөрмәтле пациенттар!** 3-сө Балалар стоматология поликлиникаһының эшен баһалау өсөн "Медицина ойошмаһының амбулатор шарттарҙа күрһәткән хеҙмәттәренең сифатын баһалаусы анкета"ны тултырыуығыҙҙы һорайбыҙ.

Анкетаның электрон варианты РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы сайтының **www.rosminzdrav.ru** "Медицина ойошмалары хеҙмәттәренең сифатын бойондороҡһоҙ баһалау" бүлегендә һәм поликлиниканың рәсми сайтында ufa-dsp3.ru урынлашҡан. Анкетаны поликлиника регистратураһында ла ала алаһығыҙ.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БӘХЕТЛЕ ЯҘМЫШЛЫ СПЕКТАКЛЬ...

## яңынан сәхнәгә ҡайта

**Театр донъяһында ғәжәйеп бәхетле яҙмышлы спектаклдәр була. РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙан артисы, драматург Илшат Йомағоловтың "Нәркәс" трагедияһы шундайҙар рәтенән. М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында ғына ла уның өс тапҡыр премьераһы була. Ошо көндәрҙә "Нәркәс" спектакле яңынан сәхнәгә сыға.**



Башҡорт трагедияһының классик өлгөһө - "Нәркәс" пьесаһын белгестәр тап шулай баһалай. Тәүге ике тапҡыр уға режиссер Лек Вәлиев мөрәжәғәт итә. 1967 йылда спектаклдең премьераһынан һуң уны ҡарарға теләүселәр шул тиклем күп була, хатта театр уны 11 көн буйына һәр кис һайын уйнай. Театр кассаһына һуҙылған сират Актерҙар йортонан уҡ башлана. Режиссер Илдар Ғиләжевтың 2001 йылда сәхнәлә ҡуйылған "Нәркәс"е лә ошондай уҡ уңышҡа өлгәшә, тамашасы театрға эркелеп йөрөй. Ул 16 йыл дауамында репертуарҙан төшмәй.

- Мин Илшат Йомағоловты бала саҡтан беләм. Был спектакль менән дә күптән танышмын. 8 класты тамамлағас, монтировкалаусы булып, башҡорт театры менән гастролдәргә сыҡҡайным. Унда "Нәркәс"тең премьераһы булды, Нәркәсте Рәмзиә Хисамова уйнаны. Һуңғараҡ атайым Ғабдулла Ғиләжев уны рус драма театрында сәхнәләштерҙе. Был спектакль менән театр сит илгә лә сыҡты, ул уның визит карточкаһына әүерелде. Сәнғәт институты студенты булараҡ, был спектаклдә күмәк сәхнәләрҙә лә, бер нисә ролдә лә уйнап йөрөнөм. Шуға ла башҡорт театры миңә режиссер булараҡ берәй әҫәр ҡуйырға тәҡдим иткәс, мин уйлап та тормайынса "Нәркәс"те тәҡдим иттем. 2001 йылда Нәркәсте Илшат ағайҙың ҡыҙы Айһылыу Йомағолова уйнаны. Бына шуның өсөн айырыуса ҡәҙерле миңә был спектакль, - ти режиссер Илдар Ғиләжев.

2001 йылда сәхнәгә сыҡҡан "Нәркәс"тең төп үҙенсәлеге шунда була - геройҙарҙың монологтары йырҙар менән алыштырыла. Композитор Урал Иҙелбаев махсус рәүештә йырҙар ижад итә. Был йырҙарҙы тамашасы ла үҙ итә һәм улар бөгөн дә яңғырай. Тик йырҙарҙың спектакль менән бергә йәшәүе яҡшыраҡ, ти композитор. Әйткәндәй, тап ошо спектаклдә беренсе тапҡыр ҡурай моңо барабанға ҡушып башҡарыла һәм бөгөн был үҙенсәлекле ысулды ҡурайсылар әүҙем ҡуллана. Мелодраматик трагедия Мәскәү, Ҡаҙан ҡалаларында, Төркиәлә үткән фестивалдәрҙә ҡатнаша.

Көтөлгән премьерала иһә төп ролдәрҙе йәштәр башҡарасаҡ. Тимерхан роленә Артур Кәбиров менән Руслан Хайсаров раҫланған. Нәркәс ролендә - Гөлнара Ҡаҙаҡбаева. Актриса билдәләүенсә, Нәркәс - ул башҡорт Джульеттаһы һәм милли театрҙа уны һәр кем башҡарырға хыяллана. "Үҙ мәленең Нәркәстәре, легендар актрисалар - СССР-ҙың халыҡ артисы Гөлли Мөбәрәкова, Башҡортостандың халыҡ артистары Рәмзиә Хисамова, Тәнзилә Хисамова, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Фирүзә Аллаярова, Алһыу Ғәлина, Айһылыу Йомағолованан һуң яуаплылыҡ ҙур. Илшат Йомағоловтың теле лә матур, шуға ла мин уны автор яҙғанса ятларға тырышам, текстан саҡ ҡына тайпылыу ҙа уның яңғырашын юғалта", - ти Гөлнара.

Һәр әҫәрҙең, спектаклдең ҡимммәтен ваҡыт күрһәтә. Йәш Нәркәс, йәш Тимерхандарҙың уйнауына ла баһаны ваҡыт ҡына бирәсәк. Хәйер, матур мөхәббәт тарихы, Илшат Хәлил улының драматургияһына хас булған, шулай уҡ ошо спектакль өсөн табылған сағыу буяуҙарҙы ваҡыт та йыуа алмаҫ, ахыры. Бәхетле яҙмышлы спектаклдәрҙең үҙенсәлеге лә ошондалыр.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлыуҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

**46. Булат Рафиҡов "Ҡурсаҡ театры", "Ҡар һыуы", "Ҡырынҡабаҡ", "Бүреләр", "Яңғыҙ иргә ҡыйын", "Көсләү" хикәйәләре.** "Булат Рафиҡов "Әҫәрҙәр"енең икенсе томына индерелгән ошо хикәйәләрҙе "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә индерергә тәҡдим итәм. Был хикәйәләрҙә ябай тормоштағы ябай кешеләрҙең яҙмыштары, хәлкисерештәре күрһәтелә. Әммә шул ябайлыҡтан да иғтибар итерлек төшөнсәләр, күҙгә-башҡа күренмәҫтәй кешеләрҙең үҙенсәлекле яҡтарын, тәбиғәттең ябай күҙгә күренмәҫ мөғжизәләрен таба белгән автор. Булат Рафиҡов хикәйәләренең тәрбиәүи йоғонтоһо ҙур. Үрҙә ҡарап үтелгән һәр әҫәрҙә ниндәй ҙә булһа яҡшы төшөнсәләргә өндәү, насарҙы миҫалдарҙа, хаталарҙа күрһәтеү күҙәтелә килә. Мәҫәлән, "Ҡырынҡабаҡ" хикәйәһендә халыҡ өсөн ғүмерен биргән халыҡ батырҙарын онотоу, уларҙың ҡәберҙәрен юғалтыу ярамағаны һәм ҡырын эштең ҡырҡ йылдан һуң да беленәсәк икәне әҫәрҙәге хәл -ваҡиғалар аша һүрәтләнә. "Ҡар һыуы"нда иһә тыуған ергә, ауылға хыянат итеүҙең, һине кеше иткән ергә төкөрөп ҡарауҙың ниндәй күңелһеҙ һөҙөмтәләр биреүе һәм аңһыҙлыҡтың, тупаҫлыҡтың ниндәй ҡурҡыныс көс була алыуы күрһәтелә. Хикәйәләрҙәге һәр герой характерында, һәр сағылыш тапҡан ваҡиғала тигәндәй йәшерен фәлсәфә ята. Бары анализлап, уйланып, фаразлап ҡына әҫәрҙәрҙең маҡсатын, тәрбиәүи төшөнсәһен аңларға була", - тип яҙа Сибай ҡалаһынан Лилиә Ғиләзетдинова.

"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иңиңдәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӘН - ҒӘЗИЗ

Йәнең һау булһа, ауырыумын, тимә, тәнең һау булһа, ярлымын, тимә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер солтандың дүрт ҡатыны булған. Барыһынан бигерәк ул дүртенсе - иң йәш һәм иң иркә ҡатынын яратҡан. Солтан уға аҫыл кейемдәр, биҙәүестәр бүләк иткән, иркәләгән, ҡәҙерләгән. Солтан иң матуры булған өсөнсө ҡатынын да яратҡан. Ер-һыу, ил гиҙгәндә ул уны һәр саҡ үҙе менән бергә алыр булған. Ул ҡасан да булһа мине ҡалдырып китер инде, тигән ҡурҡыу ҙа йәшәгән күңелендә.**

**Солтан үҙенең иң хәйләкәр, иң аҡыллы һәм түҙемле икенсе ҡатынын да яҡын күргән, дәүләт эштәрендә уға ышаныс белдергән. Был ҡатыны уға төрлө ҡатмарлы хәлдәрҙән иҫән-имен сығырға, ауырлыҡтарҙы еңергә ярҙам иткән. Өлкән ағаһы донъя ҡуйғас, уның ҡатыны йола буйынса ҡустыһына - әлеге солтанға беренсе ҡатынлыҡҡа бирелгән була. Шуға ла солтан еңгә-ҡатынына бер ниндәй яҡынлыҡ та тоймаған, уға иғтибар ҙа итмәгән. Ә еңгә-ҡатыны уны ихлас яратҡан, солтандың һәм тотош дәүләттең именлеген, байлығын һаҡлауға бар тырышлығын һалған.**

**Бер саҡ солтан ауырып киткән. Шул саҡта уның башына: "Бына хәҙер минең дүрт ҡатыным бар, ә бит үлһәм, яңғыҙ ҡаласаҡмын", - тигән уй килгән. Шунан ул дүртенсе ҡатынын саҡырып алған да, унан:"Мин һине барыһынан да нығыраҡ яраттым, иң затлы нәмәләремде һиңә бирҙем. Мин үлһәм, һин минең артымдан теге донъяға барырға әҙерһеңме?"- тип һораған. "Уйлама ла хатта!"- тигән йәш ҡатын һәм башҡа бер һүҙ ҙә әйтмәй, сығып китә һалған. Уның һүҙҙәре солтандың йөрәгенә уҡ булып ҡаҙалған. Тәрән ҡайғыға батҡан солтан өсөнсө ҡатынын саҡырған һәм: "Мин ғүмерем буйы һиңә ҡарап һоҡландым, һинең менән ғорурландым. Һин минең менән теге донъяға күсергә әҙерһеңме?" - тип һораған. "Юҡ!" - тигән ҡатыны. - Һин үлгәс, мин тағы ла кейәүгә сығасаҡмын!"**

**Солтан көс-хәле кәмей башлауға ҡарамаҫтан, икенсе ҡатынын да саҡырған һәм: "Һин һәр саҡ мин ауыр хәлдә ҡалғанда ярҙамға килдең, иң яҡшы кәңәшсем булдың. Ә хәҙер һин минең менән теге донъя ауырлыҡтарын бүлешергә ризаһыңмы?"- тип һораған. "Юҡ, был юлы мин һиңә ярҙам итә алмайым", - тигән ҡатыны. Уның яуабы солтанды тамам бөлдөргән, ул донъя менән хушлашыр сиккә еткәндә генә эргәһендә: "Мин һинең менән китәм!" - тигән тауыш ишеткән. Солтан тауыш килгән яҡҡа башын бороп ҡараған һәм ҡайғынан бөтөрөнгән беренсе ҡатынын күргән һәм: "Һиңә иғтибарлыраҡ булырға кәрәк булған икән," - тип кенә әйтә алған...**

**Беҙҙең һәр беребеҙҙең дүрт "ҡатыны" бар. Дүртенсе "ҡатыныбыҙ" - ул беҙҙең тәнебеҙ: уға матур торош бирер өсөн күпме көс, күпме тырышлыҡ һалма, беҙ үлгәс, ул барыбер беҙҙе ташлап китә. Өсөнсө "ҡатыныбыҙ" - ул беҙҙең вазифабыҙ, аҡсабыҙ, байлығыбыҙ, социаль хәлебеҙ. Беҙ үлгәс, улар икенсе кешегә күсә. Икенсе "ҡатыныбыҙ" - ул беҙҙең ғаиләбеҙ, туғандарыбыҙ. Фани донъяла нисек кенә яҡын булмаһындар, ярҙам итмәһендәр, улар беҙҙе бары тик ҡәбергәсә оҙатып ҡына ҡуя ала. Ә беренсе "ҡатыныбыҙ" - ул беҙҙең йәнебеҙ: уңыштар, вазифалар, байлыҡ һәм һәр төрлө күңел асыуҙар артынан ҡыуып, беҙ уның тураһында онотабыҙ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙе һәр ерҙә оҙатып йөрөүсе - ул йән. Уға иғтибарлыраҡ булып, уны ҡәҙерләп, беҙ фани донъяла ла, баҡыйлыҡҡа күскәс тә, үҙебеҙгә иң оло бүләк эшләй алабыҙ..."**

15822189 11006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 313/02